РУССКО-БАШКИРСКИЙ СЛОВАРЬ ПОСЛОВИЦ-ЭКВИВАЛЕНТОВ

УДК 82—84(038)-161.1-512.141
ББК 82 (я2)
Н 17

Условные сокращения

башк. — башкирская
ғәр. — от арабского слова
устар. — устаревшее слово
рус. — русская
прост. — просторечие
~ — знак, обозначающий смысловую приблизительность пословиц

Надршина Ф. А.
Н 17 **Русско-башкирский словарь пословиц-эквивалентов.** — Уфа: Китап, 2008. — 196 с.

ISBN 978-5-295-04401-4

Словарь включает около 2000 русских пословиц, поговорок и их башкирские соответствия.

В конце книги дается алфавитный список башкирских пословиц с номером основного корпуса.

Словарь предназначен для широкого круга читателей, в том числе для учащихся, студентов, преподавателей, переводчиков.

УДК 82—84 (038)-161.1-512.141
ТП — 076/08 **ББК 82 (я2)**

ISBN-978-5-295-04401-4
© Надршина Ф. А., 2008

ПРЕДИСЛОВИЕ

Пословицы и поговорки составляют важнейшую часть духовной культуры, речевого богатства многих народов. В краткой поэтической форме они затрагивают самые различные стороны человеческой жизни и пользуются у народов особым уважением: греки и римляне считали пословицы «господствующими мнениями», англичане и французы — «плодами опыта», испанцы — «врачеством души», русские — «крылатыми словами».[1] Многие тюркоязычные народы, в том числе башкиры, называли их «словами отцов и дедов», «словами древних».

К пословицам как к источнику крылатой народной мудрости обращались философы, писатели и поэты всех времен и народов. Высокий статус (авторитет) пословиц объясняется их познавательной и художественной ценностью, ибо в пословичных суждениях отражаются художественно-обобщенный, общественный и житейский опыт многих поколений, их мировоззрение, нравственные и эстетические идеалы, характер оценки жизненных явлений, поведенческих норм людей.

Вводимые в речь как готовые анонимные цитаты, пословицы, весьма часто обладающие переносным значением, в силу своей образности, лаконичности помогают яснее выразить мысль, полнее аргументировать доводы, украшают речь, делают ее живой, выразительной и меткой. Недаром гласит народная мудрость — «Красота подбородка — борода, красота речи — пословица» *(башк.)*, «Без углов дом не строится, без пословицы речь не молвится» *(рус.)*.

Исследователи, занимающиеся сравнительным изучением пословиц и поговорок разных народов, обратили внимание на то, что многие пословичные суждения по смыслу

---

[1] Иллюстров И. И. Жизнь русского народа в его пословицах и поговорках. 3-е изд. М., 1915.

сходны между собой, а некоторые из них совпадают не только по содержанию, но и по своему внешнему оформлению. (Последнее — часто встречающееся явление среди пословиц близкородственных языков).

Сходство пословиц разных народов обусловлено в одних случаях генетическими связями, в других — проявлением общих типологических закономерностей, в-третьих — историко-культурными связями. Г. Л. Пермяков, автор цикла работ по структурной паремиологии, главной причиной сходства пословиц считает логическое содержание пословичных изречений, характер передаваемых ими отношений между вещами, а разницу между ними видит в образном строе, в своеобразии их реалий и бытовых понятий.[2] Указанные положения не являются взаимоисключающимися, а наоборот, тесно связаны.

При сравнительном изучении пословиц и поговорок русского и башкирского народов обнаруживается различная степень сходства. Приняв за основу опробированный принцип распределения материала по сходству вербальных признаков[3], различаются три типа соответствий: 1) моноэквивалентные пословицы и поговорки (полное совпадение образов и лексических единиц: например, *Голодной курице снится просо (рус.). — Тауык төшөнә тары керә (баш.). — Ворон ворону глаз не выклюет (рус.). Ҡарға күҙен карға сукымай (башк.);* 2) смысловые параллели при частичном вербальном различии: *Чей конь, того и воз (рус.). Ат кемдеке булһа, йүгән шуныкы (баш.). — Чей конь, того и уздечка.* Эти пословицы почти моноэквиваленты, разница только в одном слове: *воз — йүгән (уздечка); Не дал Бог свинье рогов, а бодуща была бы (рус.). Һөзгәк һыйырға Хоҙай мөгөҙ бирмәгән (башк.). — Бодущей (бодливой) корове Бог рог не дал;* 3) семантические сходства при полном вербальном различии: *Случай надо ловить за волосы: ускользнет — не поймаешь (рус.). Ямғыр яуғанда силәгеңде тотоп кал (башк.). — Сумей подставить бадью, когда идет дождь.*

Пословиц, относящихся к типу моноэквивалентных, сравнительно немного, преобладают пословицы и поговор-

---

[2] Пермяков Г. Л. Избранные пословицы и поговорки народов Востока. М., 1968. С. 26.

[3] Созинова Э. М. Общее и специфическое в паремиях-эквивалентах (на материале башкирского, русского и английского языков). Автореф. дис. ... канд. филол. наук. Уфа, 2006. С. 8—9.

ки, между которыми не существует отношения абсолютной эквивалентности.

Экономическое, культурное и языковое общение между народами создает предпосылки для взаимопроникновения фольклорных материалов, в том числе пословиц и поговорок. Такие пословицы, как *Кайҙа беҙ юк, шунда якшы — Там хорошо, где нас нет; Дуңғыҙҙы табынға ултыртһаң, аяғын өҫтәлгә һалыр — Посади свинью за стол, она и ноги на стол* (исконно башк. *Ишәк түшәк кәҙерен белмәҫ — Осел не будет знать цену перины*), вошли в состав башкирских через русский язык как кальки. Заимствования оформляются по нормам и правилам башкирского языка и законам поэтики афористических произведений.

В целом, в пословицах и поговорках с необычайной выразительностью запечатлены национальные особенности каждого народа, в то же время в них ярко отражено то общее, что сближает народы.

ФАНУЗА НАДРШИНА

РУССКИЙ АЛФАВИТ
РУС АЛФАВИТЫ

Аа	Жж	Нн	Фф	Ыы
Бб	Зз	Оо	Хх	ь
Вв	Ии	Пп	Цц	Ээ
Гг	Йй	Рр	Чч	Юю
Дд	Кк	Сс	Шш	Яя
Ее	Лл	Тт	Щщ	
Ёё	Мм	Уу	ъ	

БАШКИРСКИЙ АЛФАВИТ
БАШҠОРТ АЛФАВИТЫ

Аа	Ее	Ҡҡ	Пп	Фф	ъ
Бб	Ёё	Лл	Рр	Хх	Ыы
Вв	Жж	Мм	Сс	Һһ	ь
Гг	Зз	Нн	ҫ	Цц	Ээ
Ғғ	Ии	ң	Тт	Чч	Әә
Дд	Йй	Оо	Уу	Шш	Юю
Ҙҙ	Кк	Өө	Үү	Щщ	Яя

А

1. **Авось, да небось, да как-нибудь.**
   Сәпкә төймәһә — йәпкә.
   Тейһә — тейенгә, төймәһә — ботакка.

2. **Аппетит приходит во время еды.**
   Аш янында аш үтә.

Б

1. **Бабьему хвосту нет посту.**
   Ҡатын-ҡыҙҙың сырағы ҡырҡ,
   Бере янмаһа, бере яныр.

2. **Беда беду накликает.**
   Бәлә бәләғә ҡул бирә.

3. **Беда висит над головой.**
   Бәлә баш өҫтөндә,
   Ҡаза ҡаш өҫтөндә.

4. **Беда на беду, несчастье на несчастье.**
   Бәләһе артынан ҡазаһы эйәрә.

5. **Беда не приходит одна.**
   Бәлә-ҡаза яңғыҙ йөрөмәй.
   Ҡайғы килһә, игеҙ килә.

6. **Беда не по лесу ходит, а по людям.**
   Бәлә ағас башынан йөрөмәй, әҙәм башынан йөрөй.
   Сүп өҫтөнә сүмәлә.

7. **Беда приспела, наперед не сказалась.**
   Бәлә ҡыңғырау тағып килмәй.

8. **Бедность не порок.**
   Ярлылыҡтың ояты юҡ.
   Байлыҡ морат түгел,
   ярлылыҡ оят түгел.

9. **Беду не ждут, она сама приходит.**
Ҡайғы (бәлә) кешенән һорап килмәй.

10. **Беды мучат, да уму учат.**
Михнәт кейрәтә, аҡылға өйрәтә.

11. **Без болезни и здоровью не быть.**
Ауырымаҫ тән булмаҫ.

12. **Без ветра и дерево (камыш) не качается.**
Елһеҙ тирәк тә (япраҡ та) һелкенмәй.

13. **Без ветра камыш не качается.**
Елһеҙ тирәк һелкенмәй.

14. **Без веры — сатана.**
Өметһеҙ — шайтан.

15. **Без времени и рок не ударит.**
Ваҡыты етмәй яҙмыш сәғәте һуҡмай.

16. **Без дела жить — только небо коптить.**
Эшһеҙ ғүмер — утһыҙ күмер.

17 **Без денег на базар не ходят.**
Аҡсаһыҙ баҙарға бармайҙар.

18 **Без детей жить — только небо коптить.**
Балаһыҙ ғүмер — һүнгән күмер.

19 **Без друга — на сердце вьюга.**
Дуҫың янында булмаһа, донъяның йәме юҡ.

20. **Без корня и полынь не растет.**
Тамырһыҙ әрем дә үҫмәй.

21. **Без кота мышам раздолье.**
Бесәй булмаған ерҙә сыскан ҡотора.

22. **Без муки нет науки.**
Белем алыу — энә менән ҡойо ҡаҙыу.

23 **Без отца — полсироты, а без матери — вся сирота.**
Атаһыҙ бала етем түгел, әсәһеҙ бала етем.

24. **Без труда не вынешь и рыбку из пруда.**
Хитланмай һыуҙан этләй ҙә тота алмаҫһың.
Һонолмай һыу ҙа эсеп булмай.

25. **Без труда нет плода.**
Аяғың тәп итмәй, ауыҙың сәп итмәй.
Бил бекмәй, белен дә бешмәй.

26. **Без порток, а в шляпе.**
Ыштанһыҙ билгә — ҡайыш бау.

27. **Без счастья и в лес по грибы не ходи.**
Уңмаған юлды ҡыума.

28. **Без хозяина дом сирота.**
Хужаһыҙ йортта бәрәкәт юҡ.

29. **Без языка нет Отчизны, без Отчизны нет жизни.**
Теле юҡтың иле юҡ, иле юҡтың көнө юҡ.

30. **Белая змея, черная змея — все та же змея.**
Йыландың аҡы ла йылан, ҡараһы ла йылан.

31. **Белое очернить легко.**
Аҡты ҡарайтыуы еңел.

32. **Береги платье снову, а честь смолоду.**
Кейемде — яңы саҡтан, намыҫты йәштән һаҡла.
Мейес һалғас та аҡлана, намыҫ йәштән һаҡлана.

33. **Береженого Бог бережет.**
Һаҡланғанды һаҡлармын, — тигән (Алла).
Ауырыуҙы алдан ал.

34. **Бери быка за рога.**
Балыҡ тотһаң, башынан тот.

35. **Берись дружно, не будет грузно.**
Күмәк ҡулға эш түҙмәй.

36. **Берущему и шесть мало, дающему и пять много.**
Алғанға алты ла аҙ, биргәнгә биш тә күп.

37. **Беспечному сон сладок.**
Ҡайғыһыҙға йоҡо тәмле (йоҡо моң).

38. **Бесплатно только соловьи поют.**
Буштың атаһы үлгән.

39. **Бесстыжих глаз и дым неймет.**
Эт күҙе тетән белмәҫ.

40. **Бесчестье хуже смерти.**
Үлемдән оят көсле.

41. **Бешеная собака и хозяина кусает.**
Эт ҡоторһа, эйәһен тешләй (талай).

42 **Били Фому за Еремину вину.**
Аҡ эт бәләһе ҡар(а) эткә.

43 **Бился, колотился, ничего не добился.**
Тулҡын тулап ярҙан сыға алмай.

44. **Битая посуда два века живет.**
Шығырлауыҡ ағас ҡырҡ йыл ултырыр.

45. **Битого все бьют.**
Баҫымсаҡты баҫмалатҡан күп булыр.
Йығылғанды туҡмаусы күп була.
Иығылған ағаҫҡа балта сабыусы күп була.

46. **Близок локоть, да не укусишь.**
Терһәк яҡын да — тешләп булмай.

47. **Блин — не клин, брюха не распорет.**
Аш — ашҡа, урыны — башҡа.

48. **Блины и то надоедают.**
Күп ашаһаң, бал да ялҡыта.
Күпкә китһә, майлы бутҡа ла туйҙыра.

49. **Блины пекут, так подмазывают.**
Майһыҙ таба ҡупмай.

50. **Богатому — как хочется,**
а бедному — как можется.
Хәлле — хәленсә, ярлы — дарманынса.

51. **Богатство — вода: пришла и ушла.**
Донъя малы — дуңғыҙ ҡаны.
Байлыҡ — бер айлыҡ.

52. **Богатство на час, а ум до веку.**
Байлыҡ — бер айлыҡ,
аҡыл — мәңгелек.

53. **Богатство начинается с иголки.**
Байлыҡ башы — бер ҡаҙыҡ.

54. **Богатый совести не купит, а свою погубит.**
Байлыҡ кешенең күңелен ташҡа, күҙен аҡҡа
әйләндерә.

55. **Богаты, так здравствуйте,**
а убоги, так прощайте!
Сәйем булһа — Сәйфи ағай,
сәйем булмаһа — кәк(е)ре лә бөк(ө)рө.

56. **Богатыря узнаешь на поле брани.**
Батыр яуҙа беленер (һыналыр).

57. **Бог даст день, даст и пищу.**
Йән биргәнгә йүн биргән.

58. **Бог даст, и в окно подаст.**
Яҙған ризыҡ теш һындырып керер.

59. **Бог-то Бог, да сам не будь плох.**
Аллаға ышан, үҙең ҡымшан.

60. **Бодливой корове Бог рог не дает.**
Һеҙгәк һыйырга (тәкәгә) Хоҙай мөгөҙ бирмәгән.

61. **Болезнь входит пудами, а выходит золотником.**
Ауырыуҙың килеүе ботлап булһа ла, сығыуы мыҫҡаллап.

62. **Болезнь проходит, а привычка — никогда.**
Ауырыу китһә лә, ғәҙәт китмәй.

63. **Болен — лечись, а здоров — берегись.**
Ауырыуҙы алдан ал.

64. **Болтуна язык до добра не доведет.**
Бәләне әҙәм теленән таба,
хайуан мөгеҙәнән таба.
Ҡош тоҙаҡҡа томшоғо менән,
кеше теле менән эләгә.

65. **Больной и сам не свой.**
Имгә ҡалған имгәкле.

66. **Боль от раны пройдет, а от дурного слова никогда.**
Ҡул яраһы китә, тел яраһы китмәй.

67. **Больше знай, да меньше болтай.**
Күпте белһәң дә, әҙ һейлә.

68. **Большой говорун — плохой работун.**
Күп һейләгән, әҙ эшләр.

69. **Большому кораблю — большое плавание.**
Киң йылғаға — киң көймә.

70. **Болящий ждет здравия до смерти.**
Өмөтлө кен күрер, өмөтһеҙ гүр керер.

71. **Борода выросла, а ума не вынесла.**
Һаҡалы үҫкән, аҡылы үҫмәгән.
Ҡартайғансы аҡыл ултырмаған.

72. **Бояться воров — не держать коров.**
Сиңерткәнән ҡурҡҡан иген икмәгән (икмәҫ).

73. **Брат ли, сват ли, а денежка не родня.**
Баш ҡәрҙәш булһа ла, мал ҡәрҙәш түгел.

74. **Бритва скрежет, а слово режет.**
Телдән тел уҙа, ҡулдан ҡул уҙа.

75. **Брось хлеб-соль за лес — после найдешь.**
Изгелек ерҙә ятып ҡалмай.

Изгелөк ит тә, һыуға һал — балык белер,
балык белмәһә, Халик (Хоҙай) белер.

76. **Брюхо — злодей, до ада доведет.**
Тамак тамукка төшөрә.

77. **Будет и на нашей улице праздник.**
Беҙҙең урамда ла байрам булыр әле.

78. **Будешь жив, будешь и сыт.**
Йән биргәнгә йүн биргән.
Асык ауыҙ ас калмаҫ.
Илдә сәпсек үлмәҫ.

79. **Будешь сладок — разлижут, будешь горек — расплюют.**
Йыуаш булһаң — баҫырҙар, уҫал булһаң — аҫырҙар,
уртаса уҫал булһаң — ил ағаһы яһарҙар.

80. **Будешь трудиться — будешь кормиться.**
Эшләгән — тапкан, ауыҙына капкан.

81. **Будто из одной плахи вытесаны.**
Һүйгән да каплаған.

82. **Будь большой, а слушайся меньших.**
Бер олоно, бер кесене тыңла.

83. **Будь лишь мед, мух много нальнет.**
Бал булыуын булһа, себендәре әҙер тора.

84. **Будь своему слову хозяин.**
Әйткән һүҙеңә хужа бул.
Әйткән һүҙеңдә тора бел.

85. **Будь хоть пес, лишь бы яйца нес.**
Үгеҙ булмағайы сурт (черт) булһын,
балаларға һөт булһын.

86. **Был бы запевала, а подголоски найдутся.**
Башлаусыһы булһа, кеүәтләүсеһе табыла.

87. **Был бы хлеб, а зубы сыщутся.**
Аты булһа, йүгәне табылыр.
Арышы булһа, үлсәүе табылыр.

88. **Был, да сплыл.**
Ай күрҙе, ҡояш алды.

89. **Была бы голова, а шапка найдется.**
Башы булһа, бүрке табылыр.

90. **Была бы охота, заладится всякая работа.**
Эшләһәң, эш ҡарышмай.

91. **Была бы собака, а камень найдется.**
Әмәленә күрә ғәмәле.

92. **Была бы шея, а хомут найдется.**
Муйыны булһа, ҡамыты табылыр.

93. **Была не была!**
Ни булһа, шул булыр.

94. **Были бы пирожки, будут и дружки.**
Аш-һыу булһа, дуҫ-иш табыла.

95. **Было времечко, и мы ели семечки.**
Бар ине шәп сақтар, кеҫә тулы борсақтар.

96. **Было, да быльем поросло.**
Булыры булган, буяуы уңған (һеңгән).

97. **Быстрого пса не любит лиса.**
Эт йүгереген бүре һеймәҫ.

В

1. **В бедах человек умудряется.**
Бәлә күргәндең белеге артыр.

2. **В борьбе силу одолевает ученье.**
Беләге йыуан берҙе йығыр,
белеме йыуан меңде йығыр.

3. **В воду глядит, а про огонь говорит.**
Үҙе ут сәсә, үҙе һыу һибә.

4. **В глаза ласкает, а за глаза лает.**
Кереп ашымды ашай, сығып башымды ашай.
Алдымда бер төрлө, артымда — икенсе.

5. **В гости собирайся, дома наедайся, в шелк одевайся.**
Туйға барһаң, туйып бар, ебәк кейем (әйбер) кейеп бар.

6. **В гостях воля хозяйская.**
Ҡунаҡ — хужаның ишәгө.

7. **В гостях хорошо, а дома лучше.**
Ҡунаҡта рәхәт, өйҙә бәрәкәт.

8. **В деньгах корень всех зол.**
Бәлә башы — бер аҡса.

9. **В долг брать легко, а платить тяжело.**
Бурысҡа алыуы еңел булһа ла, түләүе ауыр (ҡыйын).

10. **В долгах, как в шелках.**
Бурыс муйындан.

11. **В дороге хлеб не помеха.**
Юлға сыҡһаң, өс көнлөк аҙығың яныңда булһын.

12. **В единении (единстве) — сила.**
Береклектә — тереклек.
Берлектә — көс.
Ише күптең көсө күп.
Күпселек ҡайҙа — көс шунда.

13. **В здоровом теле — здоровый дух.**
Сәләмәт тәндә сәләмәт аҡыл.

14. **В игре и дороге узнаются люди.**
Ир сәфәрҙә беленер.

15. **В каждой шутке есть доля правды.**
Уйнап әйтелһә лә, уйлап әйтелгән.
Уйнап һөйләһәң дә, уйлап һөйлә.

16. **В какой мешок свинью не суй, ее все равно слышно.**
Бүре балаһын бүреккә һалһаң да, урманға ҡарай (илөкмәй).

17. **В ком есть стыд, в том есть и совесть.**
Оят барҙа хая бар.

18. **В костюме Адама.**
Инәнән тыума шыр яланғас.

19. **В колхоз войдешь — богато заживешь.**
Яңғыҙ булып ни ҡырҙың? Колхоз булып, өй ҡорҙоң.
(пословицы советского периода)

20 **В лесу медведь, а в дому мачеха.**
Үгәй инә — һарымһаҡ.

21. **В лес дров не возят, в колодец воды не льют.**
Урманға утын тейәп бармайҙар.
Урманға утын ташымайҙар.

22 **В лихости и зависти нет ни проку, ни радости.**
Көнсөл көн күрмәҫ.

23 **В меду и подметку съешь.**
Май (бал) сабата йоттора.

24 **В мире жить — с миром жить.**
Илдә йәшәү — ил менән йәшәү.

25. **В незрелом яблоке вкуса нет.**
Өлгөрмәгән емештең тәме юҡ.

26. **В несчастье не унывай, а печаль одолевай.**
Ҡайғыға башың эймә.

27. **В нужде и кулик соловьем свищет.**
Башыңа төшһә, башмаҡсы булаһың.

28. **В нужде и соль сладкой кажется.**
Донъя баҫһа, тоҙ ҙа татлыға әйләнә.

29. **Во время оно.**
Нух заманында.

30. **Во всем знай меру.**
«Кәрәк»кә лә сама кәрәк.

31. **Во всех годах, да не во всех умах.**
Ат аҙғыны тайға эйәрә.

32. **Во всяком подворье свое поверье.**
Һәр илдең үҙ йолаһы.
Күпме ил — шунса йола.
Иле башҡаның дине башҡа.

33. **В огне брода нет.**
Уттың ялы-ҡойроғо юҡ.

34. **В одной руке двух арбузов не удержишь.**
Бер юлы ике кәмә ҡойроғон тота алмаҫһың.
Икә рәхәт бергә килмәй.

35. **В одном кармане смеркается,**
в другом заря занимается.
Иомһа — йоҙроғонда, асһа — усында.

36. **В одно перо и птица не родится.**
Аттан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа.

37. **В одно ухо влетает, в другое вылетает.**
Бер ҡолағынан (ҡолағымдан) керә, икенсеһенән сыға.

38. **Во многословии не без пустословия.**
Күп һүҙ — сүп һүҙ.

39. **В открытую дверь не ломятся.**
Асыҡ ишекте шаҡып инмәйҙәр.

40. **В первый день гость — цветок,**
во второй — соловей,
в третий — палку бери и бей.
Ҡунаҡ өс көңгә — ҡунаҡ, унан ары — муйнаҡ.

41. **В подполье и мышь геройствует.**
Үҙ ояһында эт тә юлбарыҫ.
Эт ояһында көслө.

42. **В поле и жук мясо.**
Ит күрмәгәнгә үпкә лә танһыҡ.
Булмаганда арыш икмәге лә күмәс (ҡалас).

43. **В поле четыре воли.**
Дүрт яғың (яғы ла) ҡибла.

44. **В пустой бочке звону больше.**
Буш мискә нығыраҡ дыңғырлай.
Буш мискәнең (арбаның) дыңғыры ҙур (көслө).

45. **В работе «ох», а ест за трех.**
Эшкә булһа — «уф, табаным»,
Ашҡа булһа — «килтер табағым».

46. **В решете воду не носят.**
Иләк менән һыу ташымайҙар.

47. **В руке огонь горит.**
Ҡылды ҡырҡҡа яра.
Ҡар өҫтөндә ҡаҙан ҡайната.

48. **В своей конуре и собака сильна.**
Эт ояһында көсле.

49. **В своем гнезде и ворона коршуну глаза выклюет.**
Үҙ ояһында эт тә юлбарыҫ.

50. **В своем пепелище и курица бьет.**
Өйрәнгән ер яу ҡайтара.
Һәр кем үҙ өйөндә батша.

51. **В семье не без урода.**
Аттан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа.
Атаға оҡшап ул тыумаҫ, инәгә оҡшап ҡыҙ тыумаҫ.
Ғаилә ғәриптеҙ булмай.

52. **В сентябре и у воробья пиво.**
Сентябрҙә һин дә бер, мин дә бер.

53. **В сиротстве жить — только слезы лить.**
Яңғыҙ — ярлы, ғүмере — зарлы.

54. **В темноте и гнилушка светится.**
Һандуғас юк йылда карға дан тотор.

55. **В тесноте, да не в обиде.**
Күңәлең киң булһа, тар ерғә лә һыйырһың.
Өйәм тар (кыçык) булһа ла, күңәләм киң.

56. **В тихом омуте черти водятся.**
Тымыçык күлде корт баçыр.
Тымык күлдә (һыуça) корт уйнай (мыжғый).
Йыуаштан йыуан сыға (сыккан).
— Өндәшмәçтә ниçәр бар?
— Урты тулы таштар бар.

57. **В Тулу со своим самоваром не ездят.**
Урманға утын ташымайçар.

58. **В уборе и пень хорош.**
Ағас күркә — япрак, әçәм күрке — сепрәк.

59. **В чем мать родила.**
Инәнән тыума шыр яланғас.

60. **В чернолесье не без зверя,**
в людях не без горя.
Урман — кейекһеç, әçәм көйәкһәç булмаç.

61. **В чужих руках пирог больше, да и ломоть кажется толще.**
Кешенең (күршенең) тауығы каççай, катыны кыççай.

62. **В чужой душе — не вода в ковше, не разглядишь сразу.**
Кеше кауын түгел, эсен ярып карап булмай.

63. **В чужой монастырь со своим уставом не ходят.**
Кем арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың.

64. **В чужом глазу сучок (соринку) видит, в своем — бревна не замечает.**
Үç босоғон* күрмәй, кеше босоғон куймай.

---

* *Босок* — ғәйеп, етешһеçлек.

Кеше күҙендәге сүпте күргәнсе, үҙ күҙеңдәге бүрәнәне алып ҡуй.

65. **В чужую душу не влезешь.**
Кешенең эсенә кереп булмай.

66. **В чью телегу сядешь, того и песню поешь.**
Кем арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың.

67. **В шутку сказано, да всерьез задумано.**
Уйнап әйтелһә лә, уйлап әйтелгән.
Уйнап һөйләһәң дә, уйлап һөйлә.

68. **Вали кулем, потом разбери.**
Минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе.

69. **Вверх не плюй, себя пожалей.**
Үргә төкөрмә, битеңә төшөр.
Елгә ҡаршы төкөрмә, үҙеңә төшөр.

70. **Вдали все кажется лучше.**
Ағиҙелдең аръягында бер әнәгә бер һыйыр.

71. **Век протянется — всего достанется.**
Донъя бер алдын, бер артын күрһәтер.

72. **Велик осел, да воду возят,**
мал сокол, да на руках носят.
Баҡыр ҙур ҙа, ҡаҙан ямайҙар,
алтын бәләкәй ҙә, түшкә ҡаҙайҙар.

73. **Велико дело «спасибо».**
Бер рәхмәт мең бәләнән ҡоткара.

74. **Велик пень, да дурень.**
Ҡабыҡ ҡалын булһа ла, хаҡы бер тин.

75. **Велик свет, кого в нем только нет.**
Был донъяның кеме юҡ.

76. **Велик телом, да мал умом.**
Ҙурлыҡ буй менән түгел, уй менән.

77. **Вертит языком, что корова хвостом.**
Тел дә яңаҡ үҙендә.

78. **Веселись, играй, да дело знай.**
Уйнауын уйна, эшеңде лә уйла.
Уйна ла көл, эшләргә лә бөл.

79. **Весенний лед толст, да прост, осенний тонок, да цепок.**
Яҙғы боҙға яҫтыктай булһа ла ышанма,
көҙгө боҙға көҙгөләй булһа ла ышан.

80. **Весь сыт, а глаза голодны.**
Үҙе туйган, күҙе туймаған.

81. **Весенний день год кормит.**
Яҙғы көн йыл туйҙыра.

82. **Весна да осень — на дню погод восемь.**
Яҙғы көн — ярты аҡыл,
көҙгө көн — арт аҡыл.

83. **Ветра в рукавицу не поймаешь.**
Иләк менән һыу ташымайҙар.

84. **Ветром море колышет, молвою — народ.**
Илдә илле, береһенән-береһе елле.

85. **Вещь хороша новая, а друг — старый.**
Кейемдең яңыһы, дуҫтың иҫкеһе яҡшы.

86. **Взойдет солнышко и на наше окошко.**
Беҙҙең урамда ла байрам булыр әле.
Беҙҙең тәҙрәгә лә ҡояш төшөр әле.

87. **Взял у черта рогожу, отдашь бубен и кожу.**
Йүгән өҙһәң, ҡайыш түләрһөң.
Йүкә өҙһәң, ҡайыш түләрһең.

88. **Взялся за гуж, не говори, что не дюж.**
Тәртә араһына бер кергәс, тарта алмайым, — тип торма.

89. **Видно птицу (сокола) по полету.**
Һандуғас һайрауынан билдәлө.

90. **Видит на три аршина под землей.**
Ер аҫтында йылан көйшәгәнен дә белә.
Ете ҡат ер аҫтында йылан кейшәгәнен ишетер.

91. **Видит око, да зуб неймет.**
Күҙ күрһә лә, теш үтмәй.

92. **Видно мастера по работе.**
Балта оҫтаһы балтаһынан билдәле.
Оҫтаның ҡулы башҡа.
Һәләтлене һәнәк тотоуынан белеп була.

93. **Виноват не тот, кто ошибается, а тот, кто не признает свою ошибку.**
Хаталаныу ғәйеп түгел, хатаны танымау ғәйеп.

94. **Виноватый своей тени боится.**
Ғәйепле үҙ күләгәһенән үҙе ҡурҡа.

95. **Вино с разумом вместе не ходят.**
Араҡы яратҡан — аҡылын тараткан.

96. **Вместе тесно, а врозь скучно.**
Йыраҡ булһа — кешнәшер,
яҡын булһа — тешнәшер.

97. **Вода мутнеет с истока.**
Һыу башынан болғана.

98. **Вода не вода, уха не уха.**
Ни он һыуы, ни тоҙ һыуы.

99. **Воду не мути, придется воды напиться.**
Ҡойоға текәрмә, аҙаҡ һыуын эсерһең.

100. **Воду толочь, вода и будет.**
Һыу яҙып, май сыҡмаҫ.
Сүбәк сәйнәп, май сыҡмаҫ.

101. **Возле печи постоишь — раскраснеешься, возле сажи — замараешься.**
Ҡаҙанға яҡын барһаң, ҡараһы йоғор,
яманға яҡын барһаң, бәләһе йоғор.

102. **Война — забава королей.**
Байҙың ыҙғышы, батшаның һуғышы бөтмәҫ.

103. **Волка ноги кормят.**
Бүрене аяғы туйҙыра.

104. **Волк волка не съест.**
Айыуҙы айыу ашамаҫ, бүрене бүре ашамаҫ.

105. **Волк в овечьей шкуре.**
Һарык тиреһе ябынған бүре.

106. **Волк линяет, но нрав не меняет.**
Суртандың үҙе үлһә лә, теше үлмәй.

107. **Волк не пастух, козел не огородник.**
Кәзәне кәбеҫтә ҡарауылларға ҡуймайҙар.

108. **Волков бояться — в лес не ходить.**
Бүренән ҡурҡһаң, урманға барма.

109. **Вольному — воля, а спасенному — рай.**
Киткәндәргә юл яҡшы, ҡалғандарға өй яҡшы.

110. **Вольно собаке на небо лаять.**
Ҡуян тауға үпкәләгән, тауҙың иҫендә лә юҡ.
Эт өрөр, бүре йөрөр.

111. **Вора миловать — доброго погубить.**
Яманға ярҙам иткән, яҡшыны ярҙан эткән.

112. **Вор лучше пожара.**
Бурҙан ҡала, уттан ҡалмай.

113. **Воробьев бояться — проса не сеять.**
Сиңерткәнән ҡурҡҡан иген икмәгән (икмәҫ).

114. **Ворона к вороне, а сорока к сороке.**
Ишәй ишө менән, Ҡушай ҡушы менән.
Ишәй ишен таба, Ҡушай ҡушын таба.

115. **Ворон ворону глаз не выклюет.**
Ҡарға күҙен ҡарға суҡымай.

116. **Вор у вора дубинку украл.**
Бурҙыкын ҡарак урлаған.

117. **Вот вам Бог, вот вам и порог.**
Алдыңдан артың яҡшы.
Ана бара юлың!

118. **Вот где собака зарыта!**
Бына нимәлә икән хикмәт!

119. **Вот тебе, бабушка, (и) Юрьев день!**
Иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ.

120. **Вот тебе хомут да дуга, а я тебе не слуга.**
Көтөүсенең ялсыһы үлгән.

121. **Временем в горку, временем в норку.**
Бер йыл бүҙәнә һимерһә, бер йыл тартай һимерә.

122. **Временем и ломоть за целый хлеб.**
Йылына күрә йылан һурпаһы.

123. **Время деньги дает, а на деньги время не купишь.**
Ваҡыт менән аҡса табыла,
аҡса менән ваҡыт табылмай.

124. **Время идет, как водой несет.**
Үткән ғүмер — аҡкан һыу.

125. **Время не ждет.**
Ваҡыт көтмәй.

126. **Время не придет, и лист не опадет.**
Форсаты етмәй ағас япрағы ла еҙелмәй.
Ваҡыт етмәй сәскә атмай.

127. **Всем брат — никому не брат.**
Эттең дуҫы күп булыр,
йәненә файҙаһы юҡ булыр.
Ай менән көндәй, һәр кемгә берҙәй.

128. **Всему свое место.**
Һәр нәмәнең үҙ урыны.

129. **Всему своя причина.**
Һәр нәмәгә сәбәп бар.

130. **Всему свое время.**
Һәр нәмәнең үз вакыты.

131. **Все невесты хороши, откуда же берутся плохие жены?**
Бөтә кыҙҙар ҙа һәйбәт, алама катындар кайҙан?

132. **Все минется, одна правда останется.**
Хәкиәкәт утта ла янмай, һыуҙа ла батмай.

133. **Все может случиться: и богатый бедному стучится.**
Донъя — куласа, әйләнә лә бер баҫа.

134. **Все течет, все меняется.**
Һәр нәмә үҙгәрә.

135. **Всю ночь собака на месяц пролаяла, а месяц того и не заметил.**
Куян тауға үпкәләгән, тауҙың иҫәндә лә юк.
Эт өрөр, бүре йөрөр.

136. **Всюду вхож, как медный грош.**
Асмаған ишегә, кермәгән тишеге юк.

137. **Всякая вещь хороша на своем месте.**
Һәр нәмә үҙ урынында якшы.

138. **Всякая курица своим голосом.**
Һәр карға үҙенсә карҡылдай.

139. **Всякая птица по-своему поет.**
Һәр кош үҙенсә һайрай.
Һәр кемдең үҙ йыры.

140. **Всякая работа мастера хвалит.**
Көслө — көсен, һенәрле эшен күрһәтер.

141. **Всякая рука к себе загребает.**
Һәр кемдөң бармагы үҙөнә табан кәк(е)ре.

142. **Всякая сорока от своего языка погибает.**
Тартай телөнән таба (табыр).

143. **Всяк дурак хвалит свой колпак.**
Һәр кем үзенә әллә кем.

144. **Всяк Демид себе норовит.**
Һәр кем үз күмәсенә кел тарта.

145. **Всяк Еремей про себя разумей.**
Юғарыға ҡарап фекер ит,
түбәнгә ҡарап шекөр ит.

146. **Всякий смех о себе ударит.**
Көлке көлә етер, артынан һерә етер.

147. **Всяк кулик на своем болоте велик.**
Ерле — ерендә, йүкәле (екән) — күлендә.

148. **Всяк молодец на свой образец.**
Һәр кем үзенсә уңа, үзенсә туңа.

149. **Всякого слушать, да никому не поддаваться.**
Кешегә кәңәш ит, үз аҡылың менән эш ит.
Кешене тыңла, үзеңсә эшлә.

150. **Всякое начало трудно.**
Эштә башлауы ғына ауыр, башлаһаң, эш ҡарышмай.
Башлаған эш — бөткән эш.

151. **Всякое семя знает свое время.**
Ваҡыт етмәй сәскә атмай.

152. **Всякому мила своя сторона.**
Һәр кемдең үз яғы үзенә ҡәҙерле.
Тыуған илдән туйған юҡ.
Ер тартмаһа, һыу тарта.

153 **Всякому свое и немыто бело.**
Терпе лә балаһын «йомшағым», — тип,
ҡарға ла балаһын «аппағым», — тип һөйә.

154. **Всякому овощу свое время.**
Һәр емештең үз миҙгеле.

155. **Всякому свое дитя мило.**
Һәр кемдең үз балаһы үзенә ҡәҙерле.

156. **Всякому свое счастье.**
Һәр кемдең үз бәхете үзенә.

157. **Всякому своя обида горька.**
Һәр кемдең үз ҡайғыһы үзенә кеслө.

158. **Всяк по-своему с ума сходит.**
Һәр кем үҙенсә табына, үҙенсә абына.

159. **Всяк сам себе загляденье.**
Ишәктең үз тауышы үҙенә моң.

160. **Всяк своему счастью кузнец.**
Кеше үз бәхетен үҙе таба.

161. **Всяк своим умом живет.**
Һәр кемдең үз аҡылы үҙендә.

162. **Выбирай жену не в хороводе, а в огороде.**
Ямғырҙа ат һайлама,
байрамда ҡыҙ һайлама.

163. **Выпьешь вина, так и убавится ума.**
Араҡы эскән — аҡылын эскән.

164. **Выше головы не прыгнешь.**
Үҙ самаңды үҙең бел.
Башыңдан юғары һикерә алмаҫһың.

165. **Выше неба не повесят, ниже земли не зароют.**
Күктән юғары аҫмаҫтар, ерҙән түбән күммәҫтәр.

166. **Вчерашнее не догонишь.**
Юғалған ваҡыт табылмай.
Үткәндәр кире ҡайтмай.

167. **Вяжись лычко с лычком, а ремешок с ремешком.**
Тибешкәндә лә тиң яҡшы.
Тибешеп торһаң да, тиңең менән тор.

Г

1. **Где беде быть, там ее не миновать.**
   Күрәһен күрмәй, гүргә кереп булмай.

2. **Где больно — там рука, где мило — там глаза.**
   Ауырткан ерҙән ҡул китмәй, һөйгән йәрҙән күҙ китмәй.

3. **Где выросла сосна, там она и красна.**
   Алтын сыҡҡан ерендә ҡәҙерле.

4. **Где дележ, там и грабеж.**
   Өлөш бар ерҙә үлеш бар.

5. **Где дети, там нет сплетни.**
   Бала бар йортта ғәйбәт булмаҫ.

6. **Где гром гремит, там и разит.**
   Таш төшкән урынында ауыр.

7. **Где иголка, там и нитка пройдет.**
   Энә үткән ерҙән еп тә үтә.

8. **Где конь катается (валяется), там и шерсть остается.**
   Ат аунаған ерҙә төк ҡала.

9. **Где красота, там и душа.**
   Йәме барҙың йәне бар.

10. **Где родился, там и пригодился.**
    Эт туйған өрендә, ир тыуған илендә.
    Илле — илендә, ерле — өрендә.

11. **Где много говорят, там машины стоят.**
    Күп һүҙ быҙау имеҙә.

12. **Где много слов, там мало дела.**
    Теленә һалынған — эшендә абынған.
    Күп һөйләгән әҙ эшләр.

13. **Где народ, там и правда.**
    Халыҡ барҙа хаҡлыҡ бар.

14. **Где не свербит, нечего драть.**
Ҡысытмаған ерҙе тырнамайҙар.

15. **Где радость, там и горе.**
Ҡайғы-шатлыҡ бергә йөрөй.

16. **Где река глубже, там она меньше шумит.**
Тәрән йылға тын (тыныс) аға.
Тәрән йылға тын ағыр,
Һай йылға шаулап ағыр.

17. **Где слово застревает, там стрела пробивает.**
Һүҙ үтмәгән ерҙә уҡ үтә.

18. **Где совет, там и свет.**
Кәңәшлә эш (ил) тарҡалмаҫ.

19. **Где тонко, там и рвется.**
Еп нәҙек еренән өҙөлә.

20. **Где хвост начало, там голова — мочало.**
Ҡойроҡ баштан алда йөрөмәй.

21. **Где хотенье, там и уменье.**
Теләгә булған булдырған.
Теләк — эштең яртыһы.

22. **Главное не робеть, иначе удачи не видать.**
Ырғығанда икәләнмә — ҡоларһың.

23. **Глаза без души слепы, уши без сердца глухи.**
Күңел күҙе күрмәһә, маңлай күҙе — ботаҡ тишеге.

24. **Глаза — видят, уши — слышат.**
Күргән күҙҙең яҙығы юҡ.

25. **Глаза — зеркало души.**
Күҙ — күңелдең көҙгөһө.

26. **Глазами плачет, а сердцем смеется.**
Күҙе ялтырай, үҙе ҡалтырай.
Теле татлы, күңеле ҡатлы.

27. **Глаза боятся, руки делают.**
Күҙ ҡурҡаҡ, ҡул батыр.

28. **Глубоководная река богата рыбой, мелководная — ивой.**
Тәрән йылға балыҡҡа бай, һай йылға таллыҡҡа бай.

29. **Глупое слово скоро, да не споро.**
Йүләр һүҙгә йүгән юҡ.

30. **Глухому попу две обедни не служат.**
Аҙанды ике әйтмәйҙәр.

31. **Гнев не помощник.**
Асыу — бысаҡ, аҡыл — таяҡ.

32. **Гнет — не парит, переломит — не тужит.**
Үгеҙ үлһә — ит, арба ватылһа — утын.

33. **Гни дерево, пока молодо, учи ребенка, пока мал.**
Баланы баштан, талды йәштән бек.

34. **Гнилое слово от гнилого сердца.**
Һаҫыған ауыҙҙан һөрһөгән һүҙ сыға.
Ямандан яман һүҙ.

35. **Говорит день до вечера, а слушать нечего.**
Һүҙе һүҙгә оҡшамай, ауыҙы һүҙҙән бушамай.

36. **Говорит «направо», а глядит налево.**
Күҙе ялтырай, үҙе ҡалтырай.

37. **Говорить легко, делать трудно.**
Әйтеүе еңел, эшләүе ҡыйын.

38. **Говорить правду — терять дружбу.**
Тура әйткән туғанына ярамаған.

39. **Говоря про чужих, услышишь и про своих.**
Ауыҙың ни әйтһә, ҡолағың шуны ишетер.
Ғәйеп һүҙ һөйләһәң, ғәйеп һүҙ ишетерһең.

40. **Год на год не приходится.**
Йыл йылға тура килмәй.

41. **Год поживет — рог наживет,**
два поживет — два наживет.
Биш тинлек ҡуян — ун тинлек зыян.
Мөгөҙ тыуа килә сыҡмай, тора килә сығ.

42. **Гол, как сокол.**
Ауыҙын аса, үпкәһе күренә.

43. **Голо, да гордо.**
Үҙәм ярлы, буйым ғәрле.

44. **Голодное брюхо ко всему глухо.**
Ас атаһын тыңламаҫ.

45. **Голодной куме все хлеб на уме.**
Иҫем-дәртем — Искәндәр.

46. **Голодной курице снится просо.**
Тауыҡ төшөнә тары керә.

47. **Голый разбоя не боится.**
Сисенгән һыуҙан ҡурҡмаҫ.

48. **Голь на выдумки хитра.**
Башыңа төшһә, башмаҡсы булырһың.

49. **Гони любовь хоть в дверь, она влетит в окно.**
Мөхәббәт таш ярыр.

50. **Гора с горой не сходятся,**
а человек с человеком сойдутся.
Тау менән тау осрашмаһа ла,
кеше менән кешө осрашыр.

51. **Горбатого могила исправит.**
Ана һөтө менән кермәгән, тана һөтө менән кермәҫ.
Ярганатҡа көн юҡ, яманға им юҡ.
Бөкрөнө ҡәбер генә төҙәтер.

52. **Гордись не ростом, а умом.**
Буйың менән мактанма, уйың менән мактан.
Буй меңән түгел, уй менән.

53. **Горе заставит — бык соловьем запоет.**
Башыңа төшһә, башмаҡсы булаһың.

54. **Горе и радость вместе ходят.**
Ҡайғы-шатлыҡ бергә йерәй.

55. **Горе не по лесу бродит.**
Ҡаиғы ағас башынан йөрәмәй, әҙәм башынан йөрәй.

56. **Гору разрушает ветер, людскую дружбу — слово.**
Донъяны — өл, әҙәмде һүҙ боҙа.

57. **Горшок над котлом смеется, а оба черны.**
Йыртыҡ тишектән көлгән.
Абынған һөрәнгәндән көлгән.
Суйын сүлмәккә: «Йөҙөң ҡара», — тигән.

58. **Горшок об горшок сколько не бей, а масла не будет.**
Сүбәк сәйнәп май сыҡмаҫ.

59. **Горька работа, да сладок хлеб.**
Эшә ҡаты, икмәгә татлы.
Хеҙмәте ҡаты — өмеше татлы.

60. **Горького не едать — и сладкого не видать.**
Ҡыйынлыҡ күрмәй, рәхәтлек килмәй.

61. **Горя бояться — счастья не видать.**
Ҡайғынан ҡурҡһаң, шатлыҡ күрмәҫһең.
Ҡайғынан ҡурҡҡан шатлыҡ күрмәгән.

62. **Гость в первый день — золото, на другой — олово.**
Ҡунаҡтың көнө — өс, унан һуң йорт эйәһенә көс.
Ҡунаҡ ҡәҙәрә — өс көн, дүртенсеһе үҙ башыңа.
Ҡунаҡ ҡәҙере өс көн, өс көндән һуң өйөңә ысҡын.
Ҡунаҡ — өс көнгә ҡунаҡ, өс көндән һуң өйөңә олаҡ.
Ҡунаҡ — өс көнгә ҡунаҡ, унан ары — муйнаҡ.

63. **Гость гости, а кошелек прости.**
Ҡунаҡ һорамай таптыра.

64. **Гость на гостя — хозяину радость.**
Бәхетленең ҡунағы бергә.

65. **Гость во двор, что есть — на стол.**
Килер ҡунаҡтың ҡарыны киң.
Ҡунаҡ һорамай таптыра.

66. **Гость невольный человек: где посадят, там и сидит.**
Ҡунаҡ — хужаның ишәге.

67. **Гость недолго гостит, да много видит.**
Ҡунаҡ әҙ ултырыр, күп һынар.

68. **Готовь сани летом, а телегу — зимой.**
Йәйгә керһәң — санаңды, ҡышҡа керһәң — арбаңды әҙерлә.

69. **Грех да напасть бороною ходят.**
Бәлә аяҡ аҫтында.

70. **Грех с орех, ядро с ведро.**
Себен теймәҫ, сер итер.

71. **Гречневая каша сама себя хвалит.**
Ишәктең үҙ тауышы үҙенә моң.

72. **Грибов ищут — по лесу рыщут.**
Бүрене аяғы туйҙыра.

73. **Гром не грянет, мужик не перекрестится.**
Инәһе үлмәй, сирмеш* суҡынмай.

74. **Гроша медного не стоит.**
Һуҡыр (бер) тин тормай.

75. **Грош к грошу — оно и капитал.**
Бер тин — бер аҡса, ике тин — күп аҡса.
Тин тинде һаҡлай.

---

* *Сирмеш* — мари.

Д

1. **Давши слово, держись, а не давши, крепись.**
   Әйткән һүз — аткан ук.
   Әйткән һүзеңдә тора бел.

2. **Даешь руками, а получать (получаешь) ногами.**
   Ҡулың менән биргәнде аяғың менән юллап алаһың.

3. **Дай голому холст, а он скажет: «толст».**
   Хәйерсегә сәләм бирһәң, ямаулыҡ (хәйер) һорай.
   Хәйерсегә ҡыяр бирһәң, кәкре икән, тиер.

4. **Дай дураку яичко, он покатит и разобьет.**
   Ҡуян бала тапҡан, ҡуйыр урын тапмаған.

5. **Дай ему палец, а он всю руку откусит.**
   Дуңғыҙҙы табынға ултыртһаң, аяғын еҫтәлгә һалыр.

6. **Дай с ноготок — попросит с локоток.**
   Хәйерсегә сәләм бирһәң, ямаулыҡ (хәйер) һорай.

7. **Дай яичко, да еще облупленное.**
   Балыҡ бирһәң, бәйләп бир, башын-күҙен сәйнәп бир.

8. **Далеко от очей, далеко и от сердца.**
   Күҙҙән китһә, күңелдән китә.

9. **Дальше спрячешь — ближе найдешь.**
   Йыраҡ йәшерһәң, яҡындан табырһың.

10. **Дарованному коню в зубы не смотрят.**
    Дуҫ биргәндең тешен ҡарама.
    Биргәндең битенә ҡарамайҙар.

11. **Даром и чирей не вскочет.**
    Тиккә һыйыр ҙа мышнамай.

12. **Дают — бери, бьют — беги.**
    Саҡырған ергә бар, ҡыуған ерҙән кит.

13. **Дают ему грош, так вишь, не хорош.**
    Эт эсенә һары май килешмәй.

14. **Дважды молоду не бывать.**
Йәшлек ике килмәй.

15. **Два медведя в одной берлоге не уживутся.**
Икә тәкә башы бөр ҡаҙанға һыймай.

16. **Два сапога — пара.**
Ике ярты — бер бөтөн.
Ике һыңар — бер кейем.

17. **Двое в людях, да трое у соседа.**
Икеһе кешенеке, өсөһө күршенекө.

18. **Двое пашут, а семеро руками машут.**
Бөрәү ҡашығын яһай, берәү шул ҡашыҡ менән ашай.
Эшле — эш өҫтөндә, әрәмтамаҡ — әҙәм өҫтөндә.

19. **Девки скромны, так и парни сдержанны.**
Ҡыҙҙар йыйнаҡ булһа, егеттәр тыйнаҡ була.

20. **Делать как-нибудь, так никак и не будет.**
Вайымһыҙҙың эше алымһыҙ.

21. **Дело делу учит.**
Эш үҙе өйрәтә.

22. **Дело в руках — и хлеб в устах.**
Эше барҙың ашы бар.

23. **Дело мастера боится.**
Эш оҫтаһынан ҡурҡа.

24. **Дело не в кличке, а в птичке.**
Хикмәт атында (исемендә) түгел, затында.

25. **День гуляет, два больной,**
а на третий — выходной.
Ялҡауға ял бөтмәҫ.

26. **День долог, а век короток.**
Йыл оҙон, ғүмөр ҡыҫҡа.

27. **Деньга деньгу бережет.**
Тин тинде һаҡлай.

28. **Деньга деньгу достает.**
Акса аксаны таба.
Тин янына тин һыя.

29. **Деньги без глаз.**
Аксаның күзе юк.

30. **Деньги к деньгам идут.**
Акса аксаны таба.

31. **Деньги счет любят.**
Акса иҫәп ярата.

32. **Деньги не пахнут.**
Аксаның еҫе юк.

33. **Дерево гнется, пока молодое.**
Ағас йәш сағында бөгөлә.
Ағасты йәш сағында бөк.

34. **Дерево красно плодами, а человек — делами.**
Ағас емеше менән, кеше эше менән.

35. **Дерево смотри в плодах, а человека — в делах.**
Ағастың емешен, кешенең эшен ҡара.

36. **Детская душа, что свежая борозда: что посеешь, то пожнешь.**
Бала күңеле — аҡ ҡағыҙ.

37 **Дешево, да гнило, дорого, да мило.**
Оҫоҙлоноң һурпаһы татымай.

38. **Дурная собака на ветер лает.**
Эт яманы буранда ҡотора.

39. **Дитя не плачет, мать не разумеет.**
Иламаған балаға имсәк бирмәйҙәр.

40. **Для брани ума не надо.**
Этлеккә тәһәрәт кәрәкмәй.

41. **Для милого дружка и сережку из ушка.**
Һин тигәндә, мин.
Һин тиғәндә, мин яҡмаған мунсаға керергә әҙер.

42. **До поры, до времени не сеют семени.**
Ярап торорға йорт һалма, ярап торорға ҡатын алма.

43. **Добрая жена — веселье, а худая — зелье.**
Яҡшы ҡатын — йән аҙығы, яман ҡатын — баш ҡаҙығы.

44. **Добрая жена дом сбережет, а плохая — рукавом разнесет.**
Яҡшы ҡатын юҡтан ҡарын туйҙырыр,
яман ҡатын яңғыҙ атың һуйҙырыр.

45. **Добрая слава дороже богатства.**
Яҡшы исем малдан артыҡ.

46. **Доброго держись, а от худого удались.**
Яманға ялынма.

47. **Доброе дело и в воде не тонет.**
Алтын ерҙә ятмаҫ, яҡшылыҡ юлда ҡалмаҫ.

48. **Доброе дело не ржавеет.**
Изгелектең иртәһе-кисә юҡ.

49. **Доброе начало полдела откачало.**
Ниәт — ярты ғәмәл.

50. **Доброе слово, что вешний день.**
Яҡшы һүҙ — йән аҙығы, яман һүҙ — баш ҡаҙығы.

51. **Доброму слову нет предела.**
Өлгөлө һүҙгә үлсәү юҡ.

52. **«Добро пожаловать», а сам — за шапку.**
Үҙе ҡунаҡ саҡырған, үҙе баланға киткән.
Ире өмәгә әйткән, ҡатыны баланға киткән.

53. **Добро худо переломает.**
Фәҙеллөк мөнән золом бер өрҙә йөрөмәҫ.

54. **Добрый добру научает, а злой на зло наставляет.**
Якшыға эйәргән ялпайган, насарға эйәргән картайған.

55. **Добрый конец — всему делу венец.**
Изге эштең аҙағы якшы.

56. **Добрый хозяин — господин деньгам, а плохой — слуга.**
Якшы хужа юкты бар итер, яман хужа барҙы юк итер.

57. **Доведет нужда пить из лужи.**
Нужа бесән ашата.

58 **Доведется и нам песенку свою спеть.**
Беҙҙең урамда ла байрам булыр әле.

59 **Долго журавль летает, а мазолей не натирает.**
Йүгергәндән бурҙайҙың табаны туҙмай.

60 **Долго прожил, да ума не нажил.**
Йәше бар ҙа, акылы юк.
Йәше ҙур ҙа, акылы бәләкәй.

61 **Долг платежом красен.**
Алмак күрке — бирмәк.
Алмактын һалмағы бар.

62. **Дома лежать — мир не повидать.**
Өйҙә ятып ил күрмәҫһең.
Ил куреү — илле алтын.

63. **Домашняя дума в дорогу не годится.**
Өйҙәге иҫәпте баҙарҙағы хак боҙа.

64. **Дом без детей — мазар (могила), дом с детьми — базар.**
Балалы өй — баҙар, балаһыҙ өй — маҙар.

65. **Дом вести — не бородой трясти.**
Донъя көтөү — йылға кисеү түгел.
Донъя көтөү — йөн тетеү түгел.

66. **Дом высок, да под ним песок.**
Өйө бейек, өйрәһе шыйык (һыйык).

67. **Домовников нет, так есть домовои.**
Буш ейгә ен эйәләшә.

68. **Домом жить — обо всем тужить.**
Донъя көткәс, тоҙ ҙа кәрәк.

69. **Дорого яичко к Велику (Христову) дню.**
Ҡыҙыл йомортҡа көнөндә ҡиммәт.

70. **Дорогу осилит идущий.**
Тәүәккәлләгән таш йоткан (ярған).

71. **Дорожные муки — хуже адских.**
Юл ғазабы — гүр ғазабы.

72. **Достается сычке от своего язычка.**
Тартай теленән таба (табыр).

73 **Дочернины детки милее своих.**
Балаң балаһы балдан татлы.

74 **Дочерьми красуются, сыновьями в почете живут.**
Ҡыҙ бала — йортҡа биҙәк, ир бала — йортҡа терәк.

75. **Драчливый петух жирен не бывает.**
Сәркәш әтәс һимермәҫ.

76 **Дрова рубят, щепки летят.**
Ат аунаған ерҙә тек ҡалыр.

77. **Друга испытывают один раз.**
Дуҫты мең тапҡыр һынамайҙар.

78. **Другие времена — другие нравы.**
Заман башҡа — заң башҡа.

79. **Других не суди, на себя погляди.**
Кешене тикшермә, үҙенде бел.

80. **Друг лучше старый, а платье — новое.**
Кейемдең яңыһы, дуҫтың иҫкеһе яҡшы.

81. **Друг познается при рати да при беде.**
Дуҫтың дуҫлығы яуҙа беленер.
Дуҫтың дуҫлығы ҡара көндә беленер.

82. **Дружба — дружбой, а табачок — врозь.**
Дуҫың дуҫ булһын, иҫәбең дөрөҫ булһын.

83. **Друзья познаются в беде (несчастье).**
Дуҫыңдың кем икәнен бәлә килгәндә белерһең.
Дуҫ келгәндә беленмәй, бөлгәндә беленә.

84. **Думай не спеша, работай быстро.**
Әкрен уйла, тиҙ эшлә.

85. **Думы за горами, а беда за воротами.**
Хыял-маҡсат тау артында, бәлә-ҡаза ишек артында.

86. **Дурака и слепой замечает.**
Тоҙһоҙҙо күҙһеҙ ҙә белә.

87. **Дуракам закон не писан.**
Тилегә түрә юҡ.

88. **Дурака хоть в ступе толки, дураком и останется.**
Тилене килегә һалып төйһәң дә, тиле булыр.

89 **Дурак сам себя хвалит.**
Иҫәр үҙен мактар.

90 **Дурак, что мутовка: куда ни поверни, а сук напереди.**
Тинтәктең таяғы ҡырҡ, бергә теймәһә, бергә тейә.

91 **Дурная голова ногам покоя не дает.**
Башың эшләмәһә, аяғыңа ауырлыҡ.

92 **Дурного не спрашивай, сам скажет.**
Иҫәрҙән һорама, үҙе әйтер.

93. **Душа не одежда, наизнанку не вывернешь.**
Кеше ҡауын түгел, эсен ярып ҡарап булмай.

94. **Дым без огня не бывает.**
Утһыҙ тетен булмай.

95. **Дым отечества лучше, чем огонь на чужбине.**
Тыуған илдең әреме лә тәмлө.

Е

1. **Его песенка спета.**
   Ашарын ашаған, йәшәрен йәшәгән.
   Булыры булған, буяуы уңған (һеңгән).
   Фүмере уҙған, күне туҙған.

2. **Едешь на день, бери хлеба на неделю.**
   Юлға сыҡһаң, өс көнлөк (аҙналыҡ) аҙығың ҡалдырма.

3. **Ему про Фому, а он про Ерему.**
   Һин уға бер нәмә әйтәһең, ул үҙенекен һөйләй.

4. **Если ангел, то с крылышками, если черт, то с хвостом.**
   Фәрештә булһа — ҡанатлы, шайтан булһа — ҡойроҡло.

5. **Если бы, да кабы, во рту бы росли бобы.**
   «Дыр», «ҙыр»ға ҡош ҡунмай.

6. **Если в отаре овцы дохнут, паршивая коза становится вожаком.**
   Бесәй юҡ ерҙә сыҫкан ҡотора (түрә була).

7. **Если двое дерутся, добыча достанется третьему.**
   Ике ҡарға талашһа, уҡсыға йөн була.
   Ике эт талашҡанда, бер теләнсе ҡыуанған.

8. **Если делаешь, делай хорошо.**
   Эшләһәң, яҡшы эшлә.

9. **Если днем не нашел, то ночью не найдешь.**
   Иртә уңмаған кис уңмаҫ, кис уңмаған һис уңмаҫ.

10. **Если ложкой не наелся, языком не налижешься.**
    Ашап туймағанды ялап туймаҫһың.

11. **Если уж упасть, то с хорошего коня.**
    Йығылһаң да, ағастың аҫылынан (бейеғенән) йығыл.

12. **Если человека не знаешь, посмотри на его друга.**
    Кешенең кем икәнен белгөң килһә, дуҫын һыңа.

13. **Ест — потеет, работает — холодеет.**
Ашҡа тиһәң — йән-фарман, эшкә тиһәң — «мин бармам».

14. **Ехал прямо, да попал в яму.**
Юл урауын белмәгән юлда илап ултырған.

15. **Ешь до поту, работай до ознобу — дело пойдет скоро.**
Ашағанда ҡолағың һелкенһен, эшләгәндә йөрәгең елкенһен.

16. **Ешь пирог с грибами, держи язык за зубами.**
Телеңде теш артында тот, ҡолағыңды киҫмәһен.

17. **Ешь, пока рот свеж, трудись, пока силы есть.**
Төшең барҙа ашап ҡал, көсөң барҙа эшләп ҡал.

18. **Ешь поменьше, проживешь дольше.**
Әҙ ашаһаң, күп йәшәрһең.

Ж

1. **Жадность — дьяволу родная сестра.**
Нәфсө менән шайтан бер атанан.

2. **Жадность к добру не приводит.**
Харам мал харап итә.

3. **Ждали из заморья, а прибыл из задворья.**
Күктән көткәнде ерҙән биргән.

4. **Ждать беду не легче кнута.**
Бәлә көткән күптән бәләле.

5. **Желанная работа — светлее солнца.**
Был донъяла ни татлы — йән һөйгән хеҙмәт татлы.

6. **Женщина без мужа, что конь без узды.**
Ирһеҙ ҡатын — йүгәнһеҙ ат.

7. **Жива — наша, умерла — богова.**
Үгеҙ үлһә — ит, арба ватылһа — утын.
Ике донъя — бер мөрйә.

8. **Живая кость мясом обрастает.**
Сыҡмаған йәндә өмөт бар.

9. **Живой пес лучше мертвого льва.**
Лучше рябчик в руках, чем глухарь на току.
Лучше яйцо сегодня, чем курица завтра.
Һауалағы торнанан ҡулыңдағы турғай (сәпсек) артыҡ.
Таңдағы тауыҡтан бөгөнгө йомортҡа артыҡ.

10. **Живых — почитай, умерших — поминай.**
Иҫәндәрҙең ҡәҙерен бөл, үлгәндәрҙең ҡәбәрен бел.

11. **Жизнь прожить — не поле перейти.**
Ғүмер итеү — сират күпере үтеү.

12. **Журавль в небе, а капкан на земле.**
Төлкө — тауҙа, эт — бауҙа.

З

1. **За Богом должок не пропадет.**
Ала ҡарҙа аласағың булһын.

2. **За большим погонишься и малое потеряешь.**
Күпте өмөт иткән әҙҙән ҡоро ҡалған.

3. **Заварил кашу, так не жалей и масла.**
Бутҡаһын бешергәс, майын йәлләмә.

4. **Заведи сперва хлевину, а там и животину.**
Атыңдан алда йүгәнеңде әҙерлә.

5. **Завистливый по чужому счастью сохнет.**
Көнсөлдөң йөрәген ят бәхете яндыра.

6. **За глазами, что за горами.**
Үҙе юҡтың күҙө юҡ.

7. **За двумя зайцами погонишься, ни одного не поймаешь.**
Ике ҡуян артынан ҡыуһаң, береһен дә тота алмаҫһың.

8. **За дело — не мы, за работу — не мы, а поесть, поплясать — против нас не сыскать.**
Эшкә тигәндә юҡ дарман, ашҡа тигәндә — йән-фарман.

9. **За добро худом не отвечают.**
Аш атҡанға таш атма.

10. **За лесом видит, под носом не видит.**
Урман артындағын күрә, бүрек аҫтындағын күрмәй.

11. **За морем телушка — полушка, два рубля перевоз.**
Ағиҙелдең аръяғында бер әнәгә бер һыйыр.
Алыҫтағы шаф була, бара-бара саҡ була.

12. **За недобрым пойдешь, на беду набредешь.**
Яманға тарыма, тарыһаң арыма.

13. **За одного ученого трех неученых дают.**
Бер ғалимгә өс наҙанды алмаштырмайҙар.

14. **За смелым удача бежит.**
Ҡыйыулыҡ — ярты ырыҫ (бәхет).

15. **За совесть да за честь — хоть голову снесть.**
Даныңды юйғансы, башыңды юй.

16. **За честь — хоть голову с плеч.**
Ирҙе намыҫ үлтерә (ҡартайта).

17. **За что ни возьмется, все кипит.**
Егәрленең ҡулы ете (егерме).

18. **За чужим хмелем что-нибудь смелем.**
Туй уңайы менән тун бөтәйә.

19. **Завези на пар навоза — снопы валиться будут с воза.**
Тиреҫ сығарһаң ереңә, ташып бөтөрә алмаҫһың өйөңә.

20. **Задние колеса наперед не катятся.**
Ал тәгәрмәс ҡайҙан тәгәрәһә, арт тәгәрмәс шунан тәгәрәр.

21. **Задним умом каждый богат.**
Артҡы аҡылға кем дә бай.

22. **Задор берет, да мочи нет.**
Дәрт бар, дарман юҡ.

23. **Задор прореху рвет.**
Дәртлә дарманын табыр.

24 **Зажила рана, а все рубец есть.**
Уты һүнһә лә, ҡуҙы ҡала.

25 **Займует, так святушка сват, а занял, так и черт не брат.**
Алганда — бисмилла, биргәндә — әстәғәфирулла.

26. **Залез в богатство — забыл и братство.**
Атҡа менгәс, атаһын танымаған.

27. **Замеси, да в рот положи.**
Алма беш, ауыҙыма төш.

28. **Замуж идет — песни поет, а вышла — слезы льет.**
Ҡыҙ саҡ — солтан саҡ, килен саҡ — олтан саҡ.

29. **Запас беды не чинит.**
Барҙың зыяны юҡ (теймәй).

30. **Запас мешку не порча.**
Бар яныма бар һыя.

31. **Заработанные деньги — золото, выпрошенные — бумага.**
Эшләп алған аҡса — алтын, бүлеп биргән аҡса — ҡағыҙ.

32. **Заставь дурака Богу молиться, он и лоб расшибет.**
Иҫәргә дим бир, ике ҡулына суҡмар бир.

33. **Засыпь правду золотом, а она всплывет.**
Дөрөҫлөк ерҙә ятмаҫ.

34. **Затеял шутку, потерял лисью шубку.**
Уйындан — уймаҡ, табанан — ҡоймаҡ.

35. **Захотел от кошки лепешки, от собаки — блинов.**
Эт ауыҙынан һөйәк алып булмаҫ.
Алырһың эт ауыҙынан һейәк!

36. **Здоров на еду, да хил на работу.**
Ялҡау әҙ эшләй, әҙ эшләһә лә, күп тешләй.
Ялҡау кеше аш янында ат кеүек, эш янында ят кеүек.

37. **Здоровый больного не разумеет.**
Ас хәлен туҡ белмәҫ.

38. **Здоровье дороже богатства.**
Таҙалығың — байлығың.
Һаулыҡ байлыҡтан ҡиммәт.

39. **Земля кормит людей, как своих детей.**
Кейендергән дә — ер, туйындырған да — ер.

40. **Земля не клином сошлась.**
Илдең итәге киң.

41. **Злая жена сведет мужа с ума.**
Яман ҡатын ир ҡартайтыр.

42. **Злая жена — та же змея.**
Яман ҡатын — шайтан ҡамсыһы.

43. **Зло да зло не сделают добра.**
Яуызлыҡ яуызлыҡҡа тарта (юлыҡтыра).
Таш менән атҡанға аш менән ат.

44. **Зло рождает зло.**
Уттан — ут, устән үс үрсей.
Яуызлыҡ яуызлыҡ тыуҙыра.

45. **Злые языки — острый меч.**
Уҫал тел — утлы киҫәү.

46. **Злые языки — страшнее пистолета.**
Уҫал тел ҡоралдан хәтәр.

47. **Змея змее на хвост не наползет.**
Айыуҙы айыу ашамаҫ, бүрене бүре ашамаҫ.

48. **Знай во всем меру.**
Ашҡа ла бар бер сама.

49. **Знай, сверчок, свой шесток.**
Үҙ урыныңды үҙең бел.

50. **Знание дороже золота.**
Ғилем байлыҡтан ҡәҙерлерәк.

51. **Знать золото и на грязи.**
Алтын баткакта ла ялтырай.

52. **Знать Феклу по рылу мокру.**
Май сүлмәге тышынан билдәле.

53. **Золотая клетка соловью не потеха.**
Ҡошҡа алтын ситлек тә зиндан.

54. **Золотая пора — молодые года.**
Бала саҡ — баллы саҡ.

55. **Золото и в болоте светится.**
Алтын ерҙә ятһа ла, тут төшмәҫ.
Гәүһәр төндә лә күренә.

56. **Золото как не черни, черным не будет.**
Алтынды бысраҡҡа буяу менән ҡәҙере китмәй.

И

1. **И веник в бане господин.**
Үҙ йортонда алйот та хужа.

2. **И в напраслине, что в деле, люди погибают.**
Кеше һүҙе кеше үлтерә.

3. **И воеводе нужен покой.**
Батырға ла ял кәрәк.

4. **И волки сыты, и овцы целы.**
Бүре лә тук, куй ҙа төүәл.

5. **И ворона воронят хвалит.**
Ҡарға ла балаһына «аппагым», тиер,
терпе лә балаһына «йомшагым», тиер.

6. **И глупый иногда молвит слово в лад.**
Ахмаҡтың да бер аҡыллы һүҙе булыр.

7. **И глух, и нем — греха не всем.**
Белмәгәндең беләге тыныс.

8. **И дело с концом.**
Тун да киттө, тауыш та бөттө.

9. **И дрова без поджогу не горят.**
Ут һалмаһаң, утын да янмай.

10. **И дураки иногда дельное говорят.**
Ахмаҡтың да бер аҡыллы һүҙе була.

11. **И дым отечества сладок.**
Үҙ иләмдең төтәнә лә тәмле.

12. **И красное солнышко на всех не угождает.**
Кешегә ай менән ҡояш та ярамай.

13. **И конь на свою сторону рвется.**
Ат әйләнеп, тейәген табыр.

14. **И лаской, и таской.**
Кәй ҙә кәрәк, сәй ҙә кәрәк.

15. **И мал пенек, да воз опрокидывает.**
Күренмәгән түңгәк арба (сана) ауҙарыр.
Түңгәк бәләкәй булһа ла, арба ауҙара.

16. **И медведя изневолишь, так в ноги кланяется.**
Эттең ҡойроғона баҫһаң, «еҙнә», ти.

17. **И много друзей, да нет дружка.**
Эттең дуҫы күп булыр, йәненә файҙаһы юҡ булыр.

18. **И мы не лыком шиты.**
Беҙ ҙә төшөп ҡалғандарҙан түгел.

19. **И на большие умы живет промашка.**
Ат һөрөнмәй, ир яңылышмай булмаҫ.

20. **И на доброго коня спотычка бывает.**
Дүрт тояклы ат та (мал да) һөрлөгә.

21. **И на елку бы лез, и ног бы не ободрал.**
Һыуға ла төшһөн, ҡоро ла сыҡһын.
Тун да булһын, мул да булһын.

22. **И на Машку бывает промашка.**
Хан ҡыҙында ла хата була.

23. **И на солнце есть пятна.**
Ҡояшта ла тап бар.

24. **И не узнаешь вдруг, что творится вокруг.**
Ата улды, инә ҡыҙҙы белмәй.

25. **И пальцы на руках не равны.**
Бармаҡтар ҙа тигеҙ түгел.

26. **И пес перед хлебом смиряется.**
Аш алдында баш эйелә.

27. **И петух на своем пепелище храбрится.**
Үҙ сүплегендә әтәс тә батыр.

28. **И плачешь, да пляшешь.**
Ни саранан бисара.

29. **И по рылу знать, что Сазонтом звать.**
Исеменә күрә есеме.

30. **И поскользнется, да не перевернется.**
Өс таған таймаҫ, тайһа ла аумаҫ.

31. **И сам не зазнавайся, и других не унижай.**
Үҙеңде ҙурлама, кешене хурлама.

32. **И свата жаль, и себя-то жаль.**
Үҙем дә йәл, малай ҙа.

33. **И собака помнит, кто ее кормит.**
Яҡшылыҡтың ҡәҙерөн эт тә бөлә.

34. **И у мышки своя норка.**
Сыҫкандың да үҙ оя́ны бар.

35. **И у стен есть (бывают) уши.**
Стенаға ышанма, ботаҡ күҙе бар.

36. **И хочется, и колется.**
Үҙе ҡурҡа, үҙе йолҡа.

37. **Иван на Петра, Петр на Якова, Яков на всякого.**
Фәли — Вәлиғә, Вәли — Фәлигә.
Эт — эткә, эт — ҡойроҡҡа, ҡойроҡ — ҺыртҡА.

38. **Игра не доведет до добра.**
Уйындан уймаҡ сыға.

39. **Иди, да оглядывайся назад.**
Алдыңды бер ҡара, артыңды биш ҡара.

40 **Из блохи не делай верблюда.**
Төймәләйҙә дөйәләй итмә.

41 **Из грязи в князи.**
Герәздән кенәз булған.
Һәнәҡтән көрәк булған.

42 **Из двух зол выбирай меньшее.**
Ауыртмаған яғыңды ҡара.
Ике ямандың арыуырағын Һайла.

43. **Из избы сору не выноси, а под лавку копи.**
Өйөңдәгән ситкә сығарма.
Өйөңдәгә сүпте тышҡа сығарма.

44. **Из искры возгорится пламя.**
Осҡондан ялҡын сыға.

45. **Из кобыл да в клячи.**
Аттан төшөп ишәккә атланмайҙар.

46. **Из крошек — кучка, из капли — море.**
Күл тамсынан йыйыла.

47. **Изобилие не чума.**
Артыҡ дәүләт күҙ сығармаҫ.

48. **Из огня да в полымя.**
Уттан ҡасып — ялҡынға,
болоттан ҡасып ямғырға юлыҡҡан.
Айыуҙан ҡасҡан — бүрегә.

49. **Из одного теста сделаны (слеплены).**
Икеһе лә бер сыбыҡтан ҡыуылған.

50. **Из одной плахи вытесаны.**
Икеһе бер сыбыҡтан ҡыуылған.

51. **Из одной овчинки шубу не сошьешь.**
Бөр тиренән тун булмай.

52. **Из песни слова не выкинешь.**
Йырҙың йыртығы юҡ.

53. **Из пустяков, да много шуму.**
Юҡтан сыҡҡан ығы-зығы.

54. **Из «спасибо» шубу не сошьешь.**
«Рәхмәт»тән тун тегөп булмай.

55. **Иное время — иное бремя.**
Заман башҡа — заң башҡа.

56. **Искреннее раскаяние — половина исправления.**
Ҡайтып килеп өйөрөн тапһа, аҙашҡан малды әрләмә.
Ҡайтып килеп өйөрөн тапһа, аҙашҡан малда ғәйеп юҡ.
Мөңрәп килгән һыйырҙың мөгөҙөн бәреп һындырма.

57. **Искру туши до пожара,беду отводи до удара.**
Утты ваҡытында һүндер.

58. **Их водой не разольешь.**
Араларынан ел дә үтмәҫ.

59. **Ищуший друга без изъяна останется без друга.**
Фәиепһеҙ аш эҙләмә — ас ҡалырһың,
ғәиепһеҙ дуҫ эҙләмә — яңғыҙ ҡалырһың.

К

1. **К больному теленку все мухи льнут.**
Сирлегә себен эйәләшә.

2. **К каждой бочке затычка.**
Таяуға — терәү, йыртыҡҡа — ямау.

3. **К пирогам идут, а от работы бегут.**
Эшкә тигәндә юҡ дарман, ашҡа тигәндә, йән-фарман.

4. **К чему руки не приложит, все кипит.**
Ҡар еҫтәндә ҡаҙан ҡайната.

5. **Кабы знал, где упасть, (так) соломки бы подстелил.**
Ҡайҙа йыгылырымды белһәм, һалам түшәп ҡуйыр инем.
Атайымдың үлерен бөлһәм, ярты икмәккә һатыр инем.

6. **Каждое дело — на свой лад.**
Һәр эштең үҙ яйы.

7. **Каждому своя милая — самая красивая.**
Һәр кемдеке үҙенә, айҙай күренер күҙенә.

8. **Каждый в свою нору тянет.**
Һәр кем үҙ тирмәненә һыу ҡоя.
Һәр кем үҙ күмәсенә көл тарта.

9. **Каждый калека по-своему хромает.**
Һәр кем үҙенсә табына, үҙенсә абына.

10. **Каждый цветок своим запахом.**
Һәр сәскәнең үҙ еҫе.

11. **Каждый судит со своей каланчи.**
Һәр кем үҙ төнлөгөнән ҡарап фекер йеретә.

12. **Каждый является кузнецом своего счастья.**
Һәр кем үҙ бәхетенә үҙе сәбәп.

13. **Как аукнется, так и откликнется.**
Кешегә ни ҡылһаң, алдыңа шул килер.
Үҙ ҡылғаның үҙеңә ҡайта.
Яҡшылыҡ ҡылһаң да, яманлыҡ ҡылһаң да үҙеңә ҡайтыр.
Эт этлеген иткән — үҙ башына еткән.

14. **Как веревочке ни виться, а концу быть.**
Сыуалған ептең дә бер осо була.

15. **Как (сколько) волка ни корми, (а) он все в лес глядит.**
Бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманға ҡарай.

16. **Как две капли воды (похожи).**
Ике тамсы һыу кеүек (бер-береһенә оҡшаған).

17. **Как корове седло.**
Һыйырға септә килешмәй.

18. **Как человек живет, так и умирает.**
Йәшәүенә ҡарап үлеме.

19. **Как нам жениться, так и ночь коротка.**
Беҙ ейләнгәс, төндәр ҡыҫҡарҙы.

20. **Как ни крои, а швы наружу.**
Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә (беленер).

21. **Как подумаешь, ум за разум заходит.**
Уйлаһаң, уйылып китерлек.

22. **Как рожены, так и заморожены.**
Алтылағы — алтмышта.

23. **Как человек чего захочет,**
так он о том похлопочет.
Теләгә булһа, сараһы табыла.

24. **Каким бы острым ни был кинжал, человеческий язык острее.**
Тел ҡылыстан үткер.

25. **Какова береста, таков и короб.**
Күленә ҡарап ҡамышы.

26. **Какова дровница, такова ей и дворница.**
Силәгенә күрә ҡапҡасы.
Атына күрә арбаһы.

27. **Какова деревня, такова и обрядня.**
Еренә ҡарай йыланы, тауына ҡарай боланы.

28. **Какова матка, таковы и детки.**
Анаһына ҡарап балаһы.
Инәне күреп, ҡыҙ үҫер, атаны күреп, ул үҫер.
Арғымаҡтан ат тыуа, ҡандаланан бет тыуа.

29. **Какова от пса ловля, такова ему и кормля.**
Эшенә күрә ашы.

30. **Какова пава, такова ей слава.**
Ашына күрә табағы, балына күрә ҡалағы.

31. **Какова пелена*, такова ей и цена.**
Бүҙәнәнең үҙенә күрә бағраһы.

32. **Какова плата, такова и работа.**
Хаҡына күрә эше, тырмаһына күрә теше.

33. **Каков батька, таков и сын.**
Атаһына ҡарап, ул үҫер,
инәһенә ҡарап, ҡыҙ үҫер.

34. **Каков в гнезде, таков и в полете.**
Ояһында ни булһа, осҡанында шул булыр.

35. **Каков гость, таково ему и угощение.**
Ҡунағына ҡарап хермәте.

36. **Каков грех, такова и расплата.**
Гонаһына күрә язаһы.
Яҙығына күрә язаһы.

---

* *Пелена* — здесь в первоначальном значении слова: кусок ткани, то, во что пеленают (С. И. Ожегов. 1995. С. 488).

37. **Каков корень, таков и отпрыск.**
Ағас тамырына ҡарап үҫә.

38. **Каков мастер, такова и работа.**
Оҫтаның ҡулы башҡа.
Һәләтлене һәнәк тотоуынан белеп була.

39. **Каков мастер, таков и успех.**
Эш белгәнгә уңыш юлдаш.

40. **Каков ни будь пень, а все за ним тень.**
Ҡайҙа барһаң да, ҡара һаҡалың артыңдан ҡалмай.

41. **Каково волокно, таково и полотно.**
Ебенә күрә йөйө, йөйөнә күрә көйө.

42. **Каково время, таково и племя.**
Заманың ниндәй — яҙмышың да шундай.

43. **Каково дерево, таков и плод.**
Ағасына күрә емеше.

44. **Каков огонь, таково и пламя.**
Усағы ниндәй — ялҡыны шундай.
Көтөүсеһенә ҡарап көтөүе.
Еренә ҡарап йыланы, тауына ҡарап боланы.

45. **Каков пастырь, таков и приход.**
Эйәһенә күрә бейәһе.

46. **Каков привет, таков и ответ.**
Һорауына күрә яуабы.

47. **Каков род, таков и приплод.**
Ит аҫылы ҡарталыр, зат затына тарталыр.
Нәҫел — нәҫелгә, тилсә — тамырға.

48. **Каков родился, таков и есть: сверху не закрасишь.**
Инәнән ҡыйыҡ тыуған, ҡашыҡҡа һалһаң да тураймаҫ.

49. **Каков Савва, такова ему и слава.**
Килбәте ниндәй — күләгәһе шундай.
Сөйөнә күрә туҡмағы, туйына күрә таҡмағы.

50. **Каков сад, таковы и яблони.**
Ағасына күрә алмаһы.

51. **Каков ты до меня, таков и я до тебя.**
Үҙең нисек, мин дә шулай.

52. **Каков учитель — таков и ученик.**
Хәлфәһенә күрә шәкерте.

53. **Каков хозяин, таков и слуга.**
Хужаһына күрә ялсыһы.

54. **Каковы дружки, таковы и пирожки.**
Ҡунағыңа ҡарап икмәгең тел.
Ҡунағына ҡарап хермәте.

55. **Каковы сами, таковы и сани.**
Кетеүсеһенә ҡарап көтеүе.
Еренә ҡарап йыланы,
тауына ҡарап боланы.

56. **Каковы сани, таковы и оглобли.**
Атына күрә санаһы, маҡсатына күрә сараһы.

57. **Какое дерево, таков и клин,**
каков батька, таков и сын.
Атаһы болан атмағандың балаһы ҡолан атмаҫ.
Атаһы ниндәй, уланы шундай.

58. **Какой палец не укуси, все больно.**
Бармаҡтың ҡайһыһын тешләһәң дә ауырта.

59. **Калека от могилы бежит, а здоровый в могилу спешит.**
Фәрип йәшәүҙән туймаҫ.

60. **Капля за каплей — образуется озеро.**
Тамсы тама-тама күл була.

61. **Капля (и) камень долбит.**
Тамсы таш яра.
Тамсы тама-тама таш тишә.
Тамсы ташты ла тишә.

62. **Катучий камень мохнат не будет.**
Яткан таш мүкләнә, йөрөгән таш шымара.

63. **Кашу маслом не испортишь.**
Майҙан бутка боҙолмаҫ.

64. **Кашу свари, да еще и в рот положи.**
Алма беш, ауыҙыма төш.

65. **Клади навоз густо, в амбаре не будет пусто.**
Мул ашлаһаң ерендe, күп алырһың иҙенде.

66. **Клевета, что уголь: не обожжет, так замарает.**
Ҡалған хәтерҙең ҡары китһә лә, боҙо китмәҫ.

67. **Клин клином вышибается.**
Алмас алмас менән киҫелә.
Ҡар башына ҡар етә.
Көс көс менән өңелә.

68. **Ковыряя в зубах, не насытишься.**
Ашап туймағанды ялап туймаҫһың.

69. **Кобылка есть — хомута нет, хомут добыл — кобылка ушла.**
Һабы килһә — йәбе, йәбе килһә, һабы (ибе) килмәй.

70. **Когда гнев впереди, ум позади.**
Асыу — алдан, аҡыл — арттан.
Асыу алдан йөрөр, аҡыл арттан йөрөр.

71. **Когда месяц светит, так и звезд не нужно.**
Айым тура баҡҡанда, йондоҙҙарға йоҙроҡ.

72. **Когда начинается война, черт расширяет преисподнюю.**
Яу яғанан алғанда, эт итәктән алыр.

73. **Когда нет охоты, не спорится и работа.**
Көсләп астырған күҙҙең нуры юҡ.

74. **Когда нет состязания в стрельбе — все стрелки, когда нет борьбы — все силачи.**
Яуҙаң һуң батыр күбәйә.

75. **Когда потчуют, и воду пей.**
Һыйлағанда һыу булһа ла эс.

76. **Когда радость — не ликуй, при беде — не паникуй.**
Шатлық күрһәң, шашма, ҡаза күрһәң, аҙашма.

77. **Когда рук много, работа спорится.**
Ауыр эште күмәк ҡул өңгән.

78. **Кого медведь драл, тот и пня боится.**
Йылан саҡҡан дилбегәнән ҡурҡҡан.
Ҡурҡҡанға һәр ҡыуаҡ — ҡараҡ.
Кис ҡурҡҡан көндөҙ сыра яндырған.

79. **Козел по горам — баран по горам.**
Эт саба тип, бет саба.

80. **Коли быть собаке битой, найдется и палка.**
Фәмәләнә күрә әмәле.

81. **Колотись, бейся, а все надейся.**
Аяҡ-ҡулың өҙөлһә лә, өмөтөң өҙөлмәһен.

82. **Колхоз без учета, что дом без дверей.**
Иҫәпһеҙ колхоз — ишекһеҙ йорт.

83. **Кому детей родить, тому бы их и взрастить.**
Баланы көм тапҡан, шул аҫраһын.

84. **Кому пироги и пышки, а кому (мне) синяки и шишки.**
Миңә булған — миңле булған.

85. **Кому поведется, у того и петух несется.**
Бәхетленең әтәсе лә күкәй һала.
Бәхетленең кәмәһе лә ҡоронан йөрөй.
Алға киткәндең аты утлай.

86. **Кому работа в тягость, тому неведома радость.**
Ялҡауҙың ялы булмай.

87. **Кому суждено быть повешенным, тот не утонет.**
Аçылырға яҙған һыуҙа батмаç.
Буласаҡҡа сара юҡ.

88. **Кому что, а курице просо.**
Берәү ҡарай тамаша, берәү ҡарай алаша.

89. **Кому что думается, тот того и боится.**
Күңелгә килгән алға килә (тиҙәр).

90. **Кому что по душе, а цыганку— яичница.**
Кемгә ҡыҙ, кемгә ҡымыҙ.

91. **Коней на переправе не меняют.**
Кисеү кискәндә ат туғармайҙар.

92. **Конец — делу венец.**
Эштең тәме — аҙағында.

93. **Кончил дело, гуляй смело.**
Эш бөткәс, уйнарға ярай.

94. **Конь о четырех ногах, да (да и тот) спотыкается.**
Дүрт тояҡлы ат та (мал да) һерлегә.

95. **Конь скачет, а всадник похваляется.**
Ир мактаныр, ҡорал эшләр.

96. **Конь с конем, а вол с волом.**
Ишәк ише менән, дуңғыҙ түше менән.
Дуңғыҙ түше менән, эт ише менән.

97. **Коня куют, а жаба ногу подставляет.**
Ат тояғын дагалағанда, бака ботон ҡыçтырған.

98. **Коня подаришь — умрет, шубу подаришь — износится, а добро все переживет.**
Ат бирһәң — үлер, тун бирһәң — туҙыр,
яҡшылыҡ барыһын да уҙыр.

99. **Коня хвали через месяц, а жену — через год.**
Айһыҙ ат мактама, йылһыҙ ҡатын мактама.

100. **Корова на дворе, (и) харч на столе.**
Һыйлы көнең һыйырҙа.

101. **Коротко и ясно, оттого и прекрасно.**
Ҡыҫҡалыҡта — оҫталыҡ.

102. **Корявое дерево не срубишь, солнца не увидишь.**
Кәкре ағасты киҫмәй, өл иҫмәй.

103. **Кот из дома — мышки в пляс.**
Бесәй булмаған өрҙә сыскан ҡотора.

104 **Которая корова пала, та по три удоя давала.**
Үлгән һыйыр һөтлө була.

105 **Кошачьи глаза дыму не боятся.**
Эт күҙе төтөн белмәҫ.

106 **Кошке — игрушки, а мышке — слезки.**
Сыскаңға үлем, бөсәйгә көлкө.

107. **Кошки дерутся — мышам раздолье.**
Ике ҡош талашһа, уҡсыға йөн.

108. **Краденое добро впрок не идет.**
Урланған малда бәрәкәт юҡ.

109. **Красота до венца, а ум до конца.**
Матурлыҡ туйҙа кәрәк, аҡыл көн дә кәрәк.

110. **Красота нужна на свадьбе, а любовь всегда.**
Матурлыҡ туйҙа кәрәк, мөхәббәт көн дә кәрәк.

111. **Красавица лицом красна, мастер — делом.**
Сибәрҙәң йөҙө уртаҡ, оҫтаның ҡулы уртаҡ.

112. **Красивого человека и полюбить не грех.**
Төҫө барҙан төңөлмә.

113. **Красна девица не в хороводе, а в огороде.**
Килбәтлө ҡыҙ килен булғас күренер.

114. **Красна речь пословицей.**
Йөҙ күркө — һаҡал, һүҙ күркө — мәҡәл.

115. **Краткость — сестра таланта.**
Ҡыҫҡалыҡта — оҫталыҡ.

116. **Крепок задним умом.**
Артҡы аҡылға кем дә бай.

117. **Крепче запрешь, вернее найдешь.**
Алыҫ һалһаң, яҡындан алырһың.

118. **Кривой не беда, а горе — криводушный.**
Ҡырын ултырһаң да, тура һөйлә.

119. **Кривой среди слепых — король.**
Һандуғас юҡ йылды ҡарға дан тотор.

120. **Криво стреляет, да прямо попадает.**
Ҡыйыш атып, тура тейҙерә.

121. **Кровное родство пуще духовного.**
Йән тартмаһа, ҡан тарта.

122. **Круглый дурак.**
Шыр тиле.

123. **Кто меньше спит, тот больше знает.**
Аҙ йоҡлаған күп белер.
Аҙ йоҡлаһаң, күп белерһең.

124. **Кто везет, того и погоняют.**
Эште эшләгән кеше өҫтөнә ейәләр.

125. **Кто взял, на том один грех; у кого пропало, на том — сто.**
Алған бер яҙыҡлы, алдырған мең яҙыҡлы.

126. **Кто встал пораньше, ушел подальше.**
Иртә торғандың ырыҫы артыр.
Юлға сыҡһаң, иртә сыҡ.

127. **Кто вчера солгал, тому и завтра не поверят.**
Ялғансының дереҫ һүҙенә лә ышанмаҫтар.
Ялғансының йорто янған — берәү ҙә ышанмаған.

128. **Кто говорит, тот сеет, кто слушает, тот жнет.**
Һөйләгән — аҡыл сәсә, тыңлаган — аҡыл йыя.

129. **Кто грамоте горазд, тому не пропасть.**
Кто грамоте горазд, тот маху не даст.
Белеме бар хур булмаҫ.
Белемле үлмәҫ, белемһеҙ көн күрмәҫ.

130. **Кто долго выбирает, тот всегда обманется.**
Кто думает три дни, тот выберет злыдни.
Һайланған — һаҙға, осраған таҙға.

131. **Кто ищет, тот находит.**
Эҙләгән — тапҡан, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан.

132 **Кто ленится, тот не ценится.**
Ялҡауға ҡәҙер юҡ.

133. **Кто ленивый, тот и сонливый.**
Ялҡауҙы йоҡо баҫыр.

134 **Кто лукавит, того черт задавит.**
Хәйләле эш хәйерһеҙ.

135 **Кто мало говорит, тот больше делает.**
Аҙ һөйләгән күп эшләр.

136. **Кто меньше говорит, тот ума набирает.**
Һүҙең һирәк булһа, аҡылың зирәк булыр.

137 **Кто меньше толкует, тот меньше врет.**
Күп һүҙ ялғанһыҙ булмай.

138. **Кто много болтает, тот беду на себя накликает.**
Тик тормаған телдә бәлә бар.

139. **Кто много говорит, тот мало делает.**
Күп һөйләгән әҙ эшләр.

140. **Кто много грозит, тот мало вредит.**
Һуҡмаҫ һуйыл күтәрер.

141. **Кто на все руки, у того нет скуки.**
Эшһеҙгә көн үтмәй, эшлегә көн етмәй.

142. **Кто (в работе) не горит, тот небо коптит.**
Ғәмһеҙ кеше — йәнһеҙ кеше.

143. **Кто не работает, тот не ест.**
Эшләмәгән ашамай.

144. **Кто не рискнет, тот не выиграет.**
Тәүәккәлләгән таш йоткан (ярған).

145. **Кто не пробовал горького, не оценит сладкого.**
Көл булмай гөл булмаҫһың.
Ҡыйынлығын күрмәй ҡаймағын ашап булмай.

146. **Кто не хочет, тот повода ищет.**
Теләгән әмәлен эҙләр, теләмәгән сәбәбен эҙләр.

147. **Кто ничего не имеет, тот ничего не боится.**
Сисенгән һыуҙан ҡуркмаҫ.

148. **Кто новины не видал, и ветоши рад.**
Ит күрмәгәнгә үпкә лә танһыҡ.

149. **Кто нужды не знает, тот и бога забывает.**
Аҙыҡ мулда бисмилла онотола.

150. **Кто нужды не видал, тот и счастья не знает.**
Михнәт күрмәгән, рәхәттең ҡәҙерен белмәҫ.

151. **Кто от кого, тот и в того.**
Атаһына ҡарап балаһы.

152. **Кто первый в труде, тому и слава везде.**
Ҡарағайға ҡарап тал үҫер, хеҙмәтенә ҡарап, дан үҫер.

153. **Кто плачет от сердца, вызывает слезы даже у слепого.**
Ихлас илаһаң, һуҡыр күҙҙән дә йәш сыға.

154. **Кто поздно ходит, сам себе шкодит.**
Йәһәтләһәң, ит бешә, һуңға ҡалһаң, бит бешә.

155. **Кто проворен, тот доволен.**
Сәмле кеше — мәлле кеше.

156. **Кто работает, тот и ест.**
Тик тормаған тук торған.

157. **Кто рано встает, тому Бог дает.**
Иртә торғандың ырыҫы артыр (юлы уңыр).

158. **Кто Родиной торгует, того кара не минует.**
Илен һатып ашаган ике генә көн йәшәгән.

159. **Кто родителей почитает, тот вовеки не погибает.**
Ата-әсә алғышы* утка-һыуға батырмаҫ.

160. **Кто другому яму копает, сам в нее попадет.**
Кешегә баҙ ҡаҙыма, үҙең тешерһең.

161. **Кто сам упал, тот не плачет.**
Үҙе ыығылған иламаҫ.

162. **Кто посеет ветер, тот пожнет бурю.**
Ел сәсһәң, дауыл урырһың.
Кешегә яуызлык ҡылһаң, яуызлык табырһың.

163. **Кто сирых напитает, того Бог знает.**
Алғаныңдан биргәнең яҡшы.

164. **Кто смел, тот и съел.**
Тәүәккәлләгән таш йоткан (ярган).

165. **Кто с мечом придет, от меча и умрет.**
Ҡылыс менән килгән ҡылыстан үлер.
Ҡылыс күтәргән ҡылыстан үлер.

166. **Кто старое помянет, тому глаз вон.**
Үткән эшкә үкенмә, үкенһәң дә өткерměҫ.
Үткән эштән төш яҡшы.
Үткән эш — беткән эш.

167. **Кто ударить не в силах, за большой камень хватается.**
Һуға алмаған күҫәк күтәргән.
Көсө етměҫ күҫәк күтәрер.

---

* *Алғышы* — рәхмәте.

168. **Кто украл — у того один грех, у кого украли — у того десять.**

Урлаған бер ғәйепле, урлаткан мең ғәйепле.

169. **Кто украл яйцо, украдет и курицу.**

Төймә урлаған дейә лә урлар.

170. **Кто успел, тот и съел.**

Кем өлгөр — шул алғыр.

171. **Куда ветер, туда и он.**

Ел ҡайһы яҡҡа өрә, ул — шул яҡҡа.

172. **Куда грива, туда и хвост.**

Эт артынан — ҡойроҡ.

173. **Куда иголка, туда и нитка.**

Энә үткән ерҙән еп тә үтә.

174. **Куда ни кинь, всюду (везде) клин.**

Ҡайҙа ла бер ҡояш.

175. **Куй железо, пока горячо.**

Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ.

176. **Кум говорит наобум, а кума — бери на ум.**

Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла.

177. **Купленый кус горек.**

Һатып алған — һарымһаҡ.

178. **Курица соседа всегда выглядит гусыней.**

Күршенең тауығы ҡаҙҙай, ҡатыны ҡыҙҙай.

179. **Курицу яйцо не учит.**

Күкәй тауыҡты ейрәтмәй.

180. **Кутит да людей мутит.**

Үҙе урлай, үҙе юллай.

Л

1. **Ласковое слово и кость ломит.**
   Йылы һүҙ һөйәктән үтә.

2. **Ласковое слово лечит.**
   Яҡшы һүҙ йәнгә рәхәт, яман һүҙ йәнгә йәрәхәт.
   Яҡшы һүҙ — йән аҙығы, яман һүҙ — баш ҡаҙығы.

3. **Ласковое слово многих прельщает.**
   Яҡшы һүҙ яу туҡтатырға ярай.
   Татлы тел йыланды өңөнән сығарыр.
   Тәмле тел йылан арбар.

4. **Ласковое слово пуще дубины.**
   Йылы һүҙ таш иретә.
   Ҡаты һүҙҙән тал һына, йомшаҡ һүҙҙән таш һына.
   Татлы тел таш ярыр.

5. **Ласковое слово слаще меда.**
   Яҡшы һүҙ балдан татлы.
   Татлынан татлы — яҡшы һүҙ, затлынан затлы — яҡты йөҙ.

6. **Ласковое теля двух маток сосет.**
   Имә белгән ҡолон ике бейәнең һөтөн бөтөргән.
   Ауыҙы йомшаҡ ҡолон биш бейәне имер.

7. **Легка ноша на чужом плече.**
   Әҙергә — хәҙер (бәҙер).

8. **Легки взятки, тяжелы отдайки.**
   Алыуы еңел булһа ла, биреүе ауыр.

9. **Легко добыто — легко прожито.**
   Елдән килгән елгә китә.

10. **Легко найти счастье, а потерять еще легче.**
    Бәхет ҡошо ҡунғанда беленмәй, осоп киткәндә беленә

11. **Легко очернить, нелегко обелить.**
    Ҡарайған бит тиҙ ағармай.

12. **Легко чужими руками жар загрести.**
Кеше ҡулы менән елкә тырнауы өңел.

13. **Лег — свернулся, встал — встряхнулся.**
Тоphам — ашым, ятhам — башым.

14. **Лежа и камень мохом обрастает.**
Ятҡан таш мүкләнә, йөрөгән таш шымара.

15. **Лежа на берегу, плавать не научишься.**
Ярҙа ултырып, йөҙөргә өйрәнмәйҙәр.

16. **Лежачего не бьют.**
Йығылғанды дөмбәҫләмәйҙәр (түбәләмәйҙәр).

17. **Лежебоке и солнце не в пору всходит.**
Ялҡауға ҡояш та ваҡытында сыҡмай.

18. **Лекарство не лечит, а калечит.**
Сама менән — дарыу, саманан уҙhа — ағыу.

19. **Лекарство — тот же яд.**
Ағыу мөнән дарыу бер заттан.

20. **Ленивому и в будни праздник.**
Ялҡауға көн дә байрам.

21. **Ленивый всегда так: «хлеба давай по пуду, а работать не буду».**
Эшкә булhа — «алла башым», ашҡа булhа — «ҡайҙа ҡашығым?».

22. **Ленивый могилы не стоит.**
Ялҡауға ҡәбер хәрәм.

23. **Ленивый сидя спит, лежа работает.**
Ялҡау баҫып йоҡлай, ултырып эшләй.

24. **Леность наводит на бедность.**
Ярлылыҡтың башы — ялҡаулыҡ.

25. **Лень ленивому и за ложку взяться.**
Ялҡауға ҡашыҡ та ауыр.

26. **Лес лесом, а бес бесом.**
Ҡаҙ ҡаҙ менән, таҙ таҙ менән.

27 **Лес слышит, а поле видит.**
Урман — ҡолаҡ, ялан — күҙ.

28. **Лесом шел, а дров не видал.**
Күңел күҙе күрмәһә, маңлай күҙе — ботаҡ тишеге.

29 **Летний день год кормит.**
Йәйге (яҙғы) көн йыл туйҙыра.

30. **Летом не соберешь, зимой не найдешь.**
Ҡар өҫтөндә ҡарға тиҙәге лә табылмай.

31 **Лживому, хоть и правду скажет, никто не поверит.**
Ялғансының дөрөҫ һүҙенә лә ышанмаҫтар.
Ялғансының йорто янган, берәү ҙә ышанмаған.

32. **Либо в сук, либо в тетерю.**
Тейһә — тейенгә, теймәһә — ботаҡҡа.

33. **Либо грудь в крестах, либо голова в кустах.**
Йә баш, йә мал.

34. **Либо пан, либо пропал.**
Йә баш, йә мал.

35. **Либо рыбку съесть, либо на мель сесть.**
Йә уңам, йә туңам.

36. **Либо сена клок, либо вилы в бок.**
Йә үләһең, йә ҡалаһың.

37. **Лиха беда начало.**
Эште башлауы ғына ауыр, башлаһаң, эш ҡарышмай.
Эшләһәң, эш ҡарышмай.
Башлаған эш — бөткән эш.

38. **Лиха беда одну нажить, другая — сама придет.**
Бәлә-ҡаза игеҙ йөрөй.
Ҡайғы килһә, игеҙ килә.

39. **Лихва да лесть — дьяволу в честь.**
Ялағайланыу ҙа яман, яла яғыу ҙа яман.

40. **Лихо помнится, а добро забывается.**
Якшылык тиҙ онотолһа ла, яманлык онотолмай.

41. **Лицом хорош, да душой не пригож.**
Үҙе кыҙыл, үҙәге корт.
Тыштан ялтырай, эстән калтырай.

42. **Лишнее говорить, себе навредить.**
Уйламай һөйләгән — ауырымай үлгән.

43. **Лишнее слово досаду наводит и до стыда доводит.**
Тартай теленән таба (табыр).
Тик тормаған теленән табыр.

44. **Лишнее слово — лишний промах.**
Абайламай һөйләгән — ауырымай үлгән.
Күп һүҙ быҙау имеҙә.

45. **Лишние деньги — лишние хлопоты.**
Байлыктың мәшәкәте үҙе менән артыр.

46. **Лодка есть, весел нет.**
Кәмәһе булһа, ишкәге юк.
Ун икенең бере юк.

47. **Лодырь всегда найдет причину, чтобы не работать.**
Ялкауға ял табыла.

48. **Лодырю всегда нездоровится.**
Ялкауға эш кушһаң, башы ауыртыр.

49. **Ложка дегтя испортит бочку меда.**
Бер карын майҙы бер комалак боҙа.
Бер тәпән балды бер тамсы ағыу боҙор.
Бер тамсы дегет бер мискә балды боҙор.

50. **Ложка дорога к обеду.**
Кыҙыл йомортка көнөндә киммәт.

51. **Ложкой не наелся, языком не налижешься.**
Ашап туймағанды ялап туймаҫһың.

52. **Ложь на гнилых ногах ходит.**
Ялғандың аяғы ҡыҫҡа.

53. **Ложь на тараканьих ножках ходит.**
Ялғандың аяғы етеҙ.

54. **Ломит как лошадь, рычит как собака.**
Ат кеүек эшләй, эт кеуек тешләй.

55. **Лошадь не идет, так и телега стоит.**
Ат тартмаһа, арба бармай.

56. **Лошадь признают по зубам, человека — по делам**
Ат — тешенән, кеше эшенән билдәле.

57. **Лукавый друг хуже недруга.**
Рыя дуҫтан тура һүҙле дошман артыҡ.

58. **Лукавых людей не имей за друзей.**
Ике йөҙлө дуҫтан дошман яҡшы.

59. **Лучше быть в деревне первым, чем в городе последним.**
Ҡаланың ҡоло булғансы, даланың эте бул.

60 **Лучше быть соловьем в кустах, чем вороной в лесах.**
Ҙур урманда ҡарға булғансы, бер ҡыуаҡта былбыл бул

61 **Лучше в глаза, чем за глаза.**
Ситкә әйткәнсе, биткә әйт.

62 **Лучше голубь в тарелке, чем глухарь на току.**
Үле арыҫландан тере бесәй артыҡ.

63 **Лучше рябчик в руках, чем два на ветке.**
Лучше синица в руках, чем журавль в небе.
Һауалағы торнанан ҡулдағы турғай (сәпсек) артыҡ.

64. **Лучше яйцо сегодня, чем курица завтра.**
Иртәгәге тауыҡтан бөгөнгө йомортҡа (себеш) артыҡ.

65 **Лучше меньше да лучше.**
Бер булһын, берәгәй булһын.

Лучше поздно, чем никогда.
Һис булғансы, кис булһын.

67. **Лучше смерть славная, чем жизнь позорная.**
Хур булып йәшәүҙән намыҫлы үлем артыҡ.
Яман йөрөмдән яҡшы үлем артыҡ.

68. **Лучше смерть, чем бесчестье.**
Мәсхәрәнән үлем яҡшы.
Үлөмдән хурлыҡ яман.
Дарға менһәң дә, дан мөнән мен.

69. **Лучше умереть стоя, чем жить на коленях.**
Ҡурҡаҡ (ҡол) булып йәшәүҙән үлем яҡшы.

70. **Лучше умная хула, чем дурацкая похвала.**
Аҡылһыҙҙан маҡталғансы, аҡыллынан бер тиргәл.

71. **Лучше хлеб с водой, чем пирог с бедой.**
Ас тамағым, тыныс ҡолағым.

72. **Льстец под словами — змей под цветами.**
Баллы һүҙ баш әйләндерә.
Теленең осо татлы, төбө ҡортло.

73. **Любви все возрасты покорны.**
Мөхәббәт йәш һорамай.

74. **Любишь брать, люби и отдавать.**
Ала белһәң, бирә лә бел.

75. **Любишь гостить, люби и к себе звать.**
Ҡунаҡ ашы ҡара-ҡаршы.

76. **Любишь кататься, люби и саночки возить.**
Рәхәтен күргәнһең, михнәтенә лә түҙ.

77. **Любишь тепло, люби и дым.**
Балын яратҡас, ҡортон да ярат.

78. **Любовь зла — полюбишь и козла.**
Йәне төләгән (һөйгән) йылан ите ашағаН.

79. **Любовь ни зги не видит.**
Ғашиҡ булған — күҙһеҙ.

80. **Любопытной Варваре нос оторвали.**
Любопытному на базаре нос прищемили.
Күпте белһәң, тиҙ ҡартайырһың.

81. **Людей слушай, а свой ум имей.**
Кешегә кәңәш ит, үҙ аҡылын менән эш ит.

82. **Люди с базара, а Назар — на базар.**
Ығыштыҡы — төштән һуң.
Һаңғырауға — төштән һуң.

83. **Люди рады лету, а пчела — цвету.**
Гөл ҡәҙерен былбыл белер.

М

1. **Малая искра великий пожар родит.**
Осҡондан ялҡын сыға.

2. **Маленькие детки тяжелы на коленах, большие — на сердце.**
Бала саҡта һөйҙәрә, үҫә килә көйҙәрә.
Бала итәктә саҡта һөйҙәрә, итәктән төшкәс, көйҙәрә.

3. **Маленькая собачка лает — от большой слышит.**
Этенән күреп, көсөгө өрә.
Үрмәксенән күрмәксе.

4. **Маленький горшок быстро вскипает.**
Бәләкәй ҡаҙан тиҙ ҡайнай.

5. **Маленькое дело лучше, чем большое безделье.**
Тауҙай талабың булғансы, әнәләй яуабың булһын.

6. **Мал золотник, да дорог.**
Алтын-көмөш ҙур булмай.

7. **Мало чести — стоять на месте.**
Тик торған — отторған, тик тормаған — туҡ торған.

Мастер глуп — нож туп.
Эш белмәгән ҡоралынан күрер.
Ата алмаған йәйә һайлар.
Көсһеҙ көрәк һындырыр.
Тейҙерә алмағандың уғы кәкре.

9. **Масть к масти подбирается.**
Ишәй ишен таба, Ҡушай ҡушын таба.

10. **Матка по дочке плачет, а дочка по доске скачет.**
Әсәһендә — ҡыҙ ҡайғыһы, ҡыҙында — ҙҙ ҡайғыһы.

11. **Мать — святое слово.**
Әсә хаҡы — Тәңре хаҡы.

12. **Медведь в лесу, а шкура продана.**
Атмаган айыуҙың тиреһен тунамайҙар (тунама).
Атмаған ҡуян, аҫмаған ҡаҙан.

13. **Мед сладок в меру.**
Ашҡа ла бар бер сама.

14. **Между воронами и сорока по-вороньи каркает.**
Кем арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың.

15. **Между двумя стульями не усидишь.**
Ике ултырғысҡа ултырған тиҙ төшөр.

16. **Меж пальцами мясо не отрастает.**
Бармаҡ араһына ит үрмәй.

17. **Меньше говори, да больше делай.**
Әҙ һейлә, күп эшлә.

18. **Меньше говорить — меньше согрешить.**
Күп йерегән юл яңылыша,
күп һейләгән тел яңылыша.
Күп һүҙ ялғанһыҙ булмай.

19. **Мерзлой роже да метель в глаза.**
Хәйерсегә ел ҡаршы.

20. **Метил в цель, попал в пень.**
Сәпкә теймәһә — йәпкә.
Тейһә — тейенгә, теймәһә — ботаҡҡа.

21. **Мешком солнышко не поймаешь.**
Иләк менән һыу ташымайҙар.

22. **Мил гость, что недолго гостит.**
Ҡунаҡ ҡәҙере өс көн.

23 **Милости прошу к нашему шалашу.**
Икмәк-тоҙ, яҡты йөҙ.

24 **Мир охнет, так лес засохнет.**
Күмәкләгән яу ҡайтарған.

25 **Мир плюнет — море будет.**
Ил төкөрһә, күл булыр.

26. **Мирская молва, что морская волна.**
Утыҙ тештән сыҡҡан утыҙ ырыуға (ауылға) өтер.
Хәбәр дүрт аяҡлы.

27. **Много будешь знать,быстро (скоро) состаришься.**
Күпте белһәң, тиҙ ҡартайырһың.

28. **Много выбирать — женатым не бывать.**
Һайланған — һаҙға, ҡапланған баҙға.

29. **Много искать станешь, ничего не достанешь.**
Күпте өмөт итеп, әҙҙән ҡоро ҡалма.

30. **Много начальников, да мало печальников.**
Һин дә түрә, мин дә түрә, талдан ситән кем үрә?
Һин дә мулла, мин дә мулла, атҡа бесән кем һала?

31. **Много поту, да мало проку.**
Тик торған да юҡ, эш ҡырған да юҡ.

32. **Мокрый дождя не боится.**
Һыуға батҡанға ямғыр ҡурҡыныс түгел.

Молод годами, да стар умом.
Һин элек тыуһаң, мин белеп тыуған.

34. **Молодец на овец, а на молодца — сам овца.**
Бахыр алдында — батыр, батыр алдында — үҙе бахыр.

35. **Молодец своему слову верен.**
Егет һүҙе бер булыр.

36. **Молодость не без глупости, старость не без дурости.**
Бер йәшлектә, бер ҡартлыҡта.
Йәшлек — иҫәрлек.

37. **Молчун-собака исподтишка хватает.**
Аҫтыртын эт өрмәй тешләй.

38. **Моя хата с краю, ничего не знаю.**
Тирә-яғым яу булһа ла, өйөм эсе һау булһын.

39. **Мудрость в голове, а не в бороде.**
Аҡыл йәштә түгел, башта.
Аҡыл ташта түгел, башта.

40. **Мужа отбирать — душу отнимать.**
Йәр бирмәк — йән бирмәк.

41. **Муж — голова, жена — шея, куда хочет, туда и повернет.**
Ир — баш, ҡатын — муйын, ҡайҙа теләһә, шунда бора.

42. **Муж да жена — одна сатана.**
Бизмән менән гер бергә, ҡатын менән ир бергә.

43. **Муж жену любит здоровую, а брат сестру — богатую.**
Ирҙәр һөйөр һауҙы, ҡатындар һөйөр байҙы.

44. **Мужик в дверь, а жена в Тверь.**
Ире сыға ишектән, бисәһе сыга тишектән.

45. **Мужик задним умом крепок.**
Ир аҡылы бер килә.

46. **Муравей не велик, а горы копает.**
Ҡырмыҫҡалар ҙур түгел, күмәкләшеп тау аҡтара.
Ҡарама беләккә, ҡара йөрәккә.

47. **Муха стекло не разобьет.**
Себен тулап, тәҙрә ватмаҫ.

48. **Мышь в коробке, как воевода в городе.**
Ояһында сыҫҡан да батыр.

49. **Мягко стелет, да жестко спать.**
Йомшаҡ һөйләп (йәйеп), ҡатыға ултырта.

Н

1. **На алтын товару, на рубль раструски.**
Бер тинлек ҡуян, ун тинлек зыян.

2. **На бедного Макара все шишки валятся.**
Кем яман — Сәтәү* яман.
Бары ла бойҙай, беҙ — һалам,
бары ла яҡшы, беҙ — яман.
Хәйерсегә ел ҡаршы.

3. **На безлюдье и Фома дворянин.**
Һандуғас юҡ йылды ҡарға дан тотор.

4. **На безрыбье и рак рыба.**
Юҡтан ҡоҙағыи.
Ит булмаганда, үпкә лә аш.

5. **На Бога надейся, а сам не плошай.**
Аллаға ышан, үҙең ҡымшан.

6. **На Бога надежды — сидеть без одежды.**
Аллаға ышанған — ас ҡалған.

7. **На большом пути и малая ноша тяжела.**
Йәйәүлегә янсыҡ та ауыр.

---

* Перевод: Кто плох — *Сатау* плох. *Сатау* — мужское имя (или прозвище). Поговорка, имеющая локальное распространение.

8. **На брюхе — шелк, а в брюхе щелк.**
Өйө бейек, өйрәһе шыйыҡ (һыйыҡ).
Тыштан ялтырай, эстән ҡалтырай.

9. **На весь мир не будешь мил.**
Бөтә кешегә лә ярап булмай.

10. **На вкус и цвет товарища нет.**
Һәр кемдең үҙ зауығы.
Зауыҡта бәхәс юҡ.
Йәне теләгән (һөйгән) йылан ите ашаған.

11. **На воре шапка горит.**
Бурҙың бүрке яна.

12. **На всех не угодишь.**
Бөтә кешегә лә ярап булмай.
Кешегә ай менән ҡояш та ярамай.

13. **На все есть свой порядок.**
Һәр нәмәнең үҙ яйы.

14. **На всякий случай свой обычай.**
Һәр эштең дә яйы бар, арбаның да майы бар.

15. **На всякого горшка найдется и покрышка.**
Силәгенә күрә ҡапҡасы.

16. **На глазах окошки, да не видит ни крошки.**
Күңеле һуҡырҙың күҙе һуҡыр.

17. **На добрый привет добрый и ответ.**
Яҡшылыҡҡа — яҡшылыҡ.

18. **На дурака не надейся.**
Булырҙайҙан тайшанма, булмаҫтайға таянма.

19. **На зеркало неча пенять, коли рожа крива.**
Ауыҙың ҡыйыш булһа, көҙгөгә үпкәләмә.

20. **На кого была надежда, того и разорвало.**
Ышанған тауҙа кейек юҡ.

21. **На ком скрутится, на том и смелется.**
Көм итәгәнә ут төшһә, шуныҡы яна.

22. **На коне сидит, а коня ищет.**
Аҫтындағын алты ай эҙләгән.

23. **На красивого глядеть хорошо, а с умным жить легко.**
Матурлыҡ — күҙ өсөн,
холоҡ — күңел өсөн.

24. **На крепкий сук — острый топор.**
Ҡаты ағаҫҡа — ҡаршы сөй.

25. **На лжи далеко не уедешь.**
Ялғандың аяғы ҡыҫҡа.

26. **На ловца и зверь бежит.**
Бирәм тигән ҡолона сығарып ҡуйыр юлына.
Һуҡырҙың теләгәне ике күҙ.

27. **На льстивые речи не мечись,**
на грубую правду не сердись.
Ҡуштанға ышанма, ҡушҡанға ышан.

28. **На людях скромен, а дома темен.**
Әрһеҙлек — үҙең өсөн, баҫалҡылыҡ — кеше өсөн.

29. **На нет и мы сыты.**
«Юҡ»ҡа мин дә туҡ.

30. **На нет и суда нет.**
Юҡтың яуабы юҡ.
Юҡҡа суд юҡ, зарураттан зыян юҡ.

31. **На новое платье — старые заплатки.**
Яңы күлдәккә иҫкә ямау.

32. **На ногах правды нет.**
Йүгереп ҡуян ҡыуалар, ултырып аҡыл йыялар.

33. **На миру и смерть красна.**
Кешегә асҡан ҡайғы — ярты ҡайғы.

На одиноких поклон да пересуд.
Яңғыҙға яла күп була.

35. **На коня двух сбруй не кладут.**
Бер атҡа ике ҡамыт кейҙермәйҙәр.

36. **На одном часу и снег, и дождь.**
Аҙнаһына биш йома.

37. **На переправе коней не меняют.**
Кисеу кискәндә ат туғармайҙар.

38. **На послушного коня кнут не нужен.**
Яҡшы атҡа ҡамсы кәрәкмәй.

39. **На правду нет слов.**
Тура һүҙгә яуап юҡ.

40. **На пустые крюки не клюют щуки.**
Ҡоро ҡулға ҡош ҡунмай.

41 **На рожон не лезь.**
Көсөңә күрә көсән.

42 **На своей печи — сам себе голова.**
Үҙ өйөмдә — үҙ көйөм.

43. **На своей улице бойка и курица.**
Үҙ ояһында эт тә юлбарыҫ.

44. **На своей улочке храбра и курочка.**
Эт ояһында көслө.

45. **На слепого очков не подберешь.**
Һуҡыр тауыҡҡа бары ла бойҙай.

46. **На словах медок, а на сердце ледок.**
Теленең осо татлы, төбө ҡортло.

47. **На словах, что на гуслях,**
а на деле, что на балалайке.
Тел тиһәң — телеп һала, эш тиһәң — ишеп һала.

48. **На смирного осла всякий сядет.**
Меҫкен ишәккә һәр кем атлана.

49. **На сырые дрова подтопка, на прореху заплатки.**
Йыртыкка ямау.

50. **На то прут, чтобы гнуть,**
а в корень пойдет — на стойку пригодится.
Сыбыҡ сакта бөгелмәгән, таяҡ булғас, бөгөлмәҫ.

51. **На трех свиней корму не разделит.**
Ике быҙауға кәбәк айыра белмәй.

52. **На урода все не в угоду.**
Ауан ауға барһа, ауҙа ғауға сыға.

53. **На час отстанешь — за день не догонишь.**
Бер көн артта ҡалһаң, биш кен йүгерерһең.

54. **На что и клад, коли в семье лад.**
Аралар тыныс булһа, ғаилә ҡорос була.

55. **На что ложка, коли нечего хлебать.**
Ашы булмағас, ҡалағы нимәгә?

56. **На чужбине и собака тоскует.**
Сит ерҙә мал да ерһәй.

57. **На чужой каравай рот не затевай.**
Кеше ризығына кермә.
Кеше әйберенә нәфсеңде һуҙма.

58. **На чужой роток не накинешь платок.**
На чужой рот пуговицу не нашьешь.
Ил ауыҙына иләк ҡаплап булмай.

59. **На чужой стороне и весна не красна.**
Сит илдең ере лә йәмһеҙ, һыуы ла тәмһеҙ.

60. **На чужой сторонушке рад своей воронушке.**
Сит илдә үҙ илеңдең эте лә якын.

61. **На чужую одежу плоха надежа.**
Кеше аты тирсән, кеше көйеме керсән.

62. **На языке мед, а под языком лед.**
Теленең осо татлы, төбө ҡортло.

63. **Навык мастера ставит.**
Эш үзе өйрәтә.

64. **Над другом посмеешься — над собой поплачешь.**
Кешенән көлмәк, үзеңә килмәк.
Көлкә көлә етә, артынан ҡыуа етә.

65. **Назвался груздем, полезай в кузов.**
Тәртәгә бер егелгәс, тартмай хәлең юҡ.

66. **Наездом и хлеба не напашешь.**
Иген яйын иккән белер,
арба яйын еккән белөр.

67. **Наемный не швец, не жнец.**
Кенләксәгә көнөң ҡалмаһын.

68. **Наказуй детей в юности.**
Бала тыйһаң, баштан тый.

69. **Накаркала ворона беду.**
Эт аламаһы илгә бүре килтерә (килтерер).

70. **Нам, грешным, и ветер навстречный.**
Хәйерсегә ел ҡаршы.

71. **Нам только с рук долой.**
Минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе.

72. **Напугал блох — бросил шубу в печь.**
Беткә үсегеп, тунын утҡа яҡҡан.

73. **Наряди пень в вешний день, и тот будет красив.**
АҒас күрке — япраҡ, әҙәм күрке — сепрәк.

74. **Наряди свинью в серьги, а она все в навоз.**
Һыйыр һыйпаганды белмәҫ.

75. **Насильно мил не будешь.**
Һөймәгәнгә һейкәлмә.

76. **Наступишь собаке на хвост, сватом назовет.**
Эттең ҡойроҒона баҫһаң, «еҙнә», ти.

77. **Начал говорить, так договаривай.**
«А»һын әйткәс, «Б»һын да әйт.

78. **Начатое дело доведи до конца.**
Эшеңде башлама, башлаһаң — ташлама.
Эште ярты юлда ҡалдырғансы, башламағаның яҡшы.

79. **Начиная дело, о конце помышляй.**
Инереңдән алда сығырыңды уйла.
Эште башлар алдынан аҙағын уйла.

80. **Не бил бы в чужие ворота плетью, не ударили бы в твои дубиной.**
Кеше ҡапҡаһын ҡаҡһаң аяҡ менән, үҙ ҡапҡаңды ҡағырҙар таяҡ менән.

81. **Не бери ноши сверх мочи.**
Көсөң етмәгәнгә көсәнмә.

82. **Не бойся собаки брехливой, а бойся молчаливой.**
Шым аҡҡан һыуҙан, өрмәй торған эттән һаҡлан.

83. **Не та собака кусает, что лает, а та, что молчит да хвостом виляет.**
Өргән эт тешләмәй, өрмәгән эттән һаҡлан.

84. **Не той собаки бойся, что громко лает, а той, что исподтишка хватает.**
Өрмәй тешләй.

85. **Не бойся умного врага, бойся глупого друга.**
Аҡылһыҙ дуҫтан аҡыллы дошман артыҡ.

86. **Не буди лиха, пока оно спит.**
Йоҡлаған йыландың ҡойроғона баҫма.

87. **Не было ни гроша, да вдруг алтын.**
Күрмәй күргән — күн итеген башына кейгән.

88. **Не было печали, да черти накачали.**
Ауыртҡан башҡа — тимер таяҡ.
Ҡайғы юҡта ҡайғы булды ҡайнатамдың үлеме.
Өҫтәүенә өс сүмес.
Ҡайғы юҡта ҡайғы итеп, ҡайным ниңә үлде икән?

89. **Не быть вороне соколом.**
Ҡарға бөркөткә әйләнмәҫ.

90. **Не велик пан, перелезешь и сам.**
Эт яллаған кисөү кисмәҫ.

91. **Не верь тому, кто легок на обещания.**
Аҙым һайын бирелгән вәғәҙә алдауга тиң.

92. **Не верь ушам, а верь свои очам.**
Ишеткән менән күргән бер түгел.

93. **Не видишь — душа мрет, увидишь — с души прет.**
Күрмәгәндең күргеһе килә, күргәндең ҡоҫҡоһо килә.

94. **Не вижу — так и не верю.**
Күҙ күрмәй күңел ышанмай.
Күргәнеңде ҡуйып, ишеткәнеңә ышанма.

95. **Не вкусив горького, не узнаешь (не оценишь) сладкого.**
Әсене татымаган сөсөнөң ҡәҙерен белмәҫ.
Бәхеттең ҡәҙерен ҡайғы килгәндә белерһең.

96. **Не все караси, есть и ерши.**
Бөр яҡшыға, бөр шаҡшы.

97. **Не всегда говори,что знаешь, но всегда знай, что говоришь.**
Белгәнөңде һөйләмә, ни һөйләгәнеңде бел.

98. **Не все реки текут в одну сторону.**
Бар йылға ла бер яҡҡа аҡмай.

99. **Не все вслух да в голос.**
Аҡылыңды өскә бүл: берен һейлә, икеһе эстә торһон.

100. **Не все коту блины, попадают и колотушки.**
Не все коту масленица, бывает и великий пост.

Ҡапҡан һайын ҡалъя эләкмәй.

101. **Не все то золото, что блестит.**
Һәр ялтыраған алтын түгел.

102. **Не все то правда, что люди говорят.**
Ишеткән бер һүҙҙе һөйләмә, әллә ысын, әллә буш.

103. **Не все, что серо, волк.**
Һәр ялтыраган алтын түгел.

104. **Не всякое слово в строку.**
Аштың майы, һүҙҙең яйы була.

105. **Не всяк монах, на ком клобук.**
Кейемеңә ҡарап ҡаршы алалар, аҡылыңа ҡарап оҙаталар.

106. **Не выливай помоев, не приготовив чистой воды.**
Алда буласаҡ туй өсөн алдан бейей башлама.

107. **Не выноси сор из избы.**
Өйөндәге сүпте ситән аша ырғытма.

108. **Не говори гоп, пока не перескочишь.**
Иҙел күрмәй, иҙеүең ысҡындырма.
Иҙел күрмәй, итегең сисмә.
Кисеү күрмәй, аяғыңды сисмә.
Сыҡмаган ямғырға сәкмән ябынма.
Тыумаған балаға туҙ бишек.

109. **Не говори, чему учился, а говори, что узнал.**
«Уҡыным», тимә, «белдем», тиген.

110. **Не годы уроды, а люди.**
Заман боҙоҡ түгел, әҙәм боҙоҡ.

111. **Не гони коня кнутом, а гони овсом.**
Атты сыбыртҡы менән ҡыума, һоло менән ҡыу.

112. **Не грозен враг за горами, а грозней за плечами.**
Алыҫтағы дошмандан аңдып йөрөгән дуҫ яман.

113. **Не грози щуке морем.**
Эткә һөйәк ырғытһаң, өрөүенән туҡтар.

114. **Не давай голодному хлеб резать.**
Астан ҡаҙан аҫтырма.

115. **Не давши слова, крепись, а давши, держись.**
Вәғәҙә итһәң, вафа ҡыл.
Әйткән һүҙендә тора бел.

116. **Не дал бог свинье рогов, а бодуща была бы.**
Һөҙгәк һыиырға (тәкәгә) Хоҙай мөгөҙ бирмәгән.

117. **Не делай из мухи слона.**
Төймәләйҙе дөйәләй итмә.
Сүпте сүмәлә итмә.

118. **Не дели шкуру неубитого медведя.**
Атмаған айыуҙың тирәһен тунама.

119. **Не добивай поверженного.**
Иығылғанды дөмбәҫләмәйҙәр (түбәләмәйҙәр).

120. **Не дорог обед, дорог привет.**
Һый ҡиммәт түгел, яҡты йөҙ ҡиммәт.

121. **Не дразни, кот, пса, придешь домой без уса.**
Оло ат мөнән уйнаған кәсе аттың аяғы аҡһаған.

122. **Не думай, щука, как влезть, думай, как вылезть.**
Көрөрендән алда сығырыңды уйла.

123. **Не думал, не гадал, как в беду попал.**
Алдырыр көн яҙҙырыр.

124. **Не жалей алтына, отдашь полтину.**
Әҙҙе ҡыҙғанып, күптән буш ҡалма.

125. **Не жалей спины — будут трудодни.**
Тир түкмәйенсә труддень булмаҫ, бил бөкмәйенсә бураң тулмаҫ.

126. **Не заводи седла, пока коня нет.**
Тыумаған тай, алтын эйәр, атланып, билен һындырма.
Тыумаған туры алашаның бил һөйәген һындырма.
Тыумаған тайҙың билен һындырма.
Тыумаған тайға нуҡта үрмә.

127. **Не замочившись, рыбки не поймаешь.**
Аяғың тәп итмәй, ауыҙың сәп итмәҫ.

128. **Не за свое дело не берись.**
Үҙең белмәгән эшкә тотонма.

129. **Не зная броду, не суйся в воду.**
Кисеү белмәй, һыуға төшмә.

130. **Не зять бы был, не собакой бы и слыл.**
Кейәү холҡо — көҙгө көн.

131. **Не изведаешь, пока не отведаешь.**
Һыуға инмәй, йөҙөргә өйрәнеп булмай.
Мунсаға ингәс, сабынмай булмай.

132. **Не играй с огнем, обожжешься.**
Ут менән уйнама, үҙең кейөрһөң.

133. **Не имей сто рублей, а имей сто друзей.**
Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын.
Ил өҫтөндә илле дуҫың булһын.

134. **Не имея лошади, не покупай хомута.**
Тыумаған тайға нуҡта үрмә.

135. **Не ищи пути с непутевым.**
Йүнһеҙ менән юлдаш булма.

136. **Не корми калачом, но встречай с открытой душой.**
Ашыҡ булмаһа ла, ҡашыҡ булһын.

137. **Не красивая красива, а любимая.**
Матур матур күренмәҫ, һөйгән матур күренер.
Күңелең кемде һөйһә, шул матур.

138. **Не красна изба углами, а красна пирогами.**
Кем икмәкле — шул хикмәтле.

139. **Не купи двора, а купи соседа.**
Не узнав соседа, дом не покупай.
Йорт һалһаң, күршеңде һайлап һал.

140. **Не купля учит, а продажа.**
Алыу өйрәтмәй, һатыу өйрәтә.

141. **Не лови рыбу в мутной воде.**
Болғансыҡ һыуҙа балыҡ тотма.

142. **Не лошадь, а корм везет.**
Аҙыҡлы ат арымаҫ.

143. **Не место красит человека, а человек место.**
Эшсән бәхетте эштән эҙләр, эшкинмәгән ситтән эҙләр.

144 **Не мил свет, когда друга нет.**
Дуҫың янында булмаһа, донъяның йәме юҡ.

145 **Не мудрено начать, мудрено кончить.**
Эштең тәме аҙағында.

146. **Не мытьем, так катаньем.**
Һүҙ үтмәгән ерҙән уҡ үтә.

147. **Не надобен и клад, коли у мужа с женой лад.**
Татыу булһа ҡатының, ары торһон алтының.

148. **Не надо хвалить утро, пока не наступил вечер.**
Иртәне кисеҙ мактама.

149. **Не ножа бойся, а языка.**
Кеше һүҙе кеше үлтерә.

150. **Не отведав горя, не познаешь и счастья.**
Бәхеттең ҡәҙерен ҡайғы килгәндә белерһең.

151. **Не откладывай на завтра то, что можно сделать сегодня.**
Бегенгә эшеңде иртәгәгә ҡалдырма.

152. **Не о том речь, что съели,**
а о том, куда краюху дели.
Ҡапҡан белмәй, тапҡан белә.
Ашаған белмәй, тураған белә.

153. **Не от росы урожай, а от поту.**
Иген ер һыуына үҫмәй, тир һыуына үҫә.

154. **Не ошибается тот, кто ничего не делает.**
Бер нәмә лә эшләмәгән кеше генә яңылышмай.

155. **Не переливай пустое в порожнее.**
Бушты бушҡа бушатма.

156. **Не плетень городи, а с соседями дружбу веди.**
Йорт һатып алма, күрше һатып ал.

157. **Не плюй в колодец — пригодится воды напиться.**
Ҡоҙоҡҡа төкөрмә — һыуын эсерһең.
«Эсмәм» тигән ҡоҙоҡтан өс әйләнеп эсерһең.
Кире инер ишегеңде ҡаты япма.
Тиң-ҡушыңдан ҡул һелтәмә, бер көндө кәрәк булыр.

158. **Не подмажешь, не подъедешь.**
Майһыҙ таба ҡупмай.
Майһыҙ ҡоймаҡ шыумай.

159. **Не подходи к борову, не зная норову.**
Ҡылығын белмәгән малга яҡын барма.

160. **Не пойман — не вор.**
Тотолмаған уғры түгел.

161. **Не поминай плешивого перед лысым гостем.**
Бер ҡатын алдында икенсеһен мактама.

162. **Не помутясь, и море не уставится.**
Бер болғанмай һыу ҙа тонмай.

163. **Не по словам судят, а по делам.**
Һүҙенә ҡарама, эшенә ҡара.
Кешене белгең килһә, бер һүҙенә, бер эшенә ҡара.
Кешене һүҙенә ҡарап баһалама, эшенә ҡарап баһала.
Кешемен тиһәң, һүҙең менән эшең бар булһын.

164. **Не потрудиться, так и хлеба не добиться.**
Тик тороп, тук булмаҫһың.

165. **Не по хорошу мил, а по милу хорош.**
Кем матур — ул матур, кемде һейһәң, шул матур.
Күңелең кемде һөиһә, шул матур.
Сибәр сибәр түгел, һөйгән сибәр.
Һылыу һылыу күренмәҫ, һөйгән һылыу күренер.

166. **Не прав медведь, что козу задрал,**
не права и коза, что в лес зашла.
Не прав медведь, что корову съел,
не права и корова, что в лес зашла.

Ғәиеп атта ла бар, тәртәлә лә бар.

167. **Не пригож лицом, да хорош умом.**
Йөзө матур булмаһа ла, аҡылы матур.

168. **Не работа старит, а забота.**
Кешөне эш ҡартайтмай, нужа ҡартайта.
Кешөне эш бөтөрмәй, ҡайғы бөтөрә.

169. **Не рад больной и золотой кровати.**
Һаулығың булмаһа, байлығыңдың ҡәҙере юҡ.

170. **Не радуйся нашедши,**
Не плачь потерявши.
Юҡ, тип көйөнмә, бар, тип һөйөнмә.

171. **Не раскусив, не отведаешь.**
Һыуға инмәй йөҙөргә өйрәнеп булмай.

172. **Не реви раньше смерти.**
Ауыртмаҫ борон «ауырта», тип яр һалма.

173. **Не рой другому яму, сам в нее попадешь.**
Кешегә баҙ ҡаҙыма, үҙең төшөрһөң.

174. **Не руби сук, на котором сидишь.**
Үҙең ултырған ботаҡҡа балта сапма.

175. **Не садись под чужой забор, а хоть в крапиву, да под свой.**
Кеше өйөнөң түрендә булғансы, үҙ өйөңдөң гүрендә бул.

176. **Не сваливай вину на чужую дверь.**
Ауыҙың ҡыйыш булһа, көҙгөгә үпкәләмә.

177. **Не светило, не горело, да вдруг припекло.**
Көн күрмәгән көн күрһә, көндөҙ сыра яндырыр.

178. **Не сеяно, не веяно.**
Етөнө сәсөлмәгән, киндөре һуғылмаған.

179. **Не с лица воду пить.**
Матурлыкты табакка һалып табынға сығармайҙар.

180. **Не смейся, братец, чужой сестрице, своя в девицах.**
Не смейся чужой беде, своя на гряде.

Көлкө көлә етер, артынан һөрә етер.

181. **Не смотри на кличку, а смотри на птичку.**
Исеменә карама, есеменә кара.

182. **Не спеши языком, спеши делом.**
Һейләргә ашыкма, эшләргә ашык.

183. **Не справясь с кобылой, да по оглоблям.**
Ат асыуын арбанан алған.

184. **Не спрашивай отца, спрашивай молодца.**
Үҙе уңған егеттең ата-инәһен һорама.

185. **Не спрашивай старого, а спрашивай бывалого.**
Күп йәшәгән ни белгән, күпте күргән шул белгән.

186. **Не срубишь дуба, не отдув губы.**
Тырышкан табыр, ташка каҙак кағыр.

187. **Не стирай грязное белье на людях.**
Өйөндәге сүпте ситкә сығарма.
Өйөндәге сүпте ситән аша ырғытма.

188. **Не стыдно не знать, стыдно не учиться.**
Белмәү гәйеп түгел, белергә теләмәү ғәйеп.

189. **Не суйся в воду, не узнавши броду.**
Иҙел күрмәй, итек сисмә.

190. **Не суйся вперед, когда есть место у дверей.**
Ишек төбөндә урын барҙа түргә уҙма.

191. **Не считай недруга овцою — считай волком.**
Дошманды куй тип уйлама, бүре тип уйла.

192. **Не так страшен черт, как его малюют.**
Серәкәйҙең тешләүенән безелдәүе яман.

193. **Не торопись, сперва Богу помолись.**
Ашыҡҡан мөнән булмай, бойорған менән була.

194. **Не тот опытен, кому много лет, а тот, кто много видел.**
Күп йәшәгән ни белгән, күпте күргән шул белгән.

195. **Не тот хорош, кто лицом пригож, а тот хорош, кто на работу дюж.**
Төҫө менән түгел, эше менән.

196. **Не трись возле сажи, замараешься.**
Ҡаҙанға яҡын барма, ҡараһы йоғор,
яманға яҡын барма, ялаһы йоғор.

197. **Не трогает собака — говори: будь здорова.**
Миңә теймәгән йылан йөҙ йыл йәшәһөн.

198. **Не трогай за хвост животное, нрав которого тебе не известен.**
Холҡон белмәгән малдың һыртына йәбешмә.

199. **Не убив медведя, шкуру не продают.**
Атмаған айыуҙың тиреһен тунамайҙар (тунама).

200. **Не убить бобра, не видать добра.**
Бүрене йәлләһәң, һарыҡһыҙ ҡалырһың.

201. **Не увидев броду, не суйся в воду.**
Иҙел күрмәй, иҙеүеңде ысҡындырма.
Иҙел күрмәй, итегең сисмә.
Кисеү күрмәй, аяғыңды сисмә.
Сыҡмаған ямғырға сәкмән ябынма.
Тыумаған балаға туҙ бишек.

202. **Не увидишь очами, не поверишь душой.**
Күҙ күрмәй, күңел ышанмай.

203. **Не узнав горя, не узнаешь и радости.**
Әүәл яфа килмәй, һуңынан вафа* килмәй.
Көл булмайынса, гөл булып булмай.

---

* *Вафа* — шатлық, бәхет.

204. **Не украшай лицо, украшай свой ум.**
Битеңде биҙәмә, аҡылыңды биҙә.

205. **Не управишься с собою, не справишься с другим.**
Башлыҡ булһаң, башлы бул, йыйырылмаҫ ҡашлы бул.

206. **Не устанешь детей рожаючи,**
устанешь на место сажаючи.
Баланы таба белгәс, баҡа ла бел.
Табыуынан бағыуы ҡыйын.

207. **Не учи рыбу плавать, а собаку — лаять.**
Балыҡты йөҙөргә, этте өрөргә өйрәтмәйҙәр.

208. **Не учи ученого.**
Күкәй тауыҡты өйрәтмәй.

209. **Не хвали себя сам, пусть тебя люди похвалят.**
Үҙеңде үҙең мактама, кеше һине мактаһын.

210. **Не хвались началом, хвались концом.**
Эштең башында мактанма, аҙағында мактан.

211. **Не шути с огнем, обожжешься.**
Ут менән уйнама, бешерһең.

212. **Невелика болячка, а на тот свет гонит.**
Түңгәк бәләкәй булһа ла, арба ауҙара.

213. **Невелика капля, а камень долбит.**
Тамсы тама-тама таш тишә.

214. **Неграмотный, что слепой.**
Белемһеҙ кеше — күҙһеҙ кеше.

215. **Недруг поддакивает, а друг спорит.**
Дуҫ илатып өйрәтер, дошман көлдөрөп көйрәтер.

216. **Не за кожей, так не пришьешь к коже.**
Ана һөтө менән кермәгән тана һөтө менән кермәй.

217. **Незачем запирать конюшню, когда лошадь украдена.**
Атын урлаткас, аранын бикләгән.

218. **Незнайка дома сидит, а знайку в суд ведут.**
Белмәгәндең беләге тыныс.
Подпись иткән — под суд киткән.

219. **Незнание — не порок, нежелание знать — порок.**
Белмәү ғәиеп түгел, белергә теләмәү ғәйеп.

220. **Немой не умолкнет, хромой не сядет.**
Аҡһаҡ ултырмаҫ, һаҡау тик (шым) тормаҫ.
Сатан күп йөрөр, һуҡыр күп күрер.

221. **Неосторожно говорить — без всяких болезней умереть.**
Уйламай һөйләгән — ауырымай үлгән.

222. **Непойманная рыба всегда больше кажется.**
Табылмаған табыш — тау-таш хәтле.

223. **Непроданному коню цены нет.**
Үтмәҫ тауар — мең алтын.

224. **Нет дыма без огня.**
Ут янмайса, төтөн сыҡмай.
Елһеҙ тирәк һелкенмәй.

225. **Нет коня без спотычки.**
Һөрлөкмәгән ат булмай.

226. **Нет моря, которое нельзя переплыть.**
Кисеү бирмәҫ йылға булмаҫ.

227. **Нет пчелки без жальца.**
Ҡаяуһыҙ ҡорт булмай.

228. **Нет реки, через которую нельзя было бы переправиться.**
Кисеү бирмәҫ йылға булмаҫ.

229. **Нет розы без шипов.**
Тикәнһеҙ гөл булмай.

230. **Нет сладкого без горького.**
Гөл тикәнһеҙ булмай.
Ҡый үләнһеҙ баҡса булмай.

231. **Нет худа без добра.**
Иҫкеһеҙ яңы булмаҫ, яманһыҙ яҡшы булмаҫ.
Яҡшыһыҙ яман булмаҫ,
Яманһыҙ яҡшы булмаҫ.
Бер михнәткә бер рәхәт.

232. **Ни Богу свеча, ни черту кочерга.**
Иҫәпкә бар, һанға юҡ.
Һуҙып һалһаң — бүрәнә, һөйәп ҡуйһаң — таҡта.

233. **Ни в дышло, ни в оглобли.**
Кәртәгә кермәгән тәртәгә кермәй.

234. **Ни дров, ни лучины, живу без кручины.**
Атым юҡ аранда, ҡайғым юҡ буранда.

235. **Ни к Богу, ни к людям.**
Ни Аллаға, ни муллаға.

236. **Ни к городу Иван, ни к селу Селиван.**
Ҡалала эш һеймәҫ, ауылда кәбән өймәҫ.

237. **Ни кожи, ни рожи.**
Эт тиһәң — йөнө юҡ, әҙәм тиһәң — йүне юҡ.

238. **Никто дважды молод не бывает.**
Йәшлек ике килмәй.

239. **Ни молока, ни шерсти.**
Йен дә юҡ, йүн дә юҡ.

240. **Ни к селу, ни к городу.**
Ни анда, ни бында.

241. **Ни огня без дыма, ни дыма без огня.**
Ут төтөнһөҙ булмай, тетөн утһыҙ булмай.

242. **Ни рыба, ни мясо.**
Ни ите, ни һөтө.

243. **Ни с очей, ни с речей.**
Ни йәме, ни тәме.

244. **Ничего нет труднее, чем познать себя.**
Кешене аңлауы бер ҡыйын, үҙеңде аңлауы мең ҡыйын.

245. **Новая метла чисто метет.**
Яңы һепөрткө яңыса һеперә.
Яңы салғы ҡаты саба.

246. **Нужда в закройщики ставит.**
Нужа бесән ашата.

247. **Нужда всему научит.**
Башыңа төшһә, башмаҡсы булырһың.

248. **Нужда и голод выгоняют на холод.**
Кәрәк тирәк йыҡтыра.

249. **Нужда и за заплатой грош найдет.**
Нужа юҡты таптыра, барҙы һаттыра.

250. **Нужда мучит, уму-разуму учит.**
Донъя бер гөл итеп, бер көл итөп өйрәтә.

252. **Нужда научит калачи есть.**
Нужа бесән ашата.

253. **Нужда научит горшки обжигать.**
Башыңа төшһә, башмаҡсы булырһың.

254. **Нужды не испытаешь, отца не почитаешь.**
Атай булмай атайың ҡәҙерен белмәҫһең.

О

1. **Об угол головой не ударишься.**
Башты ташҡа ороп булмай.

2. **Обожжешься на молоке, станешь дуть и на воду.**
Һөткә ауыҙы бешкән һыуҙы өрөп эскән.
Ауыҙы бешкән, өрөп ҡапҡан.

3. **О вкусах не спорят.**
Һәр кемдең үҙ зауығы.
Зауыҡта бәхәс юҡ.

4. **О волке помолвка, а волк и тут.**
Ни һөйләһәң, шул алдыңа килә.

5. **Овчинка выделки не стоит.**
Биш тинлек ҡуян — ун тинлек зыян.

6. **Огня без дыма, человека без ошибок не бывает.**
Бәндә хатаһыҙ булмай.

7. **Огонь — беда и вода — беда, а без огня и воды пуще беды.**
Ут та — бәлә, һыу ҙа — бәлә, ут менән һыу булмаһа, тағы ла бәлә.

8. **Огонь без дыму не живет.**
Ут төтөнһөҙ булмай.
Ҡылсыҡһыҙ бойҙай булмаҫ.

9. **Одежда красит человека.**
Ағас күрке — япраҡ, әҙәм күрке — сепрәк.

10. **Огонь воде не друг.**
Ут менән һыу ҡауышмаҫ.

11. **Одежда лучше новая, а друг — старый.**
Кейемдең яңыһы, дуҫтың иҫкеһе яҡшы.

12. **Один в поле не воин.**
Яңғыҙ яу ҡайтармаҫ.
Бер үҙең тау күсерә алмаҫһың.
Өс таған таймаҫ, яңғыҙ ағас янмаҫ.

13. **Один глаз на нас, другой в Арзамас.**
Бер күҙе шәмбегә, икенсеһе йәкшәмбегә.
Бер күҙе мәғриптә*, икенсеһе мәшриктә**.

14. **Один за всех, все за одного.**
Берең өсөн барың тор, барың өсөн берең тор.

15. **Один цветок весны не делает.**
Бер сәскә яланды матурламай.

16. **Одиночество хуже смерти.**
Яңғыҙлыҡ әжәлдән битәр.

---

* *Мәғрип* (ғәр.) — көнбайыш.
** *Мәшриҡ* (ғәр.) — көнсығыш.

17. **Один родился, и тот не пригодился.**
Бөлгән илдә бөкрө билле ул тыуа.

18. **Один с сошкой, семеро с ложкой.**
Бер эшсегә ун башсы.

19. **Один ум — пол-ума, два ума — ум.**
Бер аҡыл — ярты аҡыл, ике аҡыл — бер аҡыл.

20. **Одна ласточка весны не делает.**
Яңғыҙ ҡарга яҙ килтермәҫ.
Бер ҡарлуғас яҙ килтермәҫ.

21. **Одна ложь порождает другую.**
Бер хата икенсеһен тарта.

22. **Одна паршивая овца все стадо портит.**
Бер бысраҡ һыйыр бөтә көтөүҙе буяй.

23. **Однажды отрежь, но семь раз проверь, чтобы меньше было потерь.**
Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ.

24. **Одним желанием море не переплыть.**
Теләк яныны терәк кәрәк.

25. **Одним махом семерых побивахом** *(прост.)*.
Бер атыуҙа ике ҡуян.

26. **Одним миром мазаны.**
Икеһе бер сыбыҡтан ҡыуылған.

27. **Одни сеют, другие жнут.**
Берәүҙәр мал йыя, икенселәр ҡапсыҡ тегә.

28. **Одних лечит, других калечит.**
Берәүгә — аш, берәүгә — таш.

29. **Одно без другого не бывает.**
Ишәй Ҡушайһыҙ булмай.

30. **Одно «нынче» лучше двух «завтра».**
Иртәгәге тауыҡтан бөгөнгө йоморттка (себеш) артыҡ.

31. **Одно «спасибо» тысячи бед стоит.**
Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡарыр.

32. **Одно чадо, да и то чало.**
Яңғыҙ бала яуҙан яман.

33. **Око за око, зуб за зуб.**
Ашҡа — аш, ташҡа — таш.
Таш менән атҡанға аш менән атмайҙар*.

34. **Олень с дубом боролся, да рога запропастил.**
Оло ат менән уйнаған кесе аттың аяғы аҡһаған.

35. **Опасение — половина спасения.**
Һаҡланғанды һаҡлармын, тиҙгән (Алла).

36. **Опора на подпорку.**
Берәүгә берәү кәрәк,
ҡыйышҡа терәү кәрәк.
Таяуға — терәү, йыртыҡҡа — ямау.

37. **Орел мух не ловит.**
Бөркет себен ауламай.

38. **Орлы бьются, а молодцам перья достаются.**
Ике ҡарға талашһа, ябалаҡҡа йен булыр.

39. **Осел в львиной шкуре.**
Һарыҡ тиреһе ябынған бүре.

40. **Осел коню не попутчик.**
Дөйә арғымаҡҡа иш булмаҫ.

41. **Осел остается ослом и в орденах и лентах.**
Алтын эйәр һалыу менән ишәк арғымаҡ булмаҫ.

42. **Осенняя муха больнее кусает.**
Себендең үлер ваҡыты етһә, мороно үткерләнә.

43. **Осердясь на вшей, да шубу в печь.**
Беткә асыу итеп, туныңды утҡа яҡма.

---

* Чаще употребляется пословица «Таш менән атҡанға аш менән ат» (в того, кто [в тебя] кинул камнем, [ты] кинь едой).

44. **Осла узнать по ушам, медведя по когтям, а человека по речам.**
Һыуҙы таяҡ менән, кешенө тел менән үлсәйҙәр.

45. **Осина и без ветра шумит.**
Уҫаҡ япрағы елһеҙ көндә лә елпелдәй.

46. **Оставил на завтра, пиши пропало.**
Иртәгәгә ҡалған эшең — һынып төшкән тешең.

47. **Осторожность — мать мудрости.**
Керерендән алда сығырыңды уйла.

48. **Острое словечко колет сердечко.**
Кеше һүҙе кеше үлтерә.

49. **Оступишься — окунешься.**
Уйламай баҫҡан — ҡайғыға батҡан.

50. **От бобра — бобренок, от свиньи — поросенок.**
Арғымаҡтан ат тыуа, ҡандаланан бет тыуа.

51. **От большого ума сходят с ума.**
Артыҡ аҡыл баш тишер.

52. **От волка бежал, да на медведя напал.**
Айыуҙан ҡаҫҡан бүрегә.
Һыуҙан сыҡҡан утҡа төшкән.

53. **От горя хоть в море, от беды в воду.**
Йән бар ерҙә ҡаза бар.

54. **От греха подальше.**
Бәләнән баш-аяҡ.

55. **Отделившаяся овца — волку корысть.**
Айырылған айыуға, бүленгән бүреҙә юлыҡҡан.

56. **Отдаешь деньги руками, а ходить за ним ногами.**
Ҡулың менән биргәнде аяғың менән юлларһың.
Алған саҡта ҡарсыға, биргән саҡта йән сыға.

57. **От добра добра не ищут.**
Майҙы майлап ашамайҙар.

58. **От долгов никто еще не удавился.**
Бурыслы үлмәҫ, әжәлле үлер.

59. **От жизни до смерти — один шажок.**
Кеше ғүмере — бер тотам.

60. **От копеечной свечки Москва сгорела.**
От малой искры да большой пожар.
Оскондан ялҡын сыға.

61. **От лихого легко не отделаешься.**
Бүрек ташлап бүренән ҡотолоп булмай.

62. **От одного слова — да на век ссора.**
Ағас башын ел бутай,
әҙәм башын һүҙ бутай.

63. **От правды правоту не ищут.**
Хаҡлыҡтан хаҡлыҡ эҙләмәйҙәр.

64. **Отрезанный ломоть к караваю не пристанет.**
Бер киҫкән икмәк берекмәй.

65. **От смерти нет лекарства.**
Әжәлгә дарыу юҡ.

66. **От смерти не откупишься.**
Үлемдән ҡасып ҡотолоу юҡ.

67. **От того, кто не мил, и подарок постыл.**
Һәймәҫ кеше һыймаҫ.

68. **От судьбы не уйдешь.**
Яҙмыштан уҙмыш юҡ.
Күрәһен күрмәй, гүргә кереп булмай.

69. **От хозяина чтоб пахло ветром, от хозяйки — дымом.**
Ҡатын уңғанын усаҡтан, ир уңғанын бысаҡтан беләләр.

70. **От частого повторения истина не тускнеет.**
Доға ҡабатлауҙан иман иҫкермәй.

71. **От черной коровы да белое молочко.**
От черной курицы да белое яичко.
Ҡара тауыҡ та аҡ күкәй һала.

П

1. **Пало теля — прибыло хлеба.**
Үгеҙ үлһә — ит, арба ватылһа — утын.

2. **Память — дырявое решето.**
Хәтер — тишек иләк.

3. **Пар костей не ломит.**
Йылы һөйәк һындырмай.

4. **Первый блин (да) комом.**
Тәүге белән — әүәш тә мәүеш.
Тәүге белен төйөрлө була.

5. **Первый муж от Бога,**
второй — от человека,
третий — от сатаны.
Беренсе ир Алланан, икенсеһе бәндәнән, өсөнсөһө шайтандан.

6. **Перед любовью и старость сгибает колени.**
Ғишыҡ йәшкә ҡарамай.

7. **Переливать из пустого в порожнее.**
Бушты бушҡа бушатма.

8. **Перемелется — будет мука.**
Тарта-тарта он булыр.

9. **Переплыл море, да в луже утонул.**
Батыр үлеме бисәнән.

10. **Пир на весь мир.**
Оло байрам, кесе туй.

11. **Пища вкусна с хозяином.**
Аш эйәһе менән тәмле.

12. **Плотину пальцем не заткнешь.**
Ҙур йыртыкты бәләкәй ямау ҡапламаҫ.

13. **Плохи дела, где сила без ума.**
Һөнәр алды — аҡыл.

14. **Плохое дерево в сук растет.**
Алама ағас ботаҡҡа үҫер.

15. **Плохой работник всегда жалуется на свой инструмент.**
Ата алмаған уғынан күрер.

16. **Плохому танцору и штаны мешают.**
Бөйей белмәгән айыуға урын тар.
Бейей белмәгәнгә көй килешмәҫ.

17. **Плюй в глаза — все божья роса.**
Оятһыҙҙың битенә төкөргәндәр —
«Ямғыр яуа», — тип тик торған.
Оятын олторак иткән.

18. **Побереги, Бог, мужа — не возьмет нужда.**
Ирлә иренә таяна, ирһеҙ биленә таяна.

19. **Побольше слушай, поменьше говори.**
Аҙ һөйлә, күп тыңла.
Күп бел, аҙ һөйлә.

20. **По быку и палка (стойло).**
Үгеҙенә күрә сыбырткыһы.

21. **По горшку и крышка.**
По Ереме кафтан.
По Ивашке и рубашка.
По Савве и слава.
По Сеньке и шапка.
Силәгенә күрә ҡапҡасы.
Эйәһенә күрә бейәһе.

22. **Повинную голову меч не сечет.**
Эйелгән башты ҡылыс сапмай.

23. **Повторенье — мать ученья.**
Уҡыу төбө — туҡыу.

24. **По гвоздю — колотушка, по свадьбе — частушка.**
Далаһына күрә — ҡуйы, заманына курә — туйы.

25. **Погнался за зайцем на телеге.**
Арба менән ҡуян ҡыуған.

26. **Погнался за краюхой, да без ломтя остался.**
Күпте өмөт итеп, аҙҙан буш ҡалған.

27 **По гостям гуляй, да сам ворота открывай.**
Кешенең үрҙәген ашаһаң, үҙең ҡаҙың әҙерлә.

28 **Подал ручку, да подставил ножку.**
Бер ҡулында аш, бер ҡулында таш.

29 **Подальше от моря — поменьше горя.**
Ҡоторғандан ҡотолғаның хәйерле.

30 **Подальше положишь,поближе возмешь.**
Алыҫ һалһаң, яҡындан алырһың.

31 **По дереву и топор.**
Ағасына күрә балтаһы.

32. **Под носом проросло, а в голове не росло.**
Тушы бар ҙа, ушы юҡ.

33. **Поднявший меч от меча и погибнет.**
Ҡылыс күтәргән ҡылыстан үлер.

34. **Подой бычка, дай молочка.**
Үгеҙ һау ҙа һөт бир.

35. **Пожалел волк кобылу, оставил хвост да гриву.**
Йомшаҡ һөйләп, ҡатыға ултырта.

36. **Поживешь и Кузьму отцом назовешь.**
Кәрәк тирәкте йыҡтыра.

37. **Поживешь на веку — поклонишься и хряку.**
Башыңа төшһә, баҡанаға ла сәләм бирерһең.

38. **Позвал гостей, а сам — в лес.**
Үҙе ҡунаҡ саҡырған, үҙе баланға киткән.

39. **Пока ветры не обвеяли, да собака не облаяла, отдавай девку замуж.**
Ҡыҙ һаҡлағансы тоҙ һаҡла.

40. **Пока не закончилось утро, не хвали день.**
Иртәне кисҺеҙ мақтама.

41. **По капельке — море, по зернышку — ворох.**
С миру по нитке — голому рубашка.
Тамсы тамып, күл яһай, тин йыйылып, һум яһай.
Тамсы тама-тама — күл була.
Күл тамсынан йыйыла.

42. **Покорное слово гнев укрощает.**
Йылы һүҙ таш иретер.

43. **Полный колос всегда к земле клонится.**
Башаҡ тулған һайын башын түбән эйер.

44. **Польза на копейку, а убытку на десять.**
Бер тинлек ҡуян, ун тинлек зыян.

45. **По которой реке плыть, той и песенку петь.**
По которой речке плыть, ту и воду пить.
Кем арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың.

46. **По нахвалу и тухлые яйца покупают.**
Димсе диңгеҙ кисерә.

47. **По одежке встречают, по уму провожают.**
Кейемеңә ҡарап ҡаршы алалар,
аҡылыңа ҡарап оҙатып ҡалалар.

48. **По одежке протягивай ножки.**
Юрғаныңа ҡарап, аяғың һуҙ.
Дуғаңа ҡарап, ҡыңғырау таҡ.
Ояңа ҡарап, ҡанат ҡаҡ.

49. **Попытка не пытка (а спрос не беда).**
Ятып ҡалғансы, атып ҡал.

50. **Пора да время дороже золота.**
Вақыт алтындан ҡиммәт.

51. **По речке и лодка.**
Йылғаһына күрә кәмәһе.

52. **Портной без порток, сапожник без сапог.**
Тимерсе бысақка йәлсеměç (туймаç).

53. **Посади свинью за стол, она и ноги на стол.**
Ишәк түшәк ҡәҙерен белměç.
Дуңғыҙҙы табынға ултыртһаң, аяғын өҫтәлгә һалыр.

54. **Посеешь лен — будет волокно.**
Киндер сәсһәң, күлдәк кейерһең.

55. **Посеешь — пожнешь, положишь — возмешь.**
Бирһәң — алырһың, сәсһәң — урырһың.

56. **После боя (брани) много храбрых.**
Яуҙан һуң батыр күбәйер.

57. **После грозы — ведро, после горя — радость.**
Дауылдан һуң диңгеҙ ҙә тына.

58. **После дела за советом не ходят.**
Туй үткәс, думбыра ҡаҡмайҙар.

59. **После драки кулаками не машут.**
Яуҙан һуң яр һалма.

60. **После нас хоть потоп.**
Беҙҙән һуң теләһә ни булһын.

61. **После пожара за водой.**
Янғындан һуң һыу күп булыр.
Атын урлатҡас, аранын бикләгән.

62. **После поры не точат топоры.**
Яуҙан һуң яр һалма.

63. **После свадьбы в барабаны не бьют.**
Туйҙан һуң дөмбөр ҡаҡмайҙар.

64. **Послужи на меня, а я — на тебя.**
Хәҙимәгә — хөҙимә, мә һиңә лә, мә миңә.

65. **Поспешай не торопясь.**
Ашыкһаң да, ҡабаланма.

66. **Поспешишь — людей насмешишь.**
Ашыҡҡан ашҡа бешкән.

67. **Поспешишь — упадешь, последним придешь.**
Ашығып барған абынған.

68. **Посуду бей, самовар не тронь.**
Һауыт-һаба ҡырһаң да, самауырыңды ҡалдыр.

69. **Потерянного времени не воротишь.**
Ваҡыт бер кемде лә кетмәй, уҙа тора.
Юғалған аҡса табыла, юғалған ваҡыт табылмай.

70 **Потом да потом, так лень пустишь в дом.**
Иренгән «иртәгә» тиер.

71 **Потом — суп с котом.**
Аҙаҡ — тутлы ҡаҙаҡ.

72 **Потому хорошо живется, что дружба народов ведется.**
Халыҡ дуҫлығы — ил байлығы.

73. **Потоп кораблям, песок журавлям.**
Берәүҙә баш ҡайғыһы, берәүҙә бурек ҡайғыһы.

74. **По топору и топорище.**
Балтаңа ҡарап ағас һайла.

75. **По труду и честь.**
Хеҙмәтенә күрә хөрмәте.

76. **По хозяину и собаке честь.**
Хужаһына ярайым тиһәң, этен мактa.

77. **По чужой шкуре не больно.**
Кеше ҡолағын борғанда үҙеңдеке ауыртмай.

78. **Правда и в огне не горит, и в воде не тонет.**
Хәкиҡәт утта ла янмай, һыуҙа ла батмай.

79. **Правда глаза колет.**
Дөрөҫлөк алдаҡсының күҙен тишә.

80. **Правда дороже золота.**
Дөрөҫлөк ҡояштан яҡтырақ.

81. **Правда не продается.**
Хәкиҡәткә хаҡ юҡ.

82. **Правду говорить — никому не угодить.**
Тура әйткән туғанына ярамаған.

83. **Прежде чем войти, подумай о выходе.**
КереренДән элек сығырыңды уйла.

84. **Привел лошадь ковать,когда кузня сгорела.**
Атын урлатҡас, аранын йоҙаҡлаған.

85. **Привычка — не лапоть, с ноги не скинешь.**
Башланған ғәҙәт ташланмай.

86. **Придет беда — купишь ума.**
Башҡа бәлә төшмәй, аҡыл кермәй.

87. **Пришла (придет) беда — отворяй ворота.**
Бәлә-ҡаза яңғыҙ йөрөмәй.

88. **Придет солнышко и к нашему окошку.**
Беҙҙең тәҙрәгә лә ҡояш төшөр әле.

89. **При мачехе и отец не родня.**
Әсәй үгәй булһа, атай еҙнәй була.

90. **При одалживании — друг, при отдаче — враг.**
Алған сакта — ҡарсыға, бирҙән сакта — йән сыға.

91. **При солнце тепло, при матери добро.**
Ҡояш янында йылылыҡ, инә янында изгелек.

92. **При сытости помни голод, при богатстве — бедность.**
Туҡ сағында аслығыңда ни ашағанынды онотма.

93. **При царе Горохе.**
Нух заманында.

94. **Пришло махом, ушло прахом.**
Елдән килгән елгә китә.

95. **Про волка речь, а он — навстречь.**
Уйыңа килгән алдыңа килер.
Юраған юш килә.

96. **Прождал, пока хлеб убирался, а пока испекли — не дождался.**
Бешкәнсе түҙгән, төшкәнсе — үлгән.
Һыйыр быҙаулағансы түҙгән, ыуыҙ бешкәнсе үлгән.

97. **Прожитого не пережить, а прошедшего не воротить.**
Уҙған болотто тотоп булмай.

98. **Прожитое, что промытое, — не воротишь.**
Үткән ғүмер — аҡҡан һыу.

99. **Прожито, что пролито.**
Үткәнде ҡайтарып булмай.
Үткән кире ҡайтмай.

100. **Пропавший нож всегда позолоченный.**
Юғалған бысаҡтың һабы алтын.

101. **Просишь — не дает, воруешь — не замечает.**
Һораһаң — бирмәй, урлаһаң — күрмәй.

102. **Простота хуже воровства.**
Бер ҡатлылыҡ бурлыҡтан яман.
Хәйләһеҙ донъя файҙаһыҙ.

103. **Против ветра плюнешь, бороду выплюнешь.**
Тауға ҡарап таш атма.

104. **Прошлого не воротишь.**
Үткәнде ҡайтарып булмай.

105. **Прытко бегают, да часто падают.**
Ҡапыл күтәрелгән ҡатыға төшкән.

106. **Птица крыльями сильна, жена мужем красна.**
Ҡатын бәхәте ирҙән.

107. **Птицу узнают в полете, человека — в работе.**
Ҡош матурлығы түшәнә ҡарап, кешенең матурлығы эшенә ҡарап.

108. **Пуганая ворона куста боится.**
Ҡурҡҡанға ҡуш куренә.

109. **Пуганый зверь далеко бежит.**
Бер ҡурҡҡан эт ес кән ерә.

110. **Пустая бочка пуще гремит.**
Буш мискәнең (арбаның) дыңғыры кәслә (ҙур).
Ҡыңғырауҙың эсе буш.
Ҡыҫыр тауыҡ күп ҡытаҡлай.

111. **Пусти курицу на грядку, гляди — исключет весь огород.**
Дуңғыҙҙы табынға ултыртһаң, аяғын өҫтәлгә һалыр.
Хәйерсегә сәләм бирһәң, ямаулыҡ һорай.

112. **Пусти козла в огород.**
Кәзәне кәбәҫтә ҡарауылларға ҡуймайҙар.

113. **Пущенная стрела обратно не возвращается.**
Аткан ук кире ҡайтмай.

114. **Пьешь у друга воду — слаще меду.**
Һыйлағанда һыу булһа ла эс.

115. **Пьян в стельку.**
Лаяҡыл иҫәрек.

116. **Пьяному море по колено.**
Иҫәрекҡә диңгеҙ тубыҡтан.

117. **Пьяный, что бешеный.**
Иҫәрек — иҫәр һыңары.

118. **Пьяный, что малый: что на уме, то на языке.**
Иҫәректең иҫендә ни, төлендә шул.

119. **Пьян — что черту баран.**
Шешә дуҫы шештән яман.

120. **Пятое колесо в телеге.**
Ватыҡ арбаға — бишенсе тәгәрмәс.

Р

1. **Работа да руки — надежные в людях поруки.**
Ҡоралын тапҡан — таш киҫкән,
әмәлен тапҡан — һыу кискән.

2. **Работа не волк, в лес не убежит.**
Эш айыу түгел, урманға ҡасмаҫ.
Көҙ бар, ҡыш бар, ашығып ни эш бар?

3. **Работай до поту, поешь в охоту.**
Тирләп эшләһәң, тәмләп ашарһың.

4. **Работа с зубами, а леность с языком.**
Ярыҡ ҡайҙа — ел шунда, ялҡау ҡайҙа — һүҙ шунда.

5. **Рад бы в рай, да грехи не пускают.**
Дәрт бар, дарман юҡ.

6. **Радость и горе рядом.**
Шатлыҡ менән хәсрәт йәнәш йөрөй.

7. **Разговорами сыт не будешь.**
Һүҙ һөйләп, тамаҡ туймай.
Тел менән тирмән тарттырып, онло булып булмай.

8. **Раз на раз не приходится.**
Сама самаға тура килмәй.

9. **Разом густо, разом пусто.**
Разом щи с мясом, а часом и хлеб с квасом.
Бар сағында бүрәләй, юҡ сағында шүреләй.

10. **Разрозненные гуси — добыча для дружных ворон.**
Айырылған ҡаҙ тупланған ҡарғаға ем булыр.

11. **Раз солгал — навек лгуном стал.**
Алдаҡсының өйө янған, бөрәү ҙә ышанмаған.

12. **Раненый мечом вылечится, раненый словом — никогда.**
Ҡул (тән) яраһы китһә лә, тел яраһы китмәй.

13. **Рано пташечка запела, как бы кошечка не съела.**
Иртә ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта.

14 **Рваться не рвись, а крепче берись.**
Эшләһәң, яҡшы эшлә.

15 **Режь да ешь, пока подкладывают.**
Аҡ күрғәндә, йотоп ҡал.

16. **Редко, да метко.**
Бер булһын, берәғәйле булһын.

17 **Ремесло — золотой браслет на руке.**
Һөнәр — ҡулдағы алтын балдаҡ.

18. **Ремесло — кормилец.**
Һөнәрле аслыҡ күрмәҫ.
Һөнәрле үлмәҫ, һөнәрһеҙ көн күрмәҫ.

19. **Речь красна пословицей.**
Мәҡәлле һүҙ — аҡыллы һүҙ.

20. **Ремесло пить-есть не просит, а само кормит.**
Һөнәр ашарға һорамай, үҙө ашата.

21. **Ретив к обеду, ленив к работе.**
Аш янында ат һымаҡ, эш янында ят һымаҡ.

22. **Решетом воду не черпают.**
Иләк менән һыу ташымайҙар.

23. **Риск — благородное дело.**
Уйлаған — бер оттан, тәүәккәлләгән — ике оттан.

24. **Родители — добродетели.**
Ата менән ана — алтын ҡанат.

25. **Родительское сердце в детях, а детское — в камешке.**
Ана күңеле балала, бала күңеле далала.

26. **Родная страна — колыбель, чужая — мачеха.**
Үҙ илем — алтын бишөк, кеше иленең төбө тишек.
Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ил яҡшы.

27. **Рожь сей в золу, а пшеницу — в пору.**
Арыш сәсһәң — көлгә сәс, бойҙай сәсһәң — боҙға сәс.

28. **Рот до ушей, хоть лягушку пришей.**
Ауыҙ — ҡолаҡта, ҡолаҡ — йыраҡта.

29. **Рот на опашку, язык на отмашку.**
Серең биктә булһын, телең эштә булһын.

30. **Рот не огород, не затворишь ворот.**
Ауыҙ тоҡсай түгөл, бәйләп ҡуйып булмай.

31. **Руби дерево по себе.**
Ҡулың күтәрә алмаҫ суҡмарҙы биленә ҡыҫтырма.

32. **Рубашка бела, да душа черна.**
Үҙе ҡыҙыл, үҙәге ҡорт.

33. **Рука дающего не оскудевает.**
Йомарт ҡулға мал көрер.
Биргәндең ҡулы өҫтә.

34. **Рука не замахнется, топор не срубит.**
Ҡул һелтәй, балта саба.

35. **Рука руку моет, а обе вместе моют лицо.**
Ҡул ҡулды йыуа, ике ҡул битте йыуа.

36. **Руки не протянешь, так и ложки с полки не достанешь.**
Бил бөкмәйенсә, белен дә бешмәй.

37. **Руками победишь одного, а умом (головой) — тысячи.**
Беләге йыуан берҙе йығыр, белеме йыуан (булған) меңде йығыр.

38. **Руку, ногу переломишь, сживется, а душу переломишь, не сживется.**
Кеше күңеле — быяла, ерғә төшһә, ыуала.
Кеше күңеле быяла, һаҡһыҙ ҡағылһаң, ыуала.

39. **Рыба— в воде, а ягода — в траве.**
Тараҡан — ярығында, балыҡ — арығында.

40. **Рыба гниет с головы.**
Балыҡ башынан серей.

41. **Рыба ищет, где глубже, человек — где лучше.**
Балыҡ лайлы ер эҙләй, әҙәм яйлы ер эҙләй.

42. **Рыбак рыбака видит издалека.**
Балыҡсы балыҡсыны алыҫтан таный.
Һунарсы һунарсыны алыҫтан күрә.

С

1. **С сильным не борись, с богатым не судись.**
Кесле менән керәшмә, маллы менән даулашма.

2. **С ветром пришло, на ветер ушло.**
Елдән килгән елгә китә.

3. **С волками жить — по-волчьи выть.**
Кем арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың.

4. **С глаз долой — из сердца вон.**
Күҙҙән китһә, күңелдән китә, күңелдән китһә, күҙҙән китә.

5. **С доброй женой — помолодеешь, с худой — постареешь.**
Ирҙе ир иткән дә ҡатын, хур иткән дә ҡатын.

6. **С добрыми дружи, а лукавых сторонись.**
Яман дуҫтан яңғыҙлыҡ яҡшы.
Ямандан яр буйы ҡас.

7. **С добрым человеком — помолодеешь, с дурным — постареешь.**

Яҡшыға эйәргән ялпайған, яманға эйәргән ҡартайған.

8. **С дураком и найдешь, так не разделишь.**

Иҫәр менән тапма ла, өләшмә лә.

9. **С камня лыко не сдерешь.**

Таштан йүкә һуйылмай.

Ҡайырҙан ҡайын яһап булмай.

10. **С кем венчаться, с тем и кончаться.**

Кем менән ҡарайғанһың, шуның менән ағар.

11. **С кем поведешься, от того и наберешься.**

Яҡшы менән юлдаш булһаң — ирешерһең моратҡа, яман менән юлдаш булһаң — ҡалырһың оятҡа.

Яманға эйәргән — яҙыҡҡа, яҡшыға эйәргән — аҙыҡҡа (юлыҡҡан).

12. **С кем поживешь, у того и переймешь.**

Мал эйәһенә оҡшамаһа, хәрәм була.

13. **С кем хлеб-соль водишь, на того и походишь.**

Дуҫ-иштәрең ҡарға булһа, сүҡығаның емтек булыр.

Эт менән дуҫ (ҡоҙа) булһаң, һөйәк менән туй үткәрерһең.

Кешенең кем икәнен белгең килһә, төҫөнә ҡарама, дуҫына ҡара.

14. **С лица воду не пить.**

Матурлыҡты табаҡҡа һалып йөрөтмәйҙәр.

Һылыулыҡ һыу буйлатмай.

15. **С личика яичко, а внутри болтун.**

Тыштан ялтырай, эстән ҡалтырай.

16. **С людьми советуйся, а своего ума не теряй.**

Кешегә кәңәш ит, үҙ аҡылың менән эш ит.

17. **С малыми детками горе, с большими — вдвое.**

Бала бәләкәй сағында беләккә ауыр, үҫкәс, йөрәккә ауыр.

Бала сакта һөйҙәрә, үҫә килә көйҙәрә.
Итәктә сакта һөйҙәрә, итәктән төшкәс, көйҙәрә.

18. **С медом и долото проглотишь.**
Бал (май) сабата йоттора.

19. **С мертвого и голого ничего не возьмешь.**
Күскән йоттан ҡотолор, үлгән бурыстан ҡотолор.

20. **С миром и беда не убыток.**
Кешегә асҡан ҡайғы — ярты ҡайғы.

21. **С огнем шутить опасно.**
Ут менән уйнама, бешерһең.

22. **С одного волка двух шкур не дерут.**
Бер айыуҙы ике тапҡыр тунамайҙар.

23. **С паршивой овцы хоть шерсти клок.**
Сусҡанан бер ҡыл.

24. **С потом хворь отходит.**
Тир менән сир сыға.

25. **С ремеслом не пропадешь.**
Һөнәре бар хур булмаҫ.
Һөнәре бар күккә осор.

26. **С самого начала думай о конце.**
Керереңдән алда сығырыңды уйла.

27. **С собакой ляжешь, с блохами встанешь.**
Эт менән дуҫ (ҡоҙа) булһаң, һөйәк менән туй үткәрерһең.

28. **С умом — подумаем, а без ума — сделаем.**
Аҡыллы уйлап ултырғансы, алйот эшен бөтергән.

29. **Сам кашу заварил, сам и расхлебывай.**
Ике ҡулың ни эшләһә, иңең шуны күтәрер.
Ҡулың менән эшләгәнде, иңең менән күтәрерһең.
Үҙең сәскәнде үҙең ур.

30. **Сам не хвались, пусть тебя люди похвалят.**
Үҙ-үҙеңде мактама, кеше һине мактаһын.

31. **Сам стар, да душа молода.**
Үҙем ҡарт булһам да, йөрәгем йәш.

32. **Сам сыт, глаза голодны.**
Үҙе туйған, күҙе туймаған.

33. **Сапог-то скрипит, да в котле не кипит.**
Еңем яман булһа ла, яғам яҡшы.

34. **Сапожник без сапог, кузнец без топора.**
Итексенең итеге тишек, балтасының балтаһы китек.
Тимерсе бысаҡҡа йәлсеməҫ (туймаҫ).

35. **Свадьба скорая, что вода полая.**
Тиҙ ҡауышҡан тиҙ айырылыр.
Ҡыҙыу янған ут тиҙ һүнер.

36. **Свались только с ног, а за тычками дело не встанет.**
Йығылғанды туҡмаусы күп була.
Йығылған ағаҡҡа балта сабыусы күп була.

37. **Сварить бы кашу, да куры крупу расклевали.**
Май булһа, бутҡа бешерер инек, ярма юҡ.

38. **Сварливая жена — в доме пожар.**
Яман ҡатын — ғәрәсәтле көн.

39. **Сверху — шик, а внутри — пшик.**
Тыштан ялтырай, эстән ҡалтырай.

40. **Свет не без добрых людей.**
Донъяла яҡшы кешеләр бөтмәгән.

41. **Свинья и в золотом ошейнике — все свинья.**
Ебәк ябыу япһаң да, ишәк ишәк булыр.

42. **Свое дитя горбато, да мило.**
Терпе лә балаһын «йомшағым», тип, ҡарға ла балаһын «аппағым», тип һөйә.

43. **Свой затылок не вижу, а у тещи черным-черно.**
Үҙ елкәмде күрмәйем, ҡәйнәмдеке ҡап-ҡара.

44. **Свой своему поневоле друг (брат).**
Үҙеңдеке — үҙәктә.
Ирем киҫәге — итем киҫәге.

45. **Свой своего всегда учует.**
Ат кешнәшеп, кеше һейләшеп таныша.

46. **Свой свояка видит издалека.**
Бай — байға, ярлы ярлыға бара.

47. **Своя ноша не тянет.**
Боландың үҙ мөгөҙә үҙенә ауыр түгел.

48 **Своя родня на подушке, а мужня — в конюшне.**
Ҡатын ҡәрҙәше ҡаҙан янында, ир ҡәрҙәше ишек төбөндә.

49. **Своя рубашка ближе к телу.**
Үҙ ҡайғың үҙәктә, кеше ҡайғыһы кештәктә.

50 **Своя себе семейка — свой простор.**
Көлгә аунаһаң да, үҙ көнөндө үҙең күр.

51 **Сгори целый свет, лишь бы он был согрет.**
Донъяны һыу баҫҡандан, өйрәккә ни ҡайғы?

52 **Сделанного не воротишь.**
Булған эш булған, үкенеүҙән уҙған.

53. **Сегодня густо, завтра пусто.**
Бар сағында бүреләй, юғында шүреләй.

54. **Сегодня съедим, так завтра поглядим.**
Иртәгеһен ишәк ҡайғыртҡан.

55 **Седина в бороду, а бес в ребро.**
Бер йәшлектә, бер ҡартлыҡта.

56. **Семеро одного не ждут.**
Унау берәүҙе көтмәй.

57. **Семь бед — один ответ.**
Мөң бәләгә бөр яуап.
Һыуланғас, ямгыр ҡурҡыныс түгел.

58. **Семь верст до небес и все лесом.**
Буй етмәҫтәй бейектә, ҡул етмәҫтәй алыҫта.

59. **Семь пятниц на неделе.**
Аҙнаһына биш йома.

60. **Семь раз отмерь, один раз отрежь.**
Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ.

61. **Семь топоров вместе, а две прялки врозь.**
Ҡырҡ кеше бөр яҡлы, ҡырын кеше кире яҡлы.

62. **Семья без детей, что часы без гирьки.**
Бала күрмәгән — балдан ауыҙ итмәгән.

63. **Семья не без урода.**
Аттан ала ла, ҡола ла тыуа.

64. **Сень — пересень, как бы день прошел.**
Көн уҙһын, сабата туҙһын.

65. **Сердитого проклянут, а смирного живьем проглонут (проглотят).**
Йыуаш булһаң, баҫырҙар, уҫал булһаң, аҫырҙар, уртаса уҫал булһаң, ил аҒаһы яһарҙар.

66. **Сердитого унимать — пуще поднимать.**
Һыйыр тулаһа, аттан яман.

67. **Сердитый умрет, никто его не уймет.**
Асыу башы — йүләрлек, аҙаҒы — үкенеп үләрлөк.

68. **Сердцу не прикажешь.**
Көсләп һөйҙөрөп булмай.

69. **Сердце сердцу весть подает.**
Йөрәктән сыҡҡан йөрәккә етә.

70. **Середка на половинку.**
Ни алтара, ни полтора.

71. **Сеял — не смерил, ел — не считал.**
Иҫәпһеҙҙең ҡуйы теүәл.

72. **Сидит под кустом, закрывшись листом.**
Шикле шикләнер, сәкмәнен бөркәнер.

73. **Сиди криво, да суди прямо.**
Ҡыйыш ултырһаң да тура һөйлә.
Ауыҙың ҡыйыш булһа ла, һуҙең тура булһын.

74. **Синица в руках лучше, чем соловей в лесу.**
Һауалағы торнанан ҡулыңдағы турғай (сәпсек) артыҡ.

75. **Скажешь слово — добавят десять.**
Берҙе биш итәләр.

76. **Скажи мне, кто твой друг, я скажу тебе, кто ты.**
Кешенең кем икәнлеген белгең килһә, дуҫын һына.

77. **Сказано — не доказано, надо сделать.**
Һүҙ менән түгел, эш менән күрһәт.

78. **Сказано — сделано.**
Егет һүҙе бер булыр.

79. **Скатертью дорога!**
Ана бара юлың!

80. **Скачет задом и передом, а дело идет своим чередом.**
Бутҡа бешә майы менән, эш эшләнә яйы менән.

81. **Сколько веревку ни вить, а концу быть.**
Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә (беленер).

82. **Сколько волка ни корми, все в лес смотрит.**
Бүре балаһын бүреккә һалһаң да, урманға ҡарай (илекмәй).
Эт этлеген итә, итәк-еңде йырта.

83. **Сколько голов, столько (и) умов.**
Баш һайын бер аҡыл.
Мең баш, мең аҡыл.
Күпме баш, шунса аҡыл.

84. **Сколько есть алтыну, все бабкину сыну.**
Кем ҡулында көмөш бар, ул да булһа Бикәгә.

85. **Сколько не мели, все одна крупа.**
Күпме сәйнәһәң дә, бер балыҡ башы.

86. **Сколько стран, столько обычаев.**
Һәр илдең үҙ йолаһы.

87. **Скорого дела не хвалят.**
Ҙур эште яйлап эшлә.

88. **Скоро, да не споро.**
Сабып барған юлда ҡалыр.
Ашыҡҡан алыҫ китмәҫ.

89. **Скоро сказка сказывается, да не скоро дело делается.**
Һөйләүе еңел, эшләүе ҡыйын.

90. **Скорый поспех людям насмех.**
Ашыҡҡан ашҡа бешкән.

91. **Скрипучее дерево дольше (два века) стоит.**
Шығырлауыҡ ағас ҡырҡ йыл ултырған.

92. **Скрытность хуже болезни.**
Серле кеше — сирле кеше.

93. **Скупой платит дважды.**
Һаран ике түләй.
Ҡыҙғанғаның — ҡыҙыл эткә.

94. **Слава — что сладость, посолил — и нет ее.**
Дан килә лә белә, күтәрә белмәһәң, китә лә белә.

95. **Сладкий язык и змею из норы вытащит.**
Тәмле тел йылан арбар.

96. **Слезами горю не поможешь.**
Ҡайғырып, ҡойма ҡоймаҫһың.

97. **Слепой курице все пшеница.**
Һуҡыр тауыҡҡа бары ла бойҙай.

98. **Слепец слепцу глаз колет.**
Йыртыҡ тишектән көлә.

99. **Слепой сказал: «посмотрим».**
«Ҡарарбыҙ», тип әйткән, ти, бер һуҡыр.

100. **Слепому не докажешь, что вечер, что ночь.**
Һуҡыр үҙенекен туҡыр.

101. **Слова хороши, если они коротки.**
Бауҙың оҙоно, һүҙҙең ҡыҫҡаһы яҡшы.

102. **Словами — что листьями стелет, а делами — что иглами колет.**
Йомшаҡ һөйләп (йәйеп), ҡатыға ултырта.
Берҙе һөйләй, икенсене эшләй.

103. **Слово за хозяином не ходит.**
Һүҙ эйәһе менән йөрөмәй.

104. **Слово лечит, слово и калечит.**
Күңел тапмаҡ — бер һүҙ, күңел ҡалмаҡ — бер һүҙ.
Терелткән дә тел, үлтергән дә тел.

105. **Слово народа — слово правды.**
Халыҡ теле — хаҡлыҡ теле.

106. **Слово не воробей, вылетит — не поймаешь.**
Ауыҙҙан сыҡҡан һүҙ — һауала осҡан ҡош.
Әйткән һүҙ кире ҡайтмай.

107. **Слово не обух, а от него люди гибнут.**
Кеше һүҙе кеше үлтерә.

108. **Слово пуще стрелы разит.**
Тел ҡылыстан үткер.

109. **Слово — серебро, а молчание — золото.**
Һүҙең көмөш булһа, тик тороуың — алтын.

110. **Слово слово родит, третье — само бежит.**
Һүҙҙән һүҙ сыға.
Һүҙ һүҙ сығара, йоҙроҡ күҙ сығара.

111. **Случай надо ловить за волосы, ускользнет — не поймаешь.**
Ямғыр яуғанда силәгеңде тотоп ҡал.

112. **Слушайся людей, а делай свое.**
Кешене тыңла, үҙеңсә эшлә.
Кеше һүҙенә ҡолаҡ һал, үҙең уйлағандан тайшанма.

113. **Смелость города берет.**
Тәүәккәлләгән таш йоткан.

114. **Смелость — половина счастья.**
Ҡыйыулыҡ — ярты ырыҫ (бәхет).

115. **Смелые глаза — молодцу краса.**
Егет булһа, мут булһын, ике күҙе ут булһын.

116. **Смерть всех равняет.**
Үлем ҡаршыһында барыбыҙ ҙа бер тигеҙ.

117. **Смерть дважды не приходит.**
Үлем ике килмәй.

118. **Смерть не просит, придет да скосит.**
Үлемдән ҡасып ҡотолоу юҡ.
Үлмәктән ҡалмаҡ юҡ.

119. **Смерть не разбирает чина.**
Үлемдең ишеге түрәгә лә бер, ҡараға ла бер.
Үлем «бай», «ярлы» тип тормай.
Әжәл һайлап килмәй.

120. **Смирен, смирен, а не суй перста в рот.**
Йыуаштан йыуан сыға.

121. **Смерть не выбирает, и старых, и молодых забирает.**
Үлем ҡартын, йәшен ҡарап тормай (һорап килмәй).

122. **Смирную собаку и ястреб (кочет) бьет.**
Йомшаҡ ағасты ҡорт баҫа.
Йыуашлыҡты беләләр, тоталар ҙа үбәләр.

123. **Снаружи мило, а внутри гнило.**
Тышы мамык, эсе кабык.

124. **Сначала подумай, а потом говори.**
Әйтеренде уйлап әйт.
Әүәл уйла, унан һөйлә.

125. **Снизу подрезает, а сверху ломает.**
Аҫтан киҫеп, өҫтән ямай.

126. **Сноха в семье — битая полоса** *(устар.)*.
Килен кеше — ким кеше, алабайға тиң кешө *(иҫк.)*.

127. **Снявши голову, по волосам не плачут.**
Башын киҫкәс, сәсе өсөн ҡайғырмайҙар (иламайҙар).
Эш үткәс, үкенеүҙән файҙа юк.

128. **Собака есть, так палки нет, палка есть — собаки нет.**
Таяк барҙа ҡуян осрамай, ҡуян осраһа, таяк булмай.

129. **Собака за зайцем, а заяц за волей.**
Ҡуянға — йән ҡайғыһы, аусыға — мал ҡайғыһы.

130. **Собака лает, ветер носит.**
Эт өрөр, бүрө йөрөр.
Эт өрөп торор, каруан үтеп торор.

131. **Собака сено не ест и козе не дает.**
Эт бесәнде үҙе лә ашамай, атҡа ла ашатмай.

132. **Собака собаке на хвост не наступит.**
Ат аяғына ат баҫмай.

133. **Собака, что лает — редко кусает.**
Өргән эт тешләмәй.

134. **Собаке — собачья смерть.**
Эткә эт үлеме.

135. **Собой красива, да душой трухлява.**
Үҙе ҡыҙыл, үҙәге ҡорт.
Тыштан ялтырай, эстән ҡалтырай.

136. **Соврешь — не помрешь, да впредь не поверяй.**
Бер алдаһаң, ғүмергә алдаҡсы булырһың.
Бер ялғанлаһаң, икенсе ваҡыт ысын һүҙеңә лә ышанмаҫтар.

137. **Согласного стада волк не берет.**
Береккән көтөүҙе бүре алмай.
Араланған ҡуйҙы бүре алыр.

138. **Солнца нет, так месяц светит.**
Ай булмаһа, йондоҙ бар.

139. **Солнышко на всех светит.**
Ҡояш һәр көмде лә тигеҙ йылыта.

140. **Соловья баснями не кормят.**
Һүҙ һөйләп, тамаҡ туймай.

141. **Сонный, что мертвый.**
Йоҡо менән үле тиң.

142. **Сон постели не выбирает.**
Сон хлеба не просит.
Йоҡо яҫтыҡ һорамай.

143. **Сорная трава хорошо растет.**
Сүп үләне тиҙ үҫә.

144. **Спасение утопающих — дело самих утопающих.**
Һөлөк кем аяғында, уны шул ала.

145. **Спохватился шапки, когда головы не стало.**
Атын юғалтҡас, келәтөн бикләгән.

146. **Спроси в людях, что дома делается.**
Өйөндәгән күршөндән һора.

147. **Спустя лето по малину не ходят.**
Эңер төшкәс, күләгә кәрәкмәй.

148. **Старая лиса дважды себя поймать не даст.**
Ҡарт төлкө ҡапҡанға төшмәҫ.

149. **Старая одежда новую бережет.**
Яңыны иҫке күтәрә.
Иҫке кейем яңыһын һаҡлай.

150. **Старого воробья на мякине не проведешь.**
Ҡарт сәпсек кәбәккә алданмаҫ.

151. **Старость не покупают, сама приходит.**
Ҡартайыу өсөн аҡса кәрәкмәй.

152. **Старость не радость.**
Ҡартлыҡ — түгел икән шатлыҡ.

153. **Старую лису дважды не проведешь.**
Ҡарт төлкө ҡапҡанға төшмәҫ.

154. **Старый ворон даром не каркает.**
Ҡартайған эт юҡҡа өрмәй.

155. **Старый враг не станет другом.**
Итәк киҫеп, ең булмаҫ, иҫкө дошман дуҫ булмаҫ.

156. **Старый конь борозды не портит.**
Ҡарт алаша бураҙнаны боҙмай.
Ҡарт алашаны ҡамыт һуҡмай.

157. **Старое не уйдет, новое не придет.**
Иҫке ғәҙәт ташланмай, яңыһы башланмай.

158. **Старый пес зря не лает.**
Ҡартайған эт юҡҡа өрмәй.

159. **Стоит лентяю работу поручить, как он тебя начнет уму-разуму учить.**
Ялҡауға эш өйрәтһәң, ул һиңә аҡыл өйрәтер.

160. **Стоячее болото гниет.**
Тымыҙыҡ күлдә ҡорт уйнай (мыжғый).

161. **Стреляного воробья на мякине не проведешь.**
Ҡарт сәпсек кәбәккә алданмаҫ.

162. **Стыд под каблук, а совесть под подошву.**
Оятын олторак иткән.

163. **Судьба придет, ноги сведет и руки свяжет.**
Күрәсәк күҙ йомдора.

164. **Судьба с пути не собьет.**
Яҙмыш юлдан яҙҙырмаҫ.

165. **Судьбу не обманешь.**
Яҙмышты ямап булмай.

166. **Суженого конем не объедешь.**
Өлөшөңә сыҡҡан көмөшөң.

167. **Суженого ни обойти, ни объехать.**
Никахтар күктә ярала.
Өлөшөңә төшкән көмөшөң.

168. **Суженый кус в рот валится.**
Яҙған ризыҡ теш һындырып керер.

169. **Сухая ложка рот дерет.**
Ҡоро ҡашыҡ ауыҙ йырта.

170. **Счастлив тот, кто считает себя счастливым.**
Үҙен бәхетле һанаған бәхетле булыр.

171. **Счастливые часов не наблюдают.**
Бәхетлеләр сәғәткә ҡарамай.

172. **Счастье с несчастьем в одних санях ездят.**
Ике бәхеткә — бер ҡайғы.
Ҡайғы-шатлыҡ бергә йөрөй.

173. **Счет чаще — дружба слаще.**
Иҫәпле дуҫ айырылмаҫ.

174. **Съели щуку, а зубы остались.**
Суртандың үҙе үлһә лә, теше үлмәй.

175. **Съешь и морковку, коль яблочка нет.**
Таныҡҡа тары бутҡаһы.

176. **Сын заругал — на печку полезай,**
заругал зять — за дужку двери держись *(устар.)*.
Улың асыуланһа, түренә мен,
кейәүең асыуланһа, ишек бауын тот.

177. **Сыну говорю, а ты, невестка, слушай.**
Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла.

178. **Сытому — веселье, а у голодного хлеб на уме.**
Астың күҙе икмәктә, туҡтың күҙе хикмәттә.

179. **Сытый волк смирнее завистливого человека.**
Ас кешенән хас кеше яман.

180. **Сытый голодного не разумеет.**
Ас хәлен туҡ белмәй.

Т

1 **Та корова пала, что больше молока давала.**
Үлгән һыйыр һөтлө була, киткән килен ипле була.
Югалган ҡылыстың һабы алтын.

2 **Твой же приговор, да тебе же во двор!**
Ҡарғышың ҡара башыңа!

3 **Твори добро, и тебе будет добро.**
Ҡылған эшең кешегә, килгән сауабы үҙеңә.

4. **Тебе, дочка, говорю, а ты, невестушка, слушай.**
Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла.

5. **Те же кафтаны, да не те карманы.**
Иҫке күлдәккә яңы ямау.

6. **Тем не играют, от чего умирают.**
Уйламай һөйләгән — ауырымай үлгән.

7. **Теплое стойло корм бережет.**
Йылы аҙбар — ярты аҙыҡ.

8. **Терпение и труд все перетрут.**
Сабыр иткән — мораҙына еткән.

9. **Терпенье исподволь свое возьмет.**
Сабырлыҡ төбө — һары алтын.

10. **Терпи, казак, атаманом будешь.**
Терпение — золото.
Сабырлыҡ төбө — һары алтын.
Сабыр иткән — мораҙына өткән.

11. **Терпеливого Бог наградит.**
Терешке не по зубам орешки.
Тешһеҙгә һәр сәтләүек төшһеҙ.
Түҙгәнгә — түш.
Түҙгән түш өйгән.

12. **Типун тебе на язык.**
Теленә — тилсә.
Теленә тилсә сыҡҡыры!

13. **— Тит, иди молотить!**
— Брюхо болит.
— Тит, иди кисель есть!
— Где моя большая ложка?
Эшкә булһа, «алла башым», ашҡа булһа — «ҡайҙа ҡашығым?»

14. **Тиха вода, а берега подмывает.**
Йүкә шына имән яра.

15. **Тихий голос далеко слышен.**
Тәрән йылға тын (тыныс) аға.

16. **Тихое озеро быстро тиной зарастает.**
Тымыҙыҡ күлдең ҡорто күп.
Тымыҙыҡ күлдә ҡорт уйнай (мыжғый).
Тымыҙыҡ һыуҙың төбө ҡорт.
Тымыҡ күлгә шайтан оялай.
Йомшаҡ ағасты ҡорт баҫа.

17. **Тише едешь, дальше будешь.**
Әкрен барған тиҙ етер.
Аҡрын барһаң, алыҫ китәрһең.

18. **То ли ремень, то ли мочало порвется.**
Әллә йүкә өзәлә, әллә ҡайыш өзәлә.

19. **Тому виднее, у кого нос длиннее.**
Түрә үтә күрә.

20. **Торг — яма: упадешь — пропадешь.**
Алыш-биреш — артҡа тибеш.

21. **Тот живет в добре, у кого лошадь во дворе.**
Дуға бар йортта доға бар.

22. **Тот, кто украл яйцо, украдет и курицу.**
Төймә урлаған дөйә лә урлар.

23. **Тот цену здоровья не знает, кто болен не бывает.**
Һаулыҡтың бар сағында ҡәҙере юҡ.

24. **Труд кормит и одевает.**
Киндер сәсһәң, күлдәк кейерһең.

25. **Труд при учении скучен, да плод от учения вкусен.**
Уҡыуҙың үҙе ауыр булһа ла, емеше тәмле була.

26. **Трудодни наживать — на печи не лежать.**
Тир түкмәйенсә труддень булмаҫ, бил бөкмәйенсә бураң тулмаҫ.

27. **Трутням праздник и по будням.**
Ялҡауға көн дә байрам.

28. **Ты его добром, а он тебя колом.**
Ит изгелек, көт яуызлыҡ.

29. **Ты ему слово, а он тебе десять.**
Бер ҡарыуға — меҢ ҡарыу.

30. **Ты меня не трожь, и я тебя не трону.**
Һин миңә теймә, мин һиңә теймәйем.

31. **Ты — мне, я — тебе.**
Һин — миңә, мин — һиңә.

32. **Ты на гору, а черт за ногу.**
Бәндә (Хоҙай) бире уҡый, шайтан кире уҡый.

33. **Ты с бородой, а я с усами.**
Һин белгәнде мин киптереп элгән.

34. **Тысяча друзей — мало, а один враг — много.**
Йөҙ дуҫ аҙ була, бер дошман күп була.

35. **Тьма свету не любит.**
Эт йүгереген телке һеймәҫ.

36. **Тяжесть хомута знает лошадь.**
Ат яфаһын һабан белә.

37. **Тяп-ляп — и корабль.**
Балта-бысак теймәгән, тумырған да һейәгән.

У

1. **У артели каша густая.**
Артелдең ейрәһе куйы.
Бергә бешергән аш куйы була.

2. **У батрака помощника не бывает.**
Хәйерсенең ялсыһы үлгән.

3. **У бесстыжего ни веры, ни правды.**
Әҙәпһеҙгә иман юк.

4. **У Бога недолго, а у нас тотчас.**
Ай үтә, йыл үтә, ай әйләнә, көн үтә.

5. **У всякого Павла своя правда.**
Кем һейләһә, шуның һүҙе хак.

6. **У денег глаз нет.**
Аксаның күҙе юк.

7. **У доброго батьки добры и дитятки.**
Якшынан якшы тыуа, ямандан яман тыуа.

8. **У дурака что на уме, то и на языке.**
Тиленең уйында ни, телендә шул.

9. **У дурака язык впереди ног бежит.**
Иҫәр тәүҙә һөйләр, аҙаҡ уйлар.

10. **У зимы спрос строгий.**
Ҡыш бауыры ҡылыстай.

11. **У каждого времени свои обычаи.**
Һәр замандың үҙ йолаһы.
Заманаһына ҡарап манараһы.
Заманына күрә балаһы.
Заман башҡа — заң башҡа.

12. **У кого вожжи, у того и воз.**
Йүгән кемдә, ат шунда.

13. **У кого в руках, у того и в устах.**
Кемдең ҡулында, шуның ауыҙында.

14. **У кого детки, у того и ягодки.**
Балалы кеше — бай көше.

15. **У кого что болит, тот про то и говорит.**
Ауыртҡан ерҙән ҡул китмәй.

16. **У кого пили, того и побили.**
Ит изгелек — көт яуызлыҡ.

17. **У коровы молоко на языке.**
Һыйырҙың һөтө төлендә.

18. **У кривого и тень кривая.**
Кәкренең күләгәһе лә кәкре.

19. **У любви нет возраста, нет предела.**
Ғишыҡ йәшкә ҡарамай.

20. **У матери учатся шубу шить, у отца — лук точить.**
Атанан күргән — уҡ юнған, әсәнән күргән — тун бескән.

21. **У медали две стороны.**
Ҡылыс ике ҡырлы.
Миҙал ике яҡлы.

22. **У нашей Федорки всегда отговорки.**
Һыныҡҡа һылтау (табыла).

23. **У начальника волчий рот, лисий хвост.**
Эт артында — ҡой(о)роҡ, түрә артында — бойороҡ.

24. **У него (у нее) кожа тонка.**
Һеркәһе һыу күтәрмәй.

25. **У «нет» голова не болит.**
«Юҡ»тың башы ауыртмай.

26. **У плохого мастера и пила плоха.**
Ата алмаған: «Уғым кәкре булды», — тигән.

27. **У пьяного что на уме, то на языке.**
Иҫеректең күңелендә ни, телендә шул.

28. **У себя как хочешь, а в гостях как велят.**
Ҡунаҡ — хужаның ишәге.

29. **У семи нянек дитя без глаза.**
Ашнаҡсы күп булған ерҙә аштың тәме булмай.

30. **У слепого дорогу не спрашивают.**
Һуҡырҙан юл һорамайҙар.

31. **У старых разум в мешке, а у молодых — в кошелке.**
Ҡарттар һүҙе — ҡапсыҡта, йәштәрҙеке — янсыҡта.

32. **У страха глаза велики.**
Ҡурҡҡанға ҡуш күренә.

33. **У сытого на уме гулянье, а у голодного — обед.**
Туҡ күңеле хикмәттә, ас күңеле икмәктә.

34. **У черта на куличках.**
Ер аяғы, ер башы ер.

35. **У хорошего мужа и жена хороша.**
Яҡшы ир менән ҡатын хур булмай.

36. **У хорошей жены и плохой муж будет молодцом.**
Ирҙе ир иткән дә ҡатын, хур иткән дә ҡатын.

37. **Увертка не вывертка.**
Һыныкка һылтау(табыла).

38. **Увидел пень через плетень.**
Бүрәнә аша бүре күргән.

39. **Увядший цветок вновь не зацветет.**
Шиңгән сәскә ҡабат терелмәй.

40. **Удастся — квас, не удастся — кислые щи.**
Тейһә — тейенгә, теймәһә — ботаҡка.

41. **Удобряй щедрей поля, наградит тебя земля.**
Мул ашлаһаң ереңде, күп алырһың игенде.

42. **Уговор дороже денег.**
Вәғәҙә — иман, вәғәҙә — бурыс.

43. **Удалой без ран не бывает.**
Батыр яраһыҙ булмай.

44. **Узнают птицу по перьям, сокола по полету.**
Булырҙайҙың биленән, итәгенән, еңенән.
Май сүлмәге тышынан билдәле.

45. **Ужаленный змеей и веревки боится.**
Ауыҙы бешкән һалҡын һыуҙы ла ереп эскән.

46. **Улитка ползет, когда-то будет.**
Бер аяғын атлағансы, икенсеһен эт ашай.

47. **Умел дитя родить, умей и научить.**
Баланы таба белгәс, баға ла бел.

48. **Умен тот, кто держит язык за зубами.**
Телен тыйган — аҡыллы.

49. **Умеренность (в еде) — мать здоровья.**
Аҙ ашаһаң, күп йәшәрһең.

50. **Умей взять, умей и отдавать.**
Ала ла бел, бирә лә бел.

51. **Умерла та курица, что несла золотые яйца.**
Үлгән һыйыр һетле була.

52. **Ум не в летах, а в голове.**
Аҡыл йәштә түгел, башта.

53. **Умному — намек, глупому — дубина.**
Аҡыллыға ым да етә, аҡылһыҙға тукмаҡ та аҙ.
Аҡыллыға — ишара.

54. **Умный враг лучше глупого друга.**
Аҡылһыҙ дуҫтан аҡыллы дошман артыҡ.

55. **Умный слов на ветер не бросает.**
Аҡыллы ҡош ҡанатын һаҡлай,
аҡыллы ҡеше һүҙен һаҡлай.

56. **Умный сын — отцу замена.**
Улы барҙың ҡулы бар.

57. **Умный умом возьмет.**
Аҡыллы аҡылы менән алдырыр.

58. **Ум-разум дороже золота.**
Аҡыл — алтын.
Аҡыл алтындан ҡиммәт.

59. **Упущенная рыба всегда кажется большой.**
Үлгән һыйыр һөтлө була.
Юғалған ҡылыстың һабы алтын.

60. **Упущенное не наверстаешь.**
Кискә ҡалһаң, диңгеҙ кисерһең.
Һуңға ҡалған — туңға ҡалған.

61. **Услуга за услугу.**
Мин — һиңә, һин — миңә.
Алмаҡ бирмәҡ менән ярашыр.
Алмаҡтың һалмағы бар.

62. **Услужливый дурак опаснее врага.**
Өрә белмәгән эт өйөнә ҡунаҡ килтерә.

63. **Успех не разлучен с храбрым.**
Ҡыйыуҙың бәхете алдан йөрөй.

64. **Устами ребенка глаголит истина.**
Һүҙҙең тураһын баланан ишет.

65. **Утопающий хватается за соломинку.**
Батып барған үләнгә тотонған.
Үлеп барған һаламға йәбешкән.

66. **Утро вечера мудренее.**
Киске эш таңға келке.

67. **Уходит день — не привяжешь за плетень.**
Ғүмер ҡыҫҡа, үткәрмә бушҡа.

Кешенең кем икәнен белгең килһә, төҫөнә ҡарама, дуҫына ҡара. С – 13
Кешө күҙендәгө сүпте ҡүргәнсө, үҙ күҙеңдәге бүрәнәне алып ҡуй. В – 64
Кешенөң үрҙәген ашаһаң, үҙөң ҡаҙың әҙерлә. П – 27
Кешенең эсенә кереп булмай. В – 65
Кешенән көлмәк, үҙеңә килмәк. Н – 64
Килбәтө ниндәй — күләгәһе шундай. К – 49
Килбәтле ҡыҙ килен булғас күренер. К – 113
Килен кеше — ким кеше, алабайга тиң кеше. С – 126
Килер ҡунаҡтың ҡарыны киң. Г – 65
Киленде килгәс күрербеҙ. Ц – 3
Киндер сәсһәң, күлдәк кейерһең. П – 54, Т – 24
Киң йылғаға — киң көймә. Б – 69
Кире инер ишегеңде ҡаты япма. Н – 157
Кис ҡурҡҡан көндөҙ сыра яндырған. К – 78
Кисеү белмәй, һыуға төшмә. Н – 129
Кисеү бирмәҫ йылға булмаҫ. Н – 226, 228
Кисеү кискәндә ат туғармайҙар. К – 91, Н – 37
Кисеү күрмәй, аяғыңды сисмә. Н – 108, 201
Кискө эш таңға көлкө. У – 66
Кискә ҡалһаң, диңгеҙ кисерһең. У – 60
Киткәндәргә юл яҡшы, ҡалғандарға өй яҡшы. В – 109
Көҙ бар, ҡыш бар, ашығып ни бар? Р – 2
Көй ҙә кәрәк, сөй ҙә кәрәк. И – 14
Көл булмай гөл булмаҫһың. К – 145
Көл булмайынса, гөл булып булмай. Н – 203
Көлгә аунаһаң да, үҙ көнөңдө үҙең күр. С – 50
Көлкө көлә етә, артынан ҡыуа етә. Н – 64
Көлкө көлә етер, артынан һөрә етер. В – 146, Н – 180, Х – 20
Көн күрмәгән көн күрһә, көндөҙ сыра яндырыр. Н – 177
Көн уҙһын, сабата туҙһын. С – 64, Х – 27

Көнлөксәгә көнөң ҡалмаһын. Н – 67
Көнсөл көн күрмәҫ. В – 22
Көнсөлдөң йөрәген ят бәхете яндыра. З – 5
Көс көс менән өңелә. К – 67
Көслө — көсөн, һөнәрле эшөн күрһәтөр. В – 140
Көслө менән көрәшмә, маллы менән даулашма. С – 1
Көсләп астырған күҙҙең нуры юҡ. К – 73
Көсләп һөйҙөрөп булмай. С – 68
Көсһеҙ көрәк һындырыр. М – 8
Көсө етмәҫ күҫәк күтәрер. К – 167
Көсөң етмәгәнгә көсәнмә. Н – 81
Көсөңә күрә көсән. Н – 41
Көтөүсенең ялсыһы үлгән. В – 120
Көтөүсеһенә ҡарап көтөүе. К – 44, 55
Күҙ — күңелдең көҙгөһө. Г – 25
Күҙ күрмәй күңел ышанмай. Н – 94, 202
Күҙ күрһә лә, теш үтмәй. В – 91
Күҙ ҡуркаҡ, ҡул батыр. Г – 27
Күҙе ялтырай, үҙе ҡалтырай. Г – 26, 36
Күҙең менән күрмәгәндә ауыҙың менән һөйләмә. Ч – 6
Күҙҙән китһә, күңелдән китә, күңелдән китһә, күҙҙән китә. С – 4
Күҙҙән китһә, күңелдән китә. Д – 8
Күктән көткәнде ерҙән биргән. Ж – 3
Күктән юғары аҫмаҫтар, ерҙән түбән күммәҫтәр. В – 165
Күкәй тауыҡты өйрәтмәй. К – 179, Н – 208, Я – 15
Күл тамсынан йыйыла. И – 46, П – 41
Күлөнә ҡарап ҡамышы. К – 25
Күмәк ҡулға эш түҙмәй. Б – 35
Күмәкләгән яу ҡайтарған. М – 24
Күңел күҙе күрмәһә, маңлай күҙе — ботаҡ тишеге. Г – 23, Л – 28
Күңел тапмаҡ — бер һүҙ, күңел ҡалмаҡ — бер һүҙ. С – 104
Күңелгә килгән алға килә (тиҙәр). К – 89
Күңеле һуҡырҙың күҙе һуҡыр. Н – 16
Күңелең кемде һөйһә, шул матур. Н – 137, 165
Күңелең киң булһа, тар ергә лә һыйырһың. В – 55
Күп ашаһаң, бал да ялҡыта. Б – 48
Күп бел, аҙ һөйлә. П – 19
Күп белһәң, тиҙ ҡартайырһың. Л – 80, М – 27
Күп йөрөгән юл яңылыша, күп һөйләгән тел яңылыша. М – 18
Күп йәшәгән ни белгән, күпте күргән шул белгән. Н – 185, 194
Күп һөйләгән әҙ эшләр. Б – 68, Г – 12, К – 139

Күп һүз — сүп һүз. В – 38
Күп һүз быҙау имеҙә. Г – 11, Л – 44
Күп һүз ялғанһыҙ булмай. К – 137, М – 18
Күп һүҙҙең әҙе, әҙ һүҙҙең үҙе яҡшы. Х – 19
Күпкә китһә, майлы бутка ла туйҙыра. Б – 48
Күпме баш — шунса аҡыл. С – 83
Күпме ил — шунса йола. В – 32, Ч – 45
Күпме сәйнәһәң дә, бер балыҡ башы. С – 85
Күпселек ҡайҙа — көс шунда. В – 12
Күпте белһәң дә, әҙ һейлә. Б – 67
Күпте өмөт итеп, аҙҙан буш ҡалған. П – 26
Күпте өмөт итеп, әҙҙән ҡоро ҡалма. М – 29
Күпте өмөт иткән әҙҙән ҡоро ҡалған. З – 2
Күргән күҙҙең яҙығы юҡ. Г – 24
Күргәнеңде ҡуйып, ишеткәнеңә ышанма. Н – 94
Күренгәндең алыҫы юҡ, күтәргәндең ауыры юҡ. Х – 28
Күренмәгән түңгәк арба (сана) ауҙарыр. И – 15
Күрмәгәндең күргеһе килә, күргәндең ҡоҫҡоһо килә. Н – 93, Ч – 5
Күрмәй күргән — күн итеген башына кейгән. Н – 87
Күрше тауығы күрекле. Ч – 70
Күршә хаҡы — Тәңре хаҡы. Х – 18
Күршенең тауығы ҡаҙҙай, ҡатыны ҡыҙҙай. К – 178, Ч – 70
Күрәсәк күҙ йомдора. С – 163, Ч – 28
Күрәһен күрмәй, гүргә кереп булмай. Г – 1, О – 68
Күскән йоттан ҡотолор, үлгән бурыстан ҡотолор. С – 19
Кәзәне кәбеҫтә ҡарауылларға куймайҙар. В – 107, П – 112
Кәкре ағасты ҡиҫмәй, ел иҫмәй. К – 102
Кәкренең күләгәһе лә кәкре. У – 18
Кәмәһе булһа, ишкәге юҡ. Л – 46
Кәңәшле эш (ил) тарҡалмаҫ. Г – 18
Кәртәгә кермәгән тәртәгә кермәй. Н – 233
«Кәрәк»кә лә сама кәрәк. В – 30
Кәрәк тирәкте йыҡтыра. Н – 248, П – 36

Ҡ

Ҡабаланған ҡабырғаһын һындырған. Ш – 2
Ҡабыҡ ҡалын булһа ла, хаҡы бөр тин. В – 74
Ҡаҙ ҡаҙ менән, таҙ таҙ менән. Л – 26
Ҡаҙан ҡараһы китер, күңел ҡараһы китмәҫ. Ч – 34
Ҡаҙанға яҡын барма — ҡараһы йоғор, яманға яҡын барма, ялаһы йоғор. Н – 196
Ҡаҙанға яҡын барһаң, ҡараһы йоғор, яманга яҡын барһаң, бәләһе йоғор. В – 101

Ҡайғы ағас башынан йөрөмәй, әҙәм башынан йөрөй. Г – 55
Ҡайғы (бәлә) кешенән һорап килмәй. Б – 9
Ҡайғы килһә, иғеҙ килә. Б – 5, Л – 38
Ҡайғы-шатлыҡ бергә йөрөй. Г – 15, 54, С – 172
Ҡайғы юҡта ҡайғы булды ҡайнатамдың үлеме. Н – 88
Ҡайғы юҡта ҡайғы итеп, ҡайным ниңә улде икән? Н – 88
Ҡайғыға башың эймә. В – 26
Ҡайғынан ҡурҡҡан — шатлыҡ күрмәгән. Г – 61
Ҡайғынан ҡурҡһаң, шатлыҡ күрмәҫһең. Г – 61
Ҡайғырып, ҡойма ҡоймаҫһың. С – 96
Ҡайғыһыҙға йоҡо тәмле (йоҡо моң). Б – 37
Ҡайҙа барһаң да ҡара һаҡалың артыңдан ҡалмай. К – 40
Ҡайҙа беҙ юҡ — шунда яҡшы. Х – 22
Ҡайҙа йығылырымды белһәм, һалам түшәп ҡуйыр инем. К – 5
Ҡайҙа ла бер ҡояш. К – 174
Ҡайтып килеп өйөрөн тапһа, аҙашҡаң малда ғәйеп юҡ. И – 56
Ҡайтып килеп ейөрөн тапһа, аҙашҡан малды әрләмә. И – 56
Ҡайырҙан ҡайын яһап булмай. С – 9
Ҡалала эш һөймәҫ, ауылда кәбән өймәҫ. Н – 236
Ҡаланың ҡоло булғансы, даланың эте бул. Л – 59
Ҡалған хәтерҙең ҡары китһә лә, боҙо китмәҫ. К – 66
Ҡанға һеңгәнде йыуып та, юнып та бөтерөп булмай. Ч – 44
Ҡапҡан белмәй, тапҡан белә. Н – 152
Ҡапҡан һайын ҡалъя эләкмәй. Н – 100
Ҡапыл күтәрелгән ҡатыға төшкән. П – 105, Ч – 25
Ҡар башына ҡар етә. К – 67
Ҡар еҫтәндә ҡаҙан ҡайната. В – 47, К – 4
Ҡар өҫтендә ҡарға тиҙәгә лә табылмай. Л – 30
Ҡара тауыҡ та аҡ күкәй һала. О – 71, Х – 37
Ҡарағайға ҡарап, тал үҫер, хеҙмәтенә ҡарап, дан үҫер. К – 152
Ҡарайған бит тиҙ ағармай. Л – 11
Ҡарама беләккә, ҡара йөрәккә. М – 46
«Ҡарарбыҙ», тип әйткән, ти, бер һуҡыр. С – 99
Ҡарға бөркөткә эйләнмәҫ. Н – 89
Ҡарға күҙен ҡарға суҡымай. В – 115
Ҡарға ла балаһына «аппағым», тиер, терпе лә балаһына «йомшағым», тиер. И – 5
Ҡарғышың ҡара башыңа! Т – 2
Ҡарт алаша бураҙнаны боҙмай. С – 156
Ҡарт алашаны ҡамыт һуҡмай. С – 156
Ҡарт булһа ла ирең, хөрт булһа ла өйөң булһын. Х – 43
Ҡарт сәпсек кәбәккә алданмаҫ. С – 150, С – 161
Ҡарт төлкө ҡапҡанға төшмәҫ. С – 148, 153

Ҡартайған эт юҡҡа өрмәй. С – 154, 158
Ҡартайғансы аҡыл ултырмаған. Б – 71
Ҡартайыу өсөн аҡса кәрәкмәй. С – 151
Ҡартлыҡ — түгел иҡән шатлыҡ. С – 152
Ҡарттар һүҙе — ҡапсыҡта, йәштәрҙеке — янсыҡта. У – 31
Ҡаты ағаҡса — ҡаршы сөй. Н – 24
Ҡаты һүҙҙән тал һына, йомшаҡ һүҙҙән таш һына. Л – 4
Ҡатын-ҡыҙҙың сырағы ҡырҡ, бере янмаһа, бере яныр. Б – 1
Ҡатын бәхете ирҙән. П – 106
Ҡатын ҡәрҙәше ҡаҙан янында, ир ҡәрҙәше ишек төбендә. С – 48
Ҡатын уңғанын усаҡтан, ир уңғанын бысаҡтан беләләр. О – 69
Ҡаурый ҡәләм менән яҙғанды ҡылыс менән юя алмаҫһың. Ч – 51
Ҡаяуһыҙ ҡорт булмай. Н – 227
Ҡоҙоҡҡа төкөрмә — һыуын эсерһең. В – 99, Н – 157
Ҡойроҡ баштан алда йөремәй. Г – 20
Ҡоралын тапҡан — таш киҫкән, әмәлен тапҡан — һыу кискән. Р – 1
Ҡоро ҡашыҡ ауыҙ йырта. С – 169
Ҡоро ҡулға ҡош ҡунмай. Н – 40
Ҡорт саҡканда — Әхмәҙи, бал тапҡанда — Әүхәҙи. Я – 16
Ҡоторғандан ҡотолғаның хәйерле. П – 29
Ҡош тоҙаҡҡа томшоғо менән эләгә, кеше теле менән эләгә. Б – 64
Ҡошҡа алтын ситлек тә зиндан. З – 53
Ҡош матурлығы түшенә ҡарап, кеше матурлығы эшенә ҡарап. П – 107
Ҡояш һәр кемде лә тигеҙ йылыта. С – 139
Ҡояш янында йылылыҡ, инә янында изгелек. П – 91
Ҡояшта ла тап бар. И – 23
Ҡул ҡулды йыуа, ике ҡул битте йыуа. Р – 35
Ҡул һелтәй, балта саба. Р – 34
Ҡул яраһы китә, тел яраһы китмәй. Б – 66
Ҡул (тән) яраһы китһә лә, тел яраһы китмәй. Р – 12
Ҡулың ҡүтәрә алмаҫ суҡмарҙы биленә ҡыҫтырма. Р – 31
Ҡулың менән биргәнде аяғың менән юллап алаһың. Д – 2, О – 56
Ҡулың менән эшләгәнеңде буйың менән ҡүтәрерһең. С – 29, Ч – 27
Ҡулыңда /эшләргә/ эшең булһа, эс бошорға ваҡыт юҡ. Ч – 65
Ҡунағына ҡарап хөрмәте. К – 35, 54
Ҡунағыңа ҡарап икмәгең тел. К – 54
Ҡунаҡ алдына аш ҡуй, ике ҡулын буш ҡуй. Х – 5

Ҡунаҡ ашы ҡара-ҡаршы. Л – 75
Ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул. Ч – 36
Ҡунаҡ кәҙере өс көн. М – 22
Ҡунаҡ кәҙере өс көн, дүртенсеһе үҙ башыңа. Г – 62
Ҡунаҡ кәҙере өс көн, өс көндән һуң өйөңә ысҡын. Г – 62
Ҡунаҡ өс көнгә — ҡунаҡ, өс көндән һуң өйөңә олаҡ. Г – 62
Ҡунаҡ, өс көн торһа — ҡунаҡ, унан ары — муйнаҡ. В – 40, Г – 62
Ҡунаҡ — хужаның ишәгә. В – 6, Г – 66, У – 28
Ҡунаҡ һорамай таптыра. Г – 63, 65
Ҡунаҡ әҙ ултырыр, күп һынар. Г – 67
Ҡунаҡта рәхәт, өйҙә бәрәкәт. В – 7
Ҡунаҡтың көнө — өс, унан һуң йорт эйәһенә көс. Г – 62
Ҡурҡаҡ (ҡол) булып йәшәүҙән үлем яҡшы. Л – 69
Ҡурҡҡанға ҡуш күренә. П – 108, У – 32
Ҡурҡҡанға һәр ҡыуаҡ — ҡараҡ. К – 78
Ҡуштанға ышанма, ҡушҡанға ышан. Н – 27
Ҡуян бала тапҡан, ҡуйыр урын тапмаған. Д – 4
Ҡуян тауға үпкәләгән, тауҙың иҫендә лә юҡ. В – 110, 135
Ҡуянға — йән ҡайғыһы, аусыға — мал ҡайғыһы. С – 129
Ҡыҙ бала йортҡа биҙәк, ир бала йортҡа терәк. Д – 74
Ҡыҙ саҡ — солтан саҡ, килөн саҡ — олтан саҡ. З – 28
Ҡыҙ һаҡлағансы тоҙ һаҡла. П – 39
Ҡыҙғанғаның — ҡыҙыл эткә. С – 93
Ҡыҙҙар йыйнаҡ булһа, егеттәр тыйнаҡ була. Д – 19
Ҡыҙыл йоморттҡа көнөндә ҡиммәт. Д – 69, Л – 50
Ҡыҙыу янған ут тиҙ һүнер. С – 35
Ҡый үләнһөҙ баҡса булмай. Н – 230
Ҡыйынлығын күрмәй ҡаймағын ашап булмай. К – 145
Ҡыйынлыҡ күрмәй, рәхәтлек килмәй. Г – 60
Ҡыйыуҙың бәхәте алдан йөрөй. У – 63
Ҡыйыулыҡ — ярты ырыҫ (бәхет). З – 14, С – 114, Х – 39
Ҡыйыш атып, тура тейҙөрә. К – 120
Ҡыйыш ултырһаң да тура һөйлә. С – 73
Ҡылған эшең көшегә, килгән сауабы үҙеңә. Т – 3
Ҡылды ҡырҡҡа яра. В – 47
Ҡылсыҡһыҙ бойҙай булмаҫ. О – 8
Ҡылығын белмәгән малға яҡын барма. Н – 159
Ҡылыс ике ҡырлы. У – 21
Ҡылыс күтәргән ҡылыстан үлөр. К – 165, П – 33
Ҡылыс менән килгән ҡылыстан үлер. К – 165
Ҡыңғырауҙың эсе бүш. П – 110
Ҡырҡ көше бер яклы, ҡырын көше кире яклы. С – 61
Ҡырҡ улың булғансы, ҡыштыр ирең булһын. Х – 34
Ҡырмыҫҡалар ҙур түгел, күмәкләшеп тау актара. М – 46

Ҡырын үлтырһаң да, тура һөйлә. К – 118
Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә (беленер). К – 20, С – 81, Ш – 1
Ҡысытмаған ерҙе тырнамайҙар. Г – 14
Ҡыҫҡалыҡта — оҫталыҡ. К – 101, 115
Ҡыҫыр тауыҡ күп ҡытаҡлай. П – 110
Ҡыш бауыры ҡылыстай. У – 10

Л

Лаяҡыл иҫерек. П – 115

М

Май (бал) сабата йоттора. В – 23
Май булһа, бутҡа бешерер инәк, ярма юҡ. С – 37
Май сүлмәгә тышынан билдәле. З – 52, У – 44
Майҙан бутҡа боҙолмаҫ. К – 63
Майҙы майлап ашамайҙар. О – 57
Майһыҙ ҡоймаҡ шыумай. Н – 158
Майһыҙ таба ҡупмай. Б – 49, Н – 158
Мал эйәһенә оҡшамаһа, хәрәм була. С – 12
Матур матур күренмәҫ, һөйгән матур күренер. Н – 137
Матур сәскә сәнскәлә була. Х – 24
Матурлыҡ — күҙ өсөн, холоҡ — күңел өсөн. Н – 23
Матурлыҡ туйҙа кәрәк, аҡыл көн дә кәрәк. К – 109
Матурлыҡ туйҙа кәрәк, мөхәббәт көн дә кәрәк. К – 110
Матурлыҡты табаҡҡа һалып йерәтмәйҙәр. С – 14
Матурлыҡты табаҡҡа һалып табынға сығармайҙар. Н – 179
Мейес һалғас та аҡлана, намыҫ йәшләй һаҡлана. Б – 32
МеҢ баш, меҢ аҡыл. С – 83
МеҢ бәләгә бер яуап. С – 57
Меҫкен ишәккә һәр кем атлана. Н – 48
Миҙал икә яҡлы. У – 21
Мин — һиҢә, һин — миҢә. У – 61
Минән киткәнсе, эйәһенә өткәнсе. В – 68, Н – 71
МиҢә булған — миҢле булган. К – 84
МиҢә теймәгән йылан йөҙ йыл йәшәһен. Н – 197
Михнәт көйрәтә, аҡылға өйрәтә. Б – 10
Михнәт күрмәгән рәхәттең ҡәҙерен белмәҫ. К – 150
Мөгөҙ тыуа килә сыҡмай, тора килә сыға. Г – 41
Мөңрәп килгән һыйырҙың мөгөҙөн бәреп һындырма. И – 56
Мөрйәһе ҡыйыш булһа ла, төтөнө тура сыға. Х – 29
Мөхәббәт йәш һорамай. Л – 73
Мөхәббәт таш ярыр. Г – 49

Муйыны булһа, ҡамыты табылыр. Б – 92
Мул ашлаһаң ереңде, күп алырһың игенде. К – 65, У – 41
Мунсаға ингәс, сабынмай булмай. Н – 131
Мәкәллә һүҙ — аҡыллы һүҙ. Р – 19
Мәсхәрәнән үлем яҡшы. Л – 68

Н

Намыҫ байлыҡтан ҡиммәт. Ч – 37
Ни Аллаға, ни муллага. Н – 235
Ни алтара, ни полтора. С – 70
Ни анда, ни бында. Н – 240
Ни булмаһа, шул таныҡ. Ч – 9
Ни булһа, шул булыр. Б – 93
Ни ите, ни һөтө. Н – 242
Ни йәме, ни тәмө. Н – 243
Ни он һыуы, ни тоҙ һыуы. В – 98
Ни саранан бисара. И – 28
Ни сәсһәң, шуны урырһың. Ч – 54
Ни һөйләһәң, шул алдыңа килә. О – 4
Никахтар күктә ярала. С – 167
Ниәт — ярты ғәмәл. Д – 49
Нужа бөсән ашата. Д – 57, Н – 246, 252
Нужа юҡты таптыра, барҙы һаттыра. Н – 249
Нух заманында. В – 29, П – 93
Нәҫел — нәҫелгә, тилсә — тамырға. К – 47
Нәфсе менән шайтан бер атанан. Ж – 1

О

Оло ат менән уйнаған кесе аттың аяғы аҡһаған. Н – 121, О – 34
Оло байрам, кесе туй. П – 10
Оло өйгә ни кәрәк, кесе ейгә лә шул кәрәк. Ч – 61
Осҡондан ялҡын сыға. И – 44, М – 1, О – 60
Осло кәбәндең башын ел ауҙара. Ч – 25
Осһоҙлоноң һурпаһы татымай. Д – 37
Оҫтаның ҡулы башҡа. В – 92, К – 38, Х – 14
Ояңа ҡарап, ҡанат ҡаҡ. П – 48
Оят барҙа хая бар. В – 17
Оятһыҙҙың битөнә төкөргәндәр — «Ямғыр яуа», — тип тик торған. П – 17
Оятын олторак иткән. П – 17, С – 162
Ояһында ни булһа, осҡанында шул булыр. К – 34
Ояһында сыҫҡан да батыр. М – 48

Ө

Өй тупһанан башлана. Х – 8
Өйҙә ятып ил күрмәҫһең. Д – 62
Өйҙәге иҫәпте баҙарҙағы хак боҙа. Д – 63
Өйө бейек, өйрәһе шыйык (һыйык). Д – 66, Н – 8
Өйем тар (ҡыҫық) булһа ла, күңелем киң. В – 55
Өйөндәге сүпте ситән аша ырғытма. Н – 107, 187
Өйөндәген ситкә сығарма. И – 43, Н – 187
Өйеңдәген күршеңдән һора. С – 146
Өйөндәге сүпте тышҡа сығарма. И – 43
Өйрә-бутҡа ҡаҙанда, ҡаҙандағы табында. Ч – 48
Өйрәнгән ер яу ҡайтара. В – 50
Өлгөлө һүҙгә үлсәү юҡ. Д – 51
Өлгермәгән емештең тәме юҡ. В – 25
Өлөш бар ерҙә үлеш бар. Г – 4
Өлешөңә төшкән (сыҡҡан) көмөшөң. С – 166, 167
Өмөтлө көн күрер, өмөтһеҙ гүр керер. Б – 70
Өмөтһеҙ — шайтан. Б – 14
— Өндәшмәҫтә ниҙәр бар?
— Урты тулы таштар бар. В – 56
Өргән эт тешләмәй, ермәгән эттән һаҡлан. Н – 83
Өргән эт тешләмәй. С – 133
Өрмәй тешләй. Н – 84
Өрә белмәгән эт өйенә ҡунаҡ килтерә. У – 62
Өс тағаны таймаҫ, тайһа ла аумаҫ. И – 30, О – 12
Өҫтәүенә ес сүмес. Н – 88

П

Паклыҡ һөйгән һау булыр. Ч – 38
Подпись иткән — подсуд киткән. Н – 218

Р

Рыя дуҫтан тура һүҙле дошман артыҡ. Л – 57
«Рәхмәт»тән тун тегеп булмай. И – 54
Рәхәтен күргәнһең, михнәтенә лә түҙ. Л – 76

С

Сабып барған юлда ҡалыр. С – 88
Сабыр иткән — мораҙына еткән. Т – 8, 10
Сабырлыҡ төбө — һары алтын. Т – 9, 10
Саҡырған өргә бар, ҡыуған ерҙән кит. Д – 12

Сама менән — дарыу, саманан уҙһа, — ағыу. Л – 18
Сама самаға тура килмәй. Р – 8
Сатан күп йөрөр, һуҡыр күп күрер. Н – 220
Себөн төйәҫ сер итер. Г – 70
Себөн тулап тәҙрә ватмаҫ. М – 47
Сөбендең үлер ваҡыты өтһә, мороно үткерләнә. О – 42
Сөбеште көҙ һанайҙар. Ц – 3
Сөнтябрҙә һин дә бер, мин дә бер. В – 52
Сөрең биктә булһын, телең эштә булһын. Р – 29
Серәкәйҙең тешләүенән бөзелдәүе яман. Н – 192
Серле кеше — сирлө кеше. С – 92
Сибәр сибәр түгел, һөйгән сибәр. Н – 165
Сибәрҙең йөҙө уртаҡ, оҫтаның ҡулы уртаҡ. К – 111
Силәгенә күрә ҡапҡасы. К – 26, Н – 15, П – 21
Сиңерткәнән ҡуркҡан иҙен икмәҙән (икмәҫ). Б – 72, В – 113
Сирлеҙә себен эйәләшә. К – 1
Сисенгән һыуҙан ҡурҡмаҫ. Г – 47, К – 147
Сит илдә мал да ерһәй. Н – 56
Сит илдә үҙ илеңдең эте лә яҡын. Н – 60
Сит илдең ере лә йәмһеҙ, һыуы ла тәмһеҙ. Н – 59
Ситкә әйткәнсө, биткә әйт. Л – 61
Сөйөнә күрә туҡмаҡы, туйына күрә таҡмаҡы. К – 49
Стенаҙа ышанма, ботаҡ күҙе бар. И – 35
Суйын сүлмәккә: «Йөҙөң ҡара», — тигән. Г – 57
Суртандың үҙе үлһә лә, теше үлмәй (ҡала). В – 106, С – 174, Щ – 1
Сусҡанан бер ҡыл. С – 23
Сүп өҫтөнә сүмәлә. Б – 6
Сүп үләнө тиҙ үҫә. С – 143
Сүбәк сәйнәп май сыҡмаҫ. В – 100, Г – 58
Сүпте сүмәлә итмә. Н – 117
Сыбыҡ саҡта бөгөлмәгән, таяҡ булғас, бөгөлмәҫ. Н – 50
Сыҡмаҡан йәндә өмөт бар. Ж – 8
Сыҡмаҡан ямғырҙа сәкмән ябынма. Н – 108, 201
Сысҡанға үлем, бесәйгә көлкө. К – 106
Сысҡандың да үҙ ояһы бар. И – 34
Сыуалған ептең дә бер осо була. К – 14
Сәйөм булһа — Сәйфи ағай,
Сәйем булмаһа — кәк(е)ре лә бөк(ө)рө. Б – 55
Сәләмәт тәндә сәләмәт аҡыл. В – 13
Сәмле кеше — мәллө кеше. К – 155
Сәпкә теймәһә — йәпкә. А – 1, М – 20
Сәркәш әтәс һимермәҫ. Д – 75

Т

Таба майлаган һайын шымара. Ч – 22
Табылмаған табыш — тау-таш хәтле. Н – 222
Табыуынан багыуы ҡыйын. Н – 206
Таҙалығың — байлығың. З – 38
Тамаҡ тамуҡҡа төшөрә. Б – 76
Тамсы тама-тама күл була. К – 60, П – 41
Тамсы тама-тама таш тишә. К – 61, Н – 213
Тамсы тамып, күл яһай, тин йыйылып, һум яһай. П – 41
Тамсы таш яра. К – 61
Тамсы ташты ла тишә. К – 61
Тамырһыҙ әрем дә үҫмәй. Б – 20
Танһыҡҡа тары бутҡаһы. С – 175
Таңдағы тауыҡтан бөгөнгө йоморттҡа артыҡ. Ж – 9
Тапҡанын эт ашай, арҡаһын бет ашай. Ч – 64
Тараҡан — ярығында, балыҡ — арығында. Р – 39
Тарта-тарта он булыр. П – 8
Тартай теленән таба (табыр). В – 142, Д – 72, Л -43, Я – 12
Татлы тел йыланды өңөнән сығарыр. Л – 3
Татлы тел таш ярыр. Л – 4
Татлынан-татлы — яҡшы һүҙ, затлынан-затлы — яҡты йөҙ. Л – 5
Татыу булһа ҡатының, ары торһон алтының. Н – 147
Тау менән тау осрашмаһа ла, кеше менән кеше осрашыр. Г – 50
Тауға ҡарап таш атма. П – 103
Тауҙай талабың булғансы, энәләй яуабың булһын. М – 5
Тауыҡ төшөнә тары керә. Г – 46
Таш менән атҡанға аш менән ат. З – 43
Таш менән атҡанға аш менән атмайҙар. О – 33
Таш төшкән урынында ауыр. Г – 6
Таштаң йүкә һуйылмай. С – 9
Таяҡ барҙа ҡуян осрамай, ҡуян осраһа, таяҡ булмай. С – 128
Таяуға — терәү, йыртыҡҡа — ямау. К – 2, О – 36
Тейҙерә алмағандың уғы кәкре. М – 8
Тейһә — тейенгә, теймәһә — ботаҡҡа. А – 1, Л – 32, М – 20, У – 40
Тел асҡысы — ил асҡысы. Я – 14
Тел дә яңаҡ үҙендә. В – 77
Тел ҡылыстан үткер. К – 24, С – 108
Тел менән тирмән тарттырып, онло булып булмай. Р – 7
Тел тиһәң — телеп һала, эш тиһәң — ишеп һала. Н – 47
Тел Төркөстанға (Төмәнгә, Темәскә) еткерә. Я – 11

Тел һейәкһеҙ, уй төпһеҙ. Я – 7
Тел һейәкһеҙ. Я – 6
Тел һейәкһеҙ: ни теләһә, шуны һөйләй. Я – 13
Телдән тел уҙа, ҡулдан ҡул уҙа. Б – 74
Теле татлы, күңеле ҡатлы. Г – 26
Теле юҡтың иле юҡ, иле юҡтың көне юҡ. Б – 29
Телен тыйған — аҡыллы. У – 48
Теленең осо татлы, тебе ҡортло. Л – 72, Н – 46, 62
Теленде теш артында тот, ҡолағыңды киçмәһен. Е – 16
Теленә — тилсә. Т – 12
Теленә тилсә сыҡҡыры. Т – 12
Теленә һалынған — эшендә абынған. Г – 12
Терелткән дә тел, үлтергән дә тел. С – 104
Теләге булған булдырған. Г – 21
Теләге булһа, сараһы табыла. К – 23
Теләгән әмәлен эҙләр, теләмәгән сәбәбен эҙләр. К – 146
Теләк — эштең яртыһы. Г – 21
Теләк янына терәк кәрәк. О – 24
Терһәк яҡын да — тешләп булмай. Б – 46
Терпе лә балаһын, «йомшағым», — тип, ҡарға ла балаһын «аппағым», — тип һейә. В – 153, С – 42
Тешең барҙа ашап ҡал, кесең барҙа эшләп ҡал. Е – 17
Тешһеҙгә һәр сәтләүек тешһеҙ. Т – 11
Тибешеп торһаң да, тиңең менән тор. В – 167
Тибешкәндә лә тиң яҡшы. В – 167
Тиҙ ҡауышҡан тиҙ айырылыр. С – 35
Тик торған — отторған, тик тормаған — туҡ торған. М – 7
Тик торған да юҡ, эш ҡырған да юҡ. М – 31
Тик тормаған телдә бәлә бар. К – 138
Тик тормаған теленән табыр. Л – 43
Тик тормаған туҡ торған. К – 156
Тик тороп, туҡ булмаçһың. Н – 164
Тиккә һыйыр ҙа мышнамай. Д – 11
Тикәнһеҙ гел булмай. Н – 229
Тилегә түрә юҡ. Д – 87
Тилене килегә һалып тейһәң дә, тиле булыр. Д – 88
Тиленең уйында ни, телендә шул. У – 8
Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ. К – 175
Тимерсе бысаҡҡа йәлсемәç (туймай). П – 52, С – 34
Тин тинде һаҡлай. Г – 75, Д – 27
Тин янына тин һыя. Д – 28
Тинтәктең таяғы ҡырҡ, берене теймәһә, берене тейә. Д – 90
Тиң-ҡушындан ҡул һелтәмә, бер кенде кәрәк булыр. Н – 157
Тир менән сир сыға. С – 24

Тир түкмәйөнсә труддень булмаҫ, бил бөкмәйенсә бураң тулмаҫ. Н – 125, Т – 26
Тиреҫ сығарһаң ерөңә, ташып бөтөрә алмаҫһың өйөңә. З – 19
Тирләп эшләһәң, тәмләп ашарһың. Р – 3
Тирә-яғым яу булһа ла, өйөм эсе һау булһын. М – 38, Х – 21
Тоҫһоҫҫо күҫһеҫ ҫә бөлә. Д – 86
Тормош бер алдын, бөр артын күрһәтә. Ч – 1
Торһам — ашым, ятһам — башым. Л – 13
Тотолмаған уғры түгел. Н – 160
Төймә урлаған дәйә лә урлар. К – 169, Т – 22
Төймәләйҫе дөйәләй итмә. И – 40, Н – 117
Төлкө — тауҫа, эт — бауҫа. Ж – 12
Төҫө барҫаң төңөлмә. К – 112
Төҫө менән түгел, эше менән. Н – 195
Туй уңайы менән тун бөтәйә. З – 18
Туй үткәс, думбыра ҡаҡмайҫар. П – 58
Туйга барһаң, туйып бар, ебәк кейем кейеп бар. В – 5
Туйҫан һуң дөмбөр ҡаҡмайҫар. П – 63
Туҡ күңөлө хикмәттә, ас күңеле икмәктә. У – 33
Туҡ сағында аслығында ни ашағаныңды онотма. П – 92
Тулҡын тулап ярҫан сыға алмай. Б – 43
Тун да булһын, мул да булһын. И – 21
Тун да киттө, тауыш та беттө. И – 8
Тура эйткән туғанына ярамаған. Г – 38, П – 82
Тура һүҫгә яуап юҡ. Н – 39
Тушы бар ҫа, ушы юҡ. В – 81, П – 32
Түҫгән тимер өҫгән. Ч – 2
Түҫгән түш ейгән. Т – 11
Түҫгәнгә — түш. Т – 11
Түңгәк бәләкәй булһа ла, арба ауҫара. И – 15, Н – 213
Түр кемдекө, мөндәр шуныҡы. Ч – 11, 75
Түрә үтә күрә. Т – 19
Тымыҫыҡ күлде ҡорт баҫыр. В – 56
Тымыҡ күлдә (һыуҫа) ҡорт уйнай (мыжғый). В – 56, С – 160, Т – 16
Тымыҫыҡ күлдең ҡорто күп. Т – 16
Тымыҫыҡ һыуҫың төбө ҡорт. Т – 16
Тымыҡ күлгә шайтан оялай. Т – 16
Тырышҡан табыр, ташҡа ҡаҫаҡ ҡағыр. Н – 186
Тыуған илдең әреме лә тәмлө. Д – 95
Тыуған илдән туйған юҡ. В – 152
Тыумаған балаға туҫ бишек. Н – 108, 201, Ц – 3
Тыумаған тай, алтын эйәр — атланып, билен һындырма. Н – 126

Тыумаған тайға нукта үрмә. Н – 126, 134
Тыумаған тайҙың билен һындырма. Н – 126
Тыумаған туры алашаның, атланып, бил һөйәген һындырма. Н – 126
Тыштаң ялтырай, эстән ҡалтырай. Л – 41, Н – 8, С – 15, 39, 135
Тышы мамыҡ, эсе ҡабыҡ. С – 123
Тәмле нәмә (әйбер) күп булмай. Ч – 4
Тәмле тел йылан арбар. Л – 3, С – 98
Тәрән йылға балыҡка бай, һай йылғалар таллыҡка бай. Г – 28
Тәрән йылга тын (тыныс) аға. Г – 16, Т – 15
Тәрән йылға тын ағыр, һай йылға шаулап ағыр. Г – 16
Тәртә араһына бер кергәс, тарта алмайым, — тип торма. В – 88
Тәртәгә бер өгелгәс, тартмай хәлең юҡ. Н – 65
Тәуге белен — әүеш тә мәүеш. П – 4
Тәүге белен төйөрлө була. П – 4
Тәүәккәлләгән таш йоткан (ярған). Д – 70, К – 144, 164, С – 113

У

Уҙған болотто тотоп булмай. П – 97
Уҙған эшкә — салауат. Ч – 56
Уйлаған — бер откан, тәүәккәлләгән — ике откан. Р – 23
Уйламай баҫҡан — ҡайғыға баткан. О – 49
Уйламай һөйләгән — ауырымай үлгән. Л – 42, Н – 221, Т – 6
Уйлаһаң, уйылып китерлек. К – 21
Уйна ла көл, эшләргә лә бел. В – 78
Уйнап әйтелһә лә, уйлап әйтелгән. В – 15, 67
Уйнап һөйләһәң дә, уйлап һөйлә. В – 15, 67, Ш – 6
Уйнауын уйна, эшөңде лә уйла. В – 78
Уйын уйын урынында, эш эш урынында. Ш – 5
Уйындағы — телендә. Ч – 52
Уйындан — уймаҡ, табанан — ҡоймаҡ. З – 34
Уйыңа килгән алдыңа килер. П – 95
Уйындан уймаҡ сыға. И – 38, Ш – 6
Уҡымаған кеше — туҡылмаған кизе. Ч – 16
«Уҡыным», тимә, «белдем», тиген. Н – 109
Уҡыу төбө — туҡыу. П – 23
Уҡыуҙың үҙе ауыр булһа ла, емеше тәмле була. Т – 25
Улы барҙың ҡулы бар. У – 56
Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла. К – 176, С – 177, Т – 4

Улың асыуланһа, түренә мен, кейәүең асыуланһа, ишек бауын тот. С – 176
Ун бәләнең туғыҙы — телдән. Я – 12
Ун икенөң бере юк. Л – 46
Унау берәүҙе көтмәй. С – 56
Уңған ҡатын — ир күрке, матур ҡатын — ил күркө. Х – 23
Уңмаған юлды ҡыума. Б – 27
Урлаған бер ғәйепле, урлатҡан меңғәйепле. К – 168
Урланған малда бәрәкәт юк. К – 108
Урман артындағын күрә, бүрек аҫтындағын күрмәй. З – 10
Урман — кейекһеҙ, әҙәм көйөкһеҙ булмаҫ. В – 60
Урман — ҡолаҡ, ялан — күҙ. Л – 27
Урманға утын ташымайҙар. В – 21, 57
Урманға утын тейәп бармайҙар. В – 21
Усағы ниндәй — ялҡыны шундай. К – 44
Уҫаҡ япрағы елһеҙ көндә лә өлпелдәй. О – 45
Уҫал тел — утлы киҫәү. З – 45
Уҫал тел ҡоралдан хәтәр. З – 46
Ут менә уйнама, бешерһең. Н – 211, С – 21
Ут менән уйнама, үҙең көйөрһөң. Н – 132
Ут менән һыу ҡауышмаҫ. О – 10
Ут та — бәлә, һыу ҙа — бәлә, ут менән һыу булмаһа, тағы ла бәлә. О – 7
Ут төтөнһеҙ булмай, төтөн утһыҙ булмай. Н – 241
Ут төтөнһеҙ булмай. О – 8
Ут һалмаһаң, ҡутын да янмай. И – 9
Ут янмайса, төтөн сыҡмай. Н – 224
Уттан — ут, үстән үс үрсей. З – 44
Уттан ҡасып — ялҡынға, болоттан ҡасып ямғырға юлыҡҡан. И – 48
Утты ваҡытында һүндер. И – 57
Уттың ялы-ҡойроғо юк. В – 33
Утһыҙ төтөн булмай. Д – 94
Уты һүнһә лә, ҡуҙы ҡала. З – 24
Утыҙ тештән сыҡҡан утыҙ ырыуға (ауылға) етер. М – 26

Ү

Үгеҙ булмағайы сурт (черт) булһын, балаларға һөт булһын. Б – 85
Үгеҙ һау ҙа, һөт бир. П – 34
Үгөҙ үлһә — ит, арба ватылһа — утын. Г – 32, Ж – 7, П – 1
Үгөҙенә күрә сыбыртҡыһы. П – 20
Үгәй инә — һарымһаҡ. В – 20
Үҙ-үҙенде мактама, кеше һине мактаһын. С – 30

Үҙ босоғон күрмәй, кеше босоғон ҡуймай. В – 64
Үҙ елкәмде күрмәйем, ҡәйнәмдеке ҡап-ҡара. С – 43
Үҙ илем — алтын бишек, кеше иленең төбе тишек. Р – 26
Үҙ илемдең тетене лә тәмле. И – 11
Үҙ йортонда алйот та хужа. И – 1
Үҙ ҡайғың уҙәктә, кеше ҡайгыһы кештәктә. С – 49
Үҙ ҡылғаның үҙеңә ҡайта. К – 13
Үҙ ояһында эт тә юлбарыҫ. В – 41, 49, Н – 43
Үҙ өйөмдә — үҙ көйөм. Н – 42
Үҙ самаңды үҙең бел. В – 164
Үҙ сүплегендә әтәс тә батыр. И – 27
Үҙ урыныңды үҙең бөл. З – 49
Үҙе йыгылған иламаҫ. К – 161
Үҙе ҡунаҡ саҡырған, үҙе баланға киткән. Д – 52, П – 38
Үҙе ҡурҡа, үҙе йолҡа. И – 36
Үҙе ҡыҙыл, үҙәге ҡорт. Л – 41, Р – 32, С – 135
Үҙе туйған, күҙе туймаған. В – 80, С – 32
Үҙе уңған өгеттең ата-инәһөн һорама. Н – 185
Үҙе урлай, үҙе юллай. К – 180
Үҙе ут сәсә, үҙе һыу һибә. В – 3
Үҙе юҡтың күҙе юҡ. З – 6
Үҙе яман туғанын яманлар. Х – 41
Үҙем ҡарт булһам да, йөрәгем йәш. С – 31
Үҙем тапҡан мал түгел, атайҙыҡы йәл түгел. Ч – 71
Үҙем ярлы, буйым ғәрле. Г – 43
Үҙем дә йәл, малай ҙа. И – 32
Үҙемдеке — үҙәктә, кешенекө — кештәктә. Ч – 66
Үҙен бәхетле һанаған бәхетле булыр. С – 170
Үҙең белмәгән эшкә тотонма. Н – 128
Үҙең нисек, мин дә шулай. К – 51
Үҙең сәскәнде үҙең ур. С – 29
Үҙең ултырған ботаҡҡа балта сапма. Н – 174
Үҙеңде ҙурлама, көшөнө хурлама. И – 31
Үҙеңде үҙең мактама, кеше һинө мактаһын. Н – 209, С – 30
Үҙеңдеке — үҙәктә. С – 44
Үлгән һыйыр һөтлө була, киткән килен уңған була. Т – 1
Үлгән һыйыр һөтлө була. К – 104, У – 51, 59
Үле арыҫландан тере бесәй артыҡ. Л – 62
Үлем «бай», «ярлы» тип тормай. С – 119
Үлем ике килмәй. С – 117
Үлем ҡартын, йәшен ҡарап тормай (һорап килмәй). С – 121
Үлем ҡаршыһында барыбыҙ ҙа бер тигеҙ. С – 116
Үлемдең ишеге түрәгә лә бер, ҡараға ла бер. С – 119
Үлемдән ҡасып ҡотолоу юҡ. О – 66, С – 118

Үлемдән оят көслө. Б – 40
Үлемдән хурлыҡ яман. Л – 68
Үлеп барған һаламға йәбешкән. У – 65
Үлмәктән ҡалмаҡ юҡ. С – 118
Үрғә төкөрмә, битеңә төшөр. В – 69
Үрмәксенән курмәксе. М – 3
Үткән ғүмер — аҡҡан һыу. В – 124, П – 98
Үткән кире ҡайтмай. П – 99
Үткән эш — бөткән эш. К – 166, Ч – 40
Үткән эшкә үкенмә, үкенһәң дә өткермәҫ. К – 166, Ч – 41
Үткән эштән төш яҡшы. К – 166
Үткәндә ҡайтарып булмай. П – 99, 104
Үткәндәр кире ҡайтмай. В – 166
Үтмәҫ тауар — мең алтын. Н – 223

Ф

Форсаты етмәй ағас япрағы ла өҫөлмәй. В – 126
Фәрештә булһа – ҡанатлы, шайтан булһа – ҡойроҡло. Е – 4

Х

Хаҡ ярым хаҡ, бот ярым борсаҡ. Э – 2
Хаҡлыҡтан хаҡлыҡ эҫләмәйҫәр. О – 63
Хаҡына күрә эше, тырмаһына күрә төшө. К – 32
Халыҡ барҙа хаҡлыҡ бар. Г – 13
Халыҡ дуҫлығы — ил байлығы. П – 72
Халыҡ теле — хаҡлыҡ теле. С – 105
Хан ҡыҙында ла хата була. И – 22
Харам мал харап итә. Ж – 2
Хаталаныу ғәйеп түгел, хатаны танымау ғәйеп. В – 93
Хеҙмәте ҡаты — емеше татлы. Г – 59
Хеҙмәтенә күрә хөрмәтө. П – 75
Хикмәт атында (исемендә) түгел, затында. Д – 24
Хитланмай һыуҙан этләй ҙә тота алмаҫһың. Б – 24
Холҡон белмәгән малдың һыртына йәбөшмә. Н – 198
Хужаһыҙ йортта бәрәкәт юҡ. Б – 28
Хужаһына күрә ялсыһы. К – 53
Хужаһына ярайым тиһәң, этен маҡта. П – 76
Хур булып йәшәүҙән намыҫлы үлем артыҡ. Л – 67
Хыял-маҡсат тау артында, бәлә-ҡаза ишек артында. Д – 85
Хәбәр дүрт аяҡлы. М – 26

Хәҙимәгә — хеҙимә, мә һиңә лә, мә миңә. П – 64
Хәйерсегә ел ҡаршы. М – 19, Н – 2, 70
Хәйерсегә ҡыяр бирһәң, кәкре икән, тиер. Д – 3
Хәйерсегә сәләм бирһәң, ямаулыҡ (хәйер) һорай. Д – 3, 6, П – 111
Хәйерсенең ялсыһы үлгән. У – 2
Хәйләле эш хәйерһеҙ. К – 134
Хәйләһеҙ донъя файҙаһыҙ. П – 102
Хәкиҡәт утта ла янмай, һыуҙа ла батмай. В – 132, П – 78
Хәкиҡәткә хаҡ юҡ. П – 81
Хәлле — хәленсә, ярлы — дарманынса. Б – 50
Хәлфәһенә күрә шәкерте. К – 52
Хәрәм мал хәйерһеҙ була. Х – 46
Хәтер — тишек иләк. П – 2

Һ

Һабы килһә — йәбе, йәбе килһә, һабы (ибе) килмәй. К – 69
Һайланған — һаҙға, ҡапланған баҙға. М – 28
Һайланған — һаҙға, осраған — таҙға. К – 130
Һаҡалы үҫкән, аҡылы үҫмәгән. Б – 71
Һаҡланғанды һаҡлармын, тигән (Алла). Б – 33, О – 35
Һандуғас һайрауынан билдәле. В – 89
Һандуғас юҡ йылда ҡарға дан тотор. В – 54, К – 119, Н – 3
Һаңғырауға — тештән һуң. Л – 82
Һаран ике түләй. С – 93
Һарыҡ тиреһе ябынған бүре. В – 105, О – 39
Һаҫыған ауыҙҙан һөрһөгән һүҙ сыға. Г – 34
Һатып алган — һарымһаҡ. К – 177
Һауалағы торнанан ҡулыңдағы тургай (сәпсек) артыҡ. Ж – 9, Л – 63, С – 74
Һаулығың булмаһа, байлығыңдың ҡәҙере юҡ. Н – 169
Һаулыҡ байлыҡтан ҡиммәт. З – 38
Һаулыҡтың бар сағында ҡәҙере юҡ. Т – 23
Һауыт-һаба ҡырһаң да, самауырыңды ҡалдыр. П – 68
Һеркәһе һыу күтәрмәй. У – 24
Һин — миңә, мин — һиңә. Т – 31
Һин белгәнде мин киптереп элгән. Т – 33
Һин дә мулла, мин дә мулла, атҡа бесән кем һала? М – 30
Һин дә түрә, мин дә түрә, талдан ситән кем үрә? М – 30
Һин миңә теймә, мин һиңә теймәйем. Т – 30
Һин тигәндә, мин яҡмаған мунса керергә әҙер. Д – 41
Һин тигәндә, мин. Д – 41
Һин уға бер нәмә әйтәһең, ул үҙенекен һейләй. Е – 3, Я – 5

Һин уға бер нәмә һөйләйһең, ул икенсене һөйләй. Я – 4
Һин әлек тыуһаң, мин белеп тыуған. М – 33
Һис булғансы, кис булһын. Л – 66
Һонолмай һыу ҙа эсеп булмай. Б – 24, Ч – 39
Һорахаң — бирмәй, урлахаң — күрмәй. П – 101
Һорауына күрә яуабы. К – 46
Һөҙгәк һыйырға (тәкәгә) Хоҙай мөгөҙ бирмәгән. Б – 60, Н – 116
Һөйҙәргән дә тел, көйҙәргән дә тел. Я – 10
Һөйләгән — аҡыл сәсә, тыңлаған — аҡыл йыя. К – 128
Һөйләргә ашыҡма, эшләргә ашыҡ. Н – 183
Һөйләүе еңел, эшләүе ҡыйын. С – 89
Һөймәгәнгә һөйкәлмә. Н – 75
Һөймәҫ кешә һыймаҫ. О – 67
Һөйәкһеҙ тел ни һөйләмәҫ. Я – 8
Һөлөк көм аяғында, уны шул ала. С – 144
Һөнәр алды — аҡыл. П – 13
Һөнәр ашарға һорамай, үҙе ашата. Р – 20
Һөнәр — ҡулдағы алтын балдаҡ. Р – 17
Һөнәре бар күккә осор. С – 25
Һөнәре бар хур булмаҫ. С – 25
Һөнәрле аслыҡ күрмәҫ. Р – 18
Һөнәрле үлмәҫ, һөнәрһеҙ көн күрмәҫ. Р – 18
Һөрлөкмәгән ат булмай. Н – 225
Һөт менән кергән йән менән сыҡҡан. Ч – 60
Һөткә ауыҙы бөшкән һыуҙы өрөп эскән. О – 2
Һуға алмаған күҫәк күтәргән. К – 167
Һуҙып һалһаң — бүрәнә, һөйәп ҡуйһаң — таҡта. Н – 232
Һуйған да ҡаплаған. Б – 81
Һуҡмаҫ һуйыл күтәрер. К – 140
Һуҡыр (бер) тин тормай. Г – 74
Һуҡыр тауыҡҡа бары ла бойҙай. Н – 45, С – 97
Һуҡыр үҙенекен туҡыр. С – 100
Һуҡырҙан юл һорамайҙар. У – 30
Һуҡырҙың теләгәне ике күҙ. Н – 26
Һунарсы һунарсыны алыҫтан күрә. Р – 42
Һуңға ҡалған — туңға ҡалған. У – 60
Һүҙ менән түгәл, эш менән күрһәт. С – 77
Һүҙ үтмәгән өрҙә уҡ үтә. Г – 17, Н – 146
Һүҙ һейләһәң, уйлап һөйлә. С – 151
Һүҙ һөйләп, тамаҡ туймай. Р – 7, С – 140
Һүҙ һүҙ сыгара, йоҙроҡ күҙ сығара. С – 110
Һүҙ эйәһе мөнән йөрөмәй. С – 103
Һүҙ яҙып, май сыҡмаҫ. Ч – 63
Һүҙгә һаран, фекергә аран. С – 107

Һүҙе һүҙгә оҡшамай, ауыҙы һүҙҙән бушамай. Г – 35
Һүҙенә ҡарама, эшенә ҡара. Н – 163
Һүҙең көмөш булһа, тик тороуың — алтын. С – 109
Һүҙең һирәк булһа, аҡылың зирәк булыр. К – 136
Һүҙҙең тураһын баланан ишет. У – 64
Һүҙҙән һүҙ сыға. С – 110
Һый ҡиммәт түгел, яҡты йөҙ ҡиммәт. Н – 120
Һыйлағанда һыу булһа ла эс. К – 75, П – 114
Һыйлы көнөң һыйырҙа. К – 100
Һыйыр бығаулагансы түҙгән, ыуыҙ бешкәнсе үлгән. П – 96
Һыйыр һыйпағанды белмәҫ. Н – 74
Һыйыр тулаһа, аттан яман. С – 66
Һыйырға септә килөшмәй. К – 17
Һыйырҙың һөтө телендә. У – 17
Һылыулыҡ һыу буйлатмай. С – 14
Һылыу һылыу күренмәҫ, һөйгән һылыу күренөр. Н – 165
Һыныҡҡа һылтау (табыла). У – 22, 37
Һыу башынан болғана. В – 97
Һыу ҡәҙерен шишмә ҡороғас белерһең. Ц – 2, Ч – 49
Һыу яҙып май сыҡмаҫ. В – 100
Һыуға батҡанға ямғыр ҡурҡыныс түгел. М – 32
Һыуға инмәй йөҙөргә өйрәнеп булмай. Н – 131, 171
Һыуға ла төшһөн, ҡоро ла сыҡһын. И – 21
Һыуға һәнәк менән яҙылған. В – 100, Э – 3
Һыуҙан сыҡҡан утҡа төшкән. О – 52
Һыуҙы таяҡ менән, кешене тел менән үлсәйҙәр. О – 44
Һыуҙың ҡәҙерен ҡоҙоғоң ҡороғас белерһең. Ц – 2
Һыуланғас, ямғыр ҡурҡыныс түгел. С – 57
Һәләтлене һәнәк тотоуынан белеп була. В – 92, К – 38
Һәнәктән көрәк булған. И – 41
Һәр емештең үҙ миҙгелө. В – 154
Һәр замандың үҙ йолаһы. У – 11
Һәр илдең үҙ йолаһы. В – 32, С – 86, Ч – 45, 46
Һәр кем үҙ бәхетенә уҙе сәбәп. К – 12
Һәр кем үҙ күмәсенә көл тарта. В – 144, К – 8
Һәр кем үҙ өйөндә батша. В – 50
Һәр кем үҙ тирмәненә һыу ҡоя. К – 8
Һәр кем үҙ төнлөгөнән ҡарап фөкер йөрөтә. К – 11
Һәр кем үҙенә әллә кем. В – 143
Һәр кем үҙенсә табына, үҙенсә абына. В – 158, К – 9
Һәр кем үҙөнсә уңа, үҙенсә туңа. В – 148
Һәр кемдеке үҙенә, айҙай күрөнер күҙөнә. К – 7
Һәр кемдең бармағы үҙенә таба кәк(ө)ре. В – 141
Һәр кемдең үҙ аҡылы үҙөндә. В – 161
Һәр кемдең үҙ балаһы үҙенә кәҙерлө. В – 155

Һәр кемдең үҙ бәхете үҙенә. В – 156
Һәр кемдең үҙ зауығы. Н – 10, О – 3
Һәр кемдең үҙ йыры. В – 139
Һәр кемдең үҙ ҡайғыһы үҙенә көсле. В – 157
Һәр кемдең үҙ яғы үҙенә ҡәҙерле. В – 152
Һәр ҡарға үҙенсә ҡарҡылдай. В – 138
Һәр ҡош үҙенсә һайрай. В – 139
Һәр нәмә үҙ урынында яҡшы. В – 137
Һәр нәмә үҙгәрә. В – 134
Һәр нәмәгә сәбәп бар. В – 129
Һәр нәмәнең үҙ ваҡыты. В – 130
Һәр нәмәнең үҙ урыны. В – 128
Һәр нәмәнең үҙ яйы. Н – 13
Һәр сәскәнең үҙ еҫе. К – 10
Һәр эштең дә яйы бар, арбаның да майы бар. Н – 14
Һәр эштең үҙ яйы. К – 6
Һәр ялтыраған алтын түгәл. Н – 101, 103

Ш

Шайтан таяғына ҡырау төшмәй. Ч – 35
Шайтан ярлы, беҙ бай. Ч – 23
Шатлыҡ күрһәң, шашма, ҡаза күрһәң, аҙашма. К – 76
Шатлыҡ менән хәсрәт йәнәш йөрөй. Р – 6
Шешә дуҫы шештән яман. П – 119
Шикле шикләнөр, сәкмәнен бөркәнер. С – 72
Шиңгән сәскә ҡабат терелмәй. У – 39
Шығырлауыҡ ағас ҡырҡ йыл ултырыр. Б – 44, С – 91
Шым аҡҡан һыуҙан, өрмәй торған эттән һаҡлан. Н – 82
Шыр тиле. К – 122

Ы

Ығыштыҡы —ештән һүң. Л – 82
Ырғығанда икеләнмә — ҡоларһың. Г – 22
Ысын дуҫ алдында мактамаҫ, артында мактар. Х – 16
Ышанған тауҙа кейөк юҡ. Н – 20
Ыштанһыҙ билгә — ҡайыш бау. Б – 26

Э

Эҙе-юлы юҡ. Ш – 4
Эҙләгән — тапҡан, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан. К – 131
Эйелгән башты ҡылыс сапмай. П – 22
Эйәһенә күрә бейәне. К – 45, П – 21

Энə төртөр урын юк. Я – 3
Энə үткəн ерҗəн еп тə үтə. Г – 7, К – 173
Эңер төшкəс, күлəгə кəрəкмəй. С – 147
Эсең тулы ут булһа ла, кеше алдында «уф» тимə. Х – 26
Эсмəм, тигəн ҡоҗоктан өс əйləнəп эсерһең. Н – 157
Эт аламаһы илгə бүре килтөрөр (килтерə). Н – 69
Эт артынан — ҡойроҡ. К – 172
Эт артында — ҡой(о)роҡ, түрə артында — бойороҡ. У – 23
Эт ауыҗынан һөйəк алып булмаҫ. З – 35
Эт бөсəнде үҗе лə ашамай, атҡа ла ашатмай. С – 131
Эт йүгерегəн бүре һөймəҫ. Б – 97
Эт йүгереген төлкə һөймəҫ. Т – 35
Эт күҗе төтəн белмəҫ. Б – 39, К – 105
Эт күңеле бер һөйəк. Ч – 24
Эт ҡоторһа, эйəһен тешлəй (талай). Б – 41
Эт менəн дуҫ (ҡоҗа) булһаң, һөйəк менəн туй үткəрерһең. С – 13, 27
Эт оя́һында көслə. В – 41, 48, Н – 44
Эт өрəп торор, каруан үтеп торор. С – 130
Эт өрəр, бүре йөрəр. В – 110, 135, С – 130
Эт саба тип, бет саба. К – 79
Эт тиһəң — йөнə юк, əҗəм тиһəң — йүне юк. Н – 237
Эт туйғаН өрəндə, ир тыуғаН ерендə. Г – 10
Эт эсенə һары май килешмəй. Д – 13
Эт — эткə, эт — ҡойроҡка, ҡойроҡ — һыртҡа. И – 37
Эт этлегəн итə, итəк-еңде йырта. С – 82
Эт этлəгəн иткəн — үҗ башына еткəн. К – 13
Эт яллағаН кисеү кисмəҫ. Н – 90
Эт яманы буранда ҡотора. Д – 38
Этенəн күреп, көсөгə өрə. М – 3
Эткə — эт үлəме. С – 134
Эткə һөйəк ыргытһаң, өрəүенəн туктар. Н – 113
Этлеккə тəһəрəт кəрəкмəй. Д – 40
Эттең агы ла бер, ҡараһы ла бер. Ч – 32
Эттең дуҫы күп булыр, йəненə файҗаһы юк булыр. В – 127, И – 17
Эттең ҡойроғона баҫһаң, «еҗнə», ти. И – 16, Н – 76
Эш айыу түгел, урманга ҡасмаҫ. Р – 2
Эш белгəнгə үңыш юлдаш. К – 39
Эш белмəгəн ҡоралынан күрер. М – 8
Эш бөткəс, үйнарға ярай. К – 93
Эш оҫтаһынан ҡурҡа. Д – 23
Эш үҗе өйрəтə. Д – 21, Н – 63
Эш үткəс, үкенеүҗə файҗа юк. С – 127
Эше барҗың ашы бар. Д – 22

Эше ҡаты, икмәге татлы. Г – 59
Эшенә күрә ашы. К – 29
Эшеңде башлама, башлаһаң — ташлама. Н – 78
Эшкә булһа — «алла башым», ашҡа булһа — «ҡайҙа ҡашығым?». Л – 21, Т – 13
Эшкә булһа — «уф, табаным», ашҡа булһа — «килтер табағым». В – 45
Эшкә тигәндә, юҡ дарман, ашҡа тигәндә, йән-фарман. З – 8, К – 3
Эшле — эш өҫтөндә, әрәмтамаҡ — әҙәм өҫтендә. Д – 18
Эшләгән — тапҡан, ауыҙына ҡапҡан. Б – 80
Эшләмәгән ашамай. К – 143
Эшләһәң — тир сыға, тир менән сир сыға. Ч – 17
Эшләһәң, эш ҡарышмай. Б – 90, Л – 37
Эшләһәң, яҡшы эшлә. Е – 8, Р – 14
Эшләп алган аҡса — алтын, бүлеп биргән аҡса — ҡағыҙ. З – 31
Эшсән бәхетте эштән эҙләр, эшкинмәгән ситтән эҙләр. Н – 143
Эште башлар алдынан аҙағын уйла. Н – 79
Эште башлауы ғына ауыр, башлаһаң, эш ҡарышмай. В – 150, Л – 37
Эште эшләгән кеше өҫтөнә өйәләр. К – 124
Эште ярты юлда ҡалдыргансы, башламағаның яҡшы. Н – 78
Эштең башында маҡтанма, аҙағында маҡтан. Н – 211
Эштең тәме — аҙагында. К – 92, Н – 145
Эшһеҙ ғүмер — утһыҙ күмер. Б – 16
Эшһеҙгә көн үтмәй, эшлегә көн етмәй. К – 141

Ә

Әҙ ашаһаң, күп йәшәрһең. Е – 18
Әҙ һөйлә, күп эшлә. М – 17
Әҙҙе ҡыҙғанып, күптән буш ҡалма. Н – 124
Әҙәм һөйләр, яҙмыш көйләр. Ч – 19
Әҙәпһеҙгә иман юҡ. У – 3
Әҙергә — хәҙер (бәҙер). Л – 7
Әжәл һайлап килмәй. С – 119
Әжәлгә дарыу юк. О – 65
Әйтереңде уйлап әйт. С – 124
Әйтеүе еңел, эшләүе ҡыйын. Г – 37
Әйткән һүҙ — аткан уҡ. Д – 1
Әйткән һүҙ кире ҡайтмай. С – 106
Әйткән һүҙеңдә тора бел. Б – 84, Д – 1, Н – 115
Әйткән һүҙеңә хужа бул. Б – 84

Әкрен барған тиҙ етер. Т – 17
Әкрен уйла, тиҙ эшлә. Д – 84
Әллә йүкә өҙәлә, әллә ҡайыш өҙәлә. Т – 18
Әмәленә күрә ғәмәле. Б – 91
Әрһеҙлек — үҙең өсөн, баҫалҡалыҡ — кеше өсөн. Н – 28
Әсене татымаған сөсөнөң ҡәҙерен белмәҫ. Н – 95
Әсә һөтө менән инмәгән кәзә һөте менән инмәҫ. Ч – 7
Әсә хаҡы — Тәңре хаҡы. М – 11
Әсәй үгәй булһа, атай еҙнәй була. П – 89
Әсәһендә — ҡыҙ ҡайғыһы, ҡыҙында — үҙ ҡайғыһы. М – 10
Әүәл уйла, унан һөйлә. С – 124
Әүәл яфа килмәй, һуңынан вафа килмәй. Н – 204

Ю

Юғалған аҡса табыла, юғалған ваҡыт табылмай. П – 69
Юғалған бысаҡтың һабы алтын. П – 100
Юғалған ваҡыт табылмай. В – 166
Юғалған ҡылыстың һабы алтын. Т – 1, У – 59
Юғарыға ҡарап фекер ит, түбәнгә ҡарап шөкөр ит. В – 145
Юғарынан йығылған ҡаты тешөр. Ч – 25
Юҡ, тип кейенмә, бар, тип һөйөнмә. Н – 170
«Юҡ»ҡа мин дә туҡ. Н – 29
Юҡҡа суд юҡ, заруратта зыян юҡ. Н – 30
Юҡтан ҡоҙағый. Н – 4
Юҡтан сыҡҡан ығы-зығы. И – 53
«Юҡ»тың башы ауыртмай. У – 25
Юҡтың яуабы юҡ. Н – 30
Юл ғазабы — гүр ғазабы. Д – 71
Юл урауын белмәгән юлда илап үлтырған. Е – 14
Юлға сыҡһаң, иртә сыҡ. К – 126
Юлға сыҡһаң, ес кенлөк (аҙналыҡ) аҙығың ҡалдырма. Е – 2
Юлға сыҡһаң, өс көнлек аҙығың яныңда булһын. В – 11
Юраған юш килә. П – 95
Юрғаныңа ҡарап, аяғың һуҙ. П – 48

Я

Яҙған ризыҡ теш һындырып керер. Б – 58, С – 168
Яҙғы боҙға яҫтыҡтай булһа ла ышанма, көҙгө боҙға көҙгөләй булһа ла ышан. В – 79
Яҙғы көн йыл туйҙыра. В – 81
Яҙғы көн — ярты аҡыл, кеҙгө көн – арт аҡыл. В – 82
Яҙмыш юлдан яҙҙырмаҫ. С – 164
Яҙмыштан үҙмыш юҡ. О – 68, Ч – 28

Яҙмышты ямап булмай. С – 165
Яҙығына күрә язаһы. К – 36
Якшы атка ҡамсы кәрәкмәй. Н – 38, Х – 13
Якшы аш ҡалғансы, яман ҡорһаҡ йыртылһын. Х – 32
Якшы ир менән ҡатын хур булмай. У – 35
Якшы исем малдан артык. Д – 45
Якшы ҡатын — йән аҙығы, яман ҡатын — баш ҡаҙығы. Д – 43, Х – 12
Якшы ҡатың юктан ҡарын туйҙырыр, яман ҡатын яңғыҙ атын һуйҙырыр. Д – 44
Якшы менән юлдаш булһаң — ирешерһең моратка, яман менән юлдаш булһаң — ҡалырһың оятка. С – 11
Якшы нәмә күп булмай. Х – 15
Якшы һүҙ — йән аҙығы, яман һүҙ — баш ҡаҙығы. Д – 50, Л – 2, Х – 45
Якшы һүҙ балдан татлы. Л – 5
Якшы һүҙ йәнгә рәхәт, яман һүҙ йәнгә йәрәхәт. Л – 2
Якшы һүҙ яу туктатырға ярай. Л – 3
Якшы хужа юкты бар итер, яман хужа барҙы юк итер. Д – 56
Якшыға эйәргән ялпайған, яманға эйәргән ҡартайған. Д – 54, С – 7
Якшылык тиҙ онотолһа ла, яманлык онотолмай. Л – 40
Якшылыкка — якшылык. Н – 17
Якшылыктың ҡәҙерен эт тә белә. И – 33
Якшыһыҙ яман булмаҫ, яманһыҙ якшы булмаҫ. Н – 231
Якшылык ҡылһаң да, яманлык ҡылһаң да үҙеңә ҡайтыр. К – 13
Якшынан якшы тыуа, ямандан яман тыуа. У – 7
Якын дуҫ йыраҡ ҡәрендәштән якын. Х – 17
Ялағайланыу ҙа яман, яла яғыу ҙа яман. Л – 39
Ялғандың аяғы етеҙ. Л – 53
Ялғандың аяғы ҡыҫҡа. Л – 52, Н – 25
Ялғансының дөрөҫ һүҙенә лә ышанмаҫтар. К – 127, Л – 31
Ялғансының йорто янған — берәү ҙә ышанмаған. К – 127, Л – 31
Ялкау баҫып йоклай, ултырып эшләй. Л – 23
Ялкау әҙ эшләй, әҙ эшләһә лә, күп тешләй. З – 36
Ялкау кеше аш янында ат кеүек, эш янында ят кеүек. З – 36
Ялкауға ҡашык та ауыр. Л – 25
Ялкауға ҡәбер хәрәм. Л – 22
Ялкауға ҡәҙер юк. К – 132
Ялкауға ҡояш та ваҡытында сыҡмай. Л – 17
Ялкауға көн дә байрам. Л – 20, Т – 27
Ялкауға эш ҡушһаң, башы ауыртыр. Л – 48

Ялҡауға эш өйрәтһәң, ул һиңә аҡыл өйрәтер. С – 159
Ялҡауға ял бөтмәҫ. Д – 25
Ялҡауға ял табыла. Л – 47
Ялҡауҙы йоҡо баҫыр. К – 133
Ялҡауҙың ялы булмай. К – 86
Яман дуҫтан яңғыҙлыҡ яҡшы. С – 6
Яман йөрөмдән яҡшы үлем артыҡ. Л – 67
Яман ҡатын — ғәрәсәтлө көн. С – 38
Яман ҡатын — шайтан ҡамсыһы. З – 42
Яман ҡатын ир ҡартайтыр. З – 41
Яман һүҙҙең ат-эйәрө тағылы. Х – 42
Яман хәбәр тиҙ тарала. Х – 42
Яманға тарыма, тарыһаң арыма. З – 12
Яманға эйәргән — яҙыҡҡа, яҡшыға эйәргән — аҙыҡҡа (юлыҡҡан). С – 11
Яманға ялынма. Д – 46
Яманға ярҙам иткән яҡшыны ярҙан эткән. В – 111
Ямандан яман һүҙ. Г – 34
Ямандан яр буйы ҡас. С – 6
Яманланған эҙләнер, мактаған теҙләнөр. Х – 1
Яманһыҙ яҡшы булмаҫ. Н – 232
Ямауы тыштан һалынған. Ш – 3
Ямғыр яуғанда силәгеңдө тотоп ҡал. С – 111
Ямғырҙа ат һайлама, байрамда ҡыҙ һайлама. В – 162
Янғындан һуң һыу күп булыр. П – 61
Яңғыҙ — ярлы, ғүмерө — зарлы. В – 53
Яңғыҙ бала яуҙан яман. О – 32
Яңғыҙ булып ни ҡырҙың? Колхоз булып өй ҡорҙоң. В – 19
Яңғыҙ ҡарға яҙ килтөрмәҫ. О – 20
Яңғыҙ яу ҡайтармаҫ. О – 12
Яңғыҙға яла күп була. Н – 34
Яңғыҙлыҡ әжәлдән битәр. О – 16
Яңы күлдәккә иҫке ямау. Н – 31
Яңы һөпөртке яңыса һеперә. Н – 246
Яңы салғы ҡаты саба. Н – 246
Яңыны иҫке күтәрә. С – 149
Ярап торорға йорт һалма, ярап торорға ҡатын алма. Д – 42
Ярғанатҡа көн юҡ, яманға им юҡ. Г – 51
Ярҙа ултырып, йөҙөргә өйрәнмәйҙәр. Л – 15
Ярлы көше йомарт була. Ч – 20
Ярлылыҡтың башы — ялҡаулыҡ. Л – 24
Ярлылыҡтың ояты юҡ. Б – 8
Ярыҡ ҡайҙа — өл шунда, ялҡау ҡайҙа — һүҙ шунда. Р – 4
Ятҡан таш мүкләнә, йөрөгән таш шымара. К – 62, Л – 14

Ятып ҡалғансы, атып ҡал. П – 49
Яу бөткәс, батыр күбәйә. К – 74, П – 56
Яу яғанан алғанда, эт итәктән алыр. К – 72
Яуҙан һуң батыр күбәйә. К – 74
Яуҙан һуң яр һалма. П – 59, 62
Яуызлыҡ яуызлыҡ тыуҙыра. З – 44
Яуызлыҡ яуызлыҡҡа тарта (юлыҡтыра). З – 43

ЛЕКСИКОҒРАФИЧЕСКИЕ ИСТОЧНИКИ (СЫҒАНАҚТАР)

1. Башкирско-англо-русский словарь адекватных пословиц / Авт.-сост. Ф. А. Надршина, Э. М. Зубаирова [Созинова]. — Уфа: Китап, 2002.

2. Башҡортса-русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге / Төҙ. И. Ғарипов; Яуап. ред., инеш мәҡәлә авт. Фәнүзә Нәҙершина. — Өфө: Китап, 1994.

3. Башҡорт халыҡ ижады: Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр / Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авт. Ф. Нәҙершина. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1980.

4. Даль В. И. Пословицы русского народа. — М.: «ННН», 1997.

5. Зимин В. И., Спирин А. С. Пословицы и поговорки русского народа. — М. : Сюита, 1996.

6. Ураксин З. Ғ., Нәҙершина Ф. А., Йосопов Х. Ғ. Башҡортса-русса фразеологик һүҙлек. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1973.